✓ Олоно оло тейегеҙ,
Кәңәш алып йөрөгөҙ;
Кесене кесе тейегеҙ,
Кәңәш биреп йөрөгөҙ.

Күҙенә сүп төшөрҙәй,
Күҙһеҙ булып ҡалырҙай
Еҫерҙәрҙең алдында
Күҙенә керпек булығыҙ...

Урал батыр" эпосынан.


ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

29 ОКТЯБРЬ - 4 НОЯБРЬ (ҠАРАСАЙ-ҠЫРПАҒАЙ) 2011 ЙЫЛ

kiskeufa.ru
blog.kiskeufa.ru

2002 йылдан башлап сыға

Һатыуҙа хаҡы ирекле

№44 (462)


## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:


**Аҙыҡ-түлекте етештереү ҙә,**
һатып алыусыға еткереү ҙә еңел түгел



4

**Өлгөлө ғаилә...**
башҡаларға маяҡ



5

**Йырға торош ғүмер,**
йәки Оло ғалим Жәлил Кейекбаев тураһында һүҙ



7

**Күҙҙең һуҡырлығы ла фажиғә,**



8-9 ә рух һуҡырлығы тағы яманыраҡ...

14 ТВ-программа


ӘЙТ, ТИҢӘГЕҘ...

## Тыуған телен белмәгән, ғөрөф-ғәҙәттәрҙе һанға һуҡмаған ҡыҙ-ҡатынды Милләт әсәһе тип атап буламы?

**Үткән аҙнала Өфөлә БР Башҡорт ҡатын-ҡыҙҙар йәмғиәтенең отчет-һайлау конференцияһы булып үтте. Унда ҡатнашыусы ҡатын-ҡыҙҙарҙың бер нисәһенә бирелгә был һорау. Уларҙың яуабы түбәндәгесә булды.**

***Мәрйәм БУРАҠАЕВА, яҙыусы:*** Башҡорт ҡатын-ҡыҙҙары ҡоронда мин 1-се Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайында билдәле ғалим-антрополог Ринат ағай Йосопов һөйләгән сығышты иҫемә төшөрөп ултырҙым: "Башҡорт халҡының генетик коды, иң боронғо архитибы беҙҙең ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙҙа һаҡлана. Тикшеренеүҙәр ваҡытында бынан биш мең йыл элекке ҡатын-ҡыҙҙарҙың баш һөйәге бөгөнгө заман башҡорт ҡатын-ҡыҙҙары баш һөйәге менән бермә-бер тап килеүе асыҡланды. Ә башҡорт ир-егеттәренең генетик коды быуат һайын үҙгәреп, ҡырҡҡа төрләнеп бөткән..." - тигәйне ул. Тимәк, беҙ, башҡорт ҡатын-ҡыҙҙары, мең йылдар буйы башҡорт милләтен һаҡлаусы булып торғанбыҙ. Әммә бынан һуң да беҙ ошо бурысты үтәй алаҫаҡбыҙмы? Был бурысты үтәү өсөн ғаиләндә быуындар сылбыры өҙөлмәүе, рухиәтен имгәнмәүе, йола-традицияларға тоғролоҡ һаҡлау, иң мөһиме, үҙеңдән һуң милләтеңдә дауам итер балалар ҡалдырыу шарт. Йә, кем ғаиләһендә тайпылышһыҙ үтәлә был шарттар? Биш йөҙләп милләттәш әсәләр йыйылған ҡорҙа барыбыҙҙы ла хафаға һалған ошо һорау ҡутәрелгәнмен тейеш ине лә, тик уны телгә алыусы ла булманы. Ә бит был хаҡта - Милләт әсәһе бурыстары хаҡында саң ҡағырға ваҡыт еткән.

Эйе, был исемгә һәр кем лайыҡ була алмай. Әлегә тиклем мин, мәҫәлән, Рабиға Ҡушаеваны Милләт әсәһе тип һанайым. Ниндәй ҡатмарлы Октябрь революцияһынан һуңғы заманда ун ете йәшлек Рабиға ҡатын-ҡыҙҙарҙың ирҙәр менән тиң хоҡуҡлы булыуын күтәреп, оло йыйында сығыш яһай. Ә бөгөнгө заманда мин Милләт әсәһе тигән исемде иң аҡыллы ҡатын-ҡыҙға ғына бирер инем. "Аҡыллы ҡатын ниндәй була һуң?" тигән һорау тыуыр.

**Аҡыллы булыу - аҡыл һатыу йәки тегенән-бынан йыйған аҡылыңды һауа ярып һөйләп йөрөү түгел, ә аҡыллы эш итеү. Милләт әсәһе халыҡты ҡапыл һиҫкәндереп, зиһенен яҡтыртып, аңында боролош яһарлыҡ фекер әйтергә һәм артабан үҙе уҡ шул йүнәлештә эш алып барырға, балаларын халыҡ мәнфәғәте юлында йөрөрлөк кимәлдә тәрбиәләп, өлгә ҡурһәтергә тейеш.**

Милләтте милләт итеүҙә тыуған телдең әһәмиәте баһалап бөткөһөҙ. Әммә күптәр балаһының телде белмәүен мәктәптә тыуған телде уҡытмауға яңһара ла ебәрә. Балаларыбыҙ тыуған телдә һөйләшергә ғаиләлә өйрәнергә тейеш. Был ғына түгел, ғаиләләребеҙҙә милли мөхит булдырыу фарыҙ, бигерәк тә был ҡала шарттарында мөһим. Мәҫәлән, яңыраҡ шундай бер хәл тураһында һөйләнеләр. Англияла уҡып йөрөгән бер башҡорт ҡыҙы әсәһенә ошо илдә йәшәргә ҡалырға теләүен белдерә. Әсәһе уны төрлөсә өгөтләргә маташа, нағыһын һарғайырһың бит, тигән була. "Һинең нағыһынырлыҡ ауылың бар, ә мин подъезды һағынайыммы ни?" ти ҡыҙ. Тимәк, был балаға үҫкән сағында ғаиләлә милли мөхит булдырылмаған. Өйөндә тыуған телдә һөйләшһәләр, тыуған мондар яңғыраһа, тыуғандар менән аралашып үҫһә, был ҡыҙ былай тип әйтә алмаҫ ине әсәһенә...


(Дауамы 12-13-сө биттәрҙә).


БЕҘҘЕҢ ЗАМАН ГЕРОЙЫ

# АМЕРИКАҒА БАРЫП...

## ушу оҫтаһы икәнен раҫлатты



**Күҙ алдына килтерегеҙ: нунчаки тигән һалҡын һуғыш ҡоралы ярҙамында ҡап-ҡара кимоно кейгән ниндзя күҙ әйәрмәслек етеҙлек менән төрлө хәрәкәттәр яһай. Ул, гүйә, төрлө яҡтан һөжүм итеүсе билдәһеҙ дошманды ҡоралһыҙландыра, шул уҡ ваҡытта үҙе матур, гармониялы торошо, фиғеле менән тәгәрмәс кеүек зыр әйләнеп торған нунчакиһын тамашасы өсөн сер йомғағына әүерелдерә. Хәрәкәт телен баһалау өсөн тәржемәсе кәрәк түгел шул: оҫтаны барыһы ла таный. Судьялар ҙа ниндзя кейемендәге Рәсәйлегә иң юғары балл ҡуя... Беҙ тағы бер ушу оҫтаһы, киноактер Брюс Лиҙың нунчаки менән нисегерәк эш итеүен элекке фильмдарҙан ғына хәтерләйбеҙ. Уның сығыштарын ҡараһаң, кешенең ниндәй юғары кимәлгә күтәрелә алыусы зат булыуына ышанаһың. "Донъяла ушу буйынса уға етеүсе кеше әле лә юҡ", тиҙәр. Ысынмы был, юҡмы, уныһы бик уҡ мөһим түгел. Иллә мәгәр бөгөнгө көндә донъялағы иң оҫта нунчаксының Өфөлә йәшәгәнлеге мөһим беҙгә. Алдараҡ һүҙ барған ниндзя егет - ул! Әйткәндәй, хәтерегеҙҙәлер, алдағы һандарҙың береһендә был егет тураһында яҙғайныҡ инде. Тамырҙары менән Баймаҡ районы Таһир ауылынан, ҡыпсаҡ ырыуы батыры Тимур КӘРИМОВ менән яҡынданыраҡ танышырға, уның күңелен аңларға, уңыштарының серенә төшөнөргә теләһәгеҙ, артабан уҡығыҙ. Ул ошо көндәрҙә Американың Лос-Анджелес һәм Аргентинаның Мендоза ҡалаларында кунфу (шул уҡ ушу) буйынса донъя чемпионаттарында ҡатнашты. Был ярыштарҙа уңышлы сығыш яһап, яҡташыбыҙ ике алтын, бер көмөш һәм бер бронза миҙал алып ҡайтты. Кунфу чемпионы сәйәхәт тәьҫораттары менән уртаҡлашмаҡсы.**


(Дауамы 11-се биттә).

ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?

# МӘҘӘНИ ЭСЕҮ...

## тотош халыҡты эскелеккә килтерә түгелме?

**Үткән аҙнала ил буйынса рәсми рәүештә айныҡтыстар ябылды. Был Рәсәйҙең аҙыраҡ эсә башлауы тураһында һөйләмәй. Илдең баш наркологы Евгений Брюн раҫлауынса, Рәсәй халҡының 30 проценты спиртлы эсемлектәрҙе йыш ҡуллана һәм, дөрөҫөн әйткәндә, потенциаль эскесе булып һанала.**

Шулай ҙа статистика буйынса, рәсәйлеләр аҙыраҡ эсә башлаған. Әгәр ҙә ике йыл элек йән башына 18 литр алкоголь тура килһә, былтыр был һан бер аҙ кәмегән һәм 15 литрға еткән.

Рәсәй власы ла был йәһәттән ниндәйҙер эштәр башҡарҙы: алкоголгә акциз да индерелде, спиртлы эсемлектәрҙең хаҡы ла күтәрелде. Мәғлүмәттәр күрһәтеүенсә, был сараларҙың һөҙөмтәһе лә күренә: Рәсәй хәҙер һыра иленә әүерелә бара.

Быйыл "Йәмәғәтселек фекере" фонды үткәргән һорау алыуҙар күрһәтеүенсә, спиртлы эсемлектәр ҡулланыусылар араһында һыра иң популяр эсемлек иҫәпләнә. Икенсе урында - араҡы, өсөнсө урында - шарап. Тағы ла бер тенденция күҙәтелә - һыра ҡулланыу 18-30 йәштәге йәш кешеләр иҫәбенә арта.

-Бының нимәһенә аптырырға? Һыра сағыштырмаса арзан алкоголле эсемлек. Уны эсеү өсөн стакан да, өҫтәл дә, шешәне асыу өсөн махсус ҡулайлама ла кәрәкмәй. Шуға ла йәштәр һыра эсә лә инде, - ти был статистикаға аңлатма биреп Федераль һәм төбәк алкоголь баҙары тикшеренеүҙәр үҙәге етәксеһе Вадим Дробиз. - Ә кешене мәҙәни һәм сәләмәтлеккә зыян килтермәйенсә эсеүгә өйрәтеү өсөн ихтыяж структураһын үҙгәртеүгә йүнәлтелгән дәүләт сәйәсәте кәрәк. Ә әлегә ул юҡ.

Ҡыҙыҡ, дәүләт эскелек менән көрәште һаман да халыҡты мәҙәни эсергә өйрәтеүҙә күрә. Эскелектең тап ошо төрә сәскә атыуы һөҙөмтәһендә был насар ғәҙәттән ҡотола алмауыбыҙҙы һаман аңларға теләмәйбеҙ, ахыры.

**Әйткәндәй, ошонда Красноярск ҡалаһынан тарих фәндәре докторы, собриолог Виктор Кривоноговтың ошо һүҙҙәрен килтереү урынлы булыр: "Мәҙәни эсеүселәр" эскелек сәбәбен эшһеҙлеккә, иктисади һәм сәйәси тәртипһеҙлектәргә, карьерала һәм шәхси тормоштағы трагедияларға һәм драмаларға яңһарырға тырышһа ла, алкоголь наркотигын ҡулланыуҙың ике генә сәбәбе бар: халыҡты эскелеккә программалау һәм алкоголде теләгән ерҙән һатып алыу мөмкинлеге. Алкоголь программаланыуы тыумыштан бирелмәй, ә бер нисә коммуникация каналы ярҙамында, ата-әсәгә оҡшарға тырышыу һөҙөмтәһендә формалаша. Әгәни кеше ҡайғынан эсмәй, ә аңына һалынған - ҡайғың бар икән, уны алкоголь менән баҫ, тигән программаға буйһоноп эсә. Йәки туй булғаны өсөн түгел, ә туйҙа эсергә кәрәк, тигән программаны үтәй һ.б. Айыҡлыҡты раҫлау "мәҙәни эсеү" идеологияһы менән көрәш аша бара. Яу ялаһы - һәр программаланған кеше аңы. Шул уҡ ваҡытта, бында тәүге урында тыйыу түгел, ә азатлыҡ тора. Беҙ халыҡтың аңын - эсеү программаһынан, ҡалаларҙы - эске урындарынан, финанстарҙы алкоголь аҡсаларынан азат итергә тейешбеҙ... "**

УҠЫУСЫ ФЕКЕРЕ

# БЕР АҘЫМҒА АЛДА АТЛАЙ

**"Киске Өфө" гәзите - минең өсөн иң яраткан башҡорт баҫмаларының береһе. Йөкмәткеһе менән ул журнал баҫмаһын хәтерләтә. Аҙналыҡ гәзиттәр шулай булырға тейештәр ҙә инде.**

Беренсенән, "Киске Өфө"лә һәр көн булып торған бөтә хәл-ваҡиғалар түгел, ә иң әһәмиәтлеләре генә һайлап яҡтыртыла, шуға ла ундағы мәғлүмәттәр иҫкермәй, бер йыл элек баҫылғаны ла, биш йыл элек баҫылғаны ла актуаль. Икенсенән, гәзиттә башҡа баҫмаларҙа осратыуы ауыр булған аналитик мәҡәләләргә өҫтөнлөк бирелә. Тап аналитик мәҡәләләр кешене уйландыра алыуға һәләтле.

"Киске Өфө" милли рух төйөһөн уятыусы, илһөйәрлек хисен арттырыусы баҫма булыуы менән йәлеп иткәйне мине. Ул йәш быуын өсөн бигерәк тә кәрәкле баҫма. Ысын тарихын белмәйенсә, ялған мәғлүмәттәр шауҡымына бирелеп йөрөгән йәштәр аҙмы ни! Әммә күптәрә һеҙҙең гәзитте уҡығандан һуң донъяға, үҙ халҡының тарихына ҡарашын ҡырҡа үҙгәртә, күҙҙәре асылғандай була. Минең өсөн дә "Киске Өфө" яңылыҡ, асыш сығанағы булып тора. Уны ҡулға алған һайын ниндәйҙер эске тулҡынланыу кисерәм. Был баҫма минең серҙәшем, рухташым булғанғалыр инде. Мине уйландырған, күңелемдә борсолоу тыуҙырған фекерҙәр әйтелә бит унда. Йөрәк түренә барып етерлек итеп әйтелә.

"Киске Өфө" даһи шағир кеүек, үҙ замандаштарынан бер аҙымға алда атлап бара. Киләсәкте, тимәк, алдан күрә һәм хәүефтәр хаҡында иҫкәртә. Үҙ милләтем менән ғорурлана инем, әммә ошо баҫма менән танышҡандан һуң ғына мин башҡорттоң ниндәй бөйөк халыҡ икәнен аңлағандай булдым. Был аң, был тойғо яңырғандан-яңыра, сөнки "Киске Өфө"нө тетрәнеүһеҙ уҡыу мөмкин түгел. "Киске Өфө" уттары һүнмәһен, илдарыбыҙҙы гелән яҡтыртып торһон.

**Әҡсән МӨНИРОВ.**
**Учалы районы.**

КЕМ АЛЫҠ!

# БҮЛӘККӘ - "ДИНИ КАЛЕНДАРЬ"



Йәрмәкәй районының башҡорт теле уҡытыусылары.

**Мөхтәрәм милләттәшебеҙ! Бына тағы һине лә, баҫмабыҙҙы ла, ошо баҫманы ижад итеүселәрҙе лә һынау мәле етте. Гәзитебеҙҙе уҡыусы милләттәш туған телдәге баҫманы ниндәй дәрәжәлә һанлай һәм баһалай? Уның үҙ милләтенә, туған теленә ҡарата аң, рух, ихтирамы ниндәй кимәлдә? Баҫмабыҙҙағы һүҙ ҡеүәһе, фекер үткерлеге уның күңелен арбай, сәмен һәм ғәмен уята алырлыҡмы?**

Бына шулай, **2012 йылдың беренсе яртыһына гәзитебеҙгә яҙылыу барыуын иғлан итеп,** уҡыусыбыҙ һәм үҙебеҙ алдына ошо һорауҙарҙы ҡуйбыҙ. Һәр ваҡыттағыса, уҡыусыны ылыҡтырыр вәғәҙәләребеҙ ҙә бар: күп һорауҙарығыҙға яуап бирер, ниндәйҙер ауырлыҡтарға юлыҡҡанда уларҙы еңер сара, борсолоуҙар мәлендә - йән тыныслығы, күңел төшөнкөлөгө булғанда - рухландырыр, сөмләндерер һүҙ әйтер матур йөкмәткеле баҫма аласаҡһығыҙ ҡулдарығыҙға.

**Бынан тыш,** әлбиттә, оптимистар өсөн **бүләктәр ҙә** булмай ҡалмаясаҡ. Оптимистар өсөн, тибеҙ, сөнки гәзитебеҙгә яҙылыу тураһындағы квитанцияларҙың "Мин барыбер бүләкһеҙ ҡалмайым!" тигән кешеләрҙән генә килеүен яҡшы беләбеҙ. "Киске Өфө"нө уҡыусыларҙың барыһының да оптимист булыуын теләйбеҙ, уларҙың ошондай сифаттарын уятыуҙы маҡсат итеп ҡуйбыҙ. **Ә октябрь айында гәзитебеҙгә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргән 30 кешегә 2012 йыл өсөн "Дини календарь" ебәрәбеҙ.**

**Әйткәндәй,** кемде бүләктәр ҡыҙыҡһындырмай, улар беҙгә **тыуған көндәрен** хәбәр итһен. Гәзитебеҙ аша гәзит уҡыусыбыҙҙы тыуған көнө менән ҡотлау - беҙгә лә мәртәбә, һеҙгә лә шатлыҡ өҫтөнә шатлыҡ өҫтәр.

**"Киске Өфө" - бүләгем" акцияһы ла дауам итә.** Уға ҡушылып, ауылдарҙағы туғандарығыҙға, ата-әсәйҙәргә, мәсеттәргә, таныштарығыҙға гәзитебеҙҙе яҙҙырып шатландырығыҙ.

**Шулай итеп,** 2012 йылдың тәүге яртыһына гәзитебеҙҙең 50665 индекслыһына **348 һум 24 тингә,** 50673 индекслыһына (юридик шәхестәр өсөн) **378 һум 24 тингә** яҙыла алаһығыҙ.

Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**. Беҙҙең электрон почта: **info@kiskeufa.ru**. Беҙҙең блог: **blog. kiskeufa.ru.**

**Бергә булайыҡ, бергә-бергә фекер ҡорайыҡ, донъя хәтәрҙәрен, борсолоуҙарҙы бергә еңәйек, шатлыҡ-ҡыуаныстарҙы бергә уртаҡлашайыҡ!**

**МӨХӘРРИРИӘТ.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостан Республикаһы Президенты Рөстәм Хәмитов Рәсәй Президенты Дмитрий Медведев ҡушыуы буйынса Рәсәйҙең рәсми вәкиле булараҡ Сәғүд Ғәрәбстаны Королленегенең тәхеткә ултырырға тейешле принцы, Министрҙар Советы рәйесе урынбаҫары, оборона һәм авиация министры, Ҡоралы көстәренең Генераль инспекторы Солтан бен Абдель Азиз Аль-Сәғүд вафат булыу сәбәпле, ҡайғы уртаҡлашыу матәм тантанаһында ҡатнашты. Башҡортостан Президентын принц Наиф бен Абдель Азиз Аль Сәғүд ҡаршы алды. Рөстәм Хәмитов Король ғаиләһе ағзаларының, Короллектә йәшәүселәрҙең ҡайғыһын уртаҡлашты һәм мәрхүмдең Сәғүд Ғәрәбстанын нығытыуға һәм үҫтереүгә ҙур өлөш индергән көслө лидер һәм билдәле сәйәсмән булыуын иҫкә алды.

✓Башҡортостан пенсионерҙары Төркиәлә ни бары 5 мең һумға ял итә аласаҡ. Былдай путевкалар менән 300-гә яҡын кеше файҙалана ала. Был хаҡта ауыл биләмәләре башлыҡтары менән осрашыуҙа республика Президенты Рөстәм Хәмитов хәбәр итте. Осрашыу Ауырғазы районы үҙәге Толбазы ауылында үтте. Ололарҙың арзан хаҡҡа сит илдә ял итеүе республикала тормошҡа ашырылған социаль туризмды үҫтереү буйынса программа сиктәрендә ойошторола. Ошо уҡ программа ярҙамында Башҡортостанда 3 меңдән ашыу пенсионер шулай уҡ арзан хаҡҡа ил йорттарына бара ала. Былдай путевкаларҙың хаҡы улар өсөн 4 мең ярым һумдан ашыу булмаясаҡ.

✓Башҡортостан Республикаһы Президенты Рөстәм Хәмитов Указы менән филология фәндәре докторы, профессор, Башҡортостандың атҡаҙанған фән эшмәкәре, яҙыусы-ғалим Суфиян Поварисовҡа "Башҡортостан Республикаһының халыҡ яҙыусыһы" исеме бирелде. Ошо уҡ Указ менән Салауат Юлаев исемендәге премия лауреаты, Башҡортостан Яҙыусылар ойошмаһы идараһы рәйесе урынбаҫары шағир Ҡәҙим Аралбаев "Башҡортостан Республикаһының халыҡ шағиры" исеменә лайыҡ булды.

✓Өфөлә "Дини экстремизм: сәбәптәре һәм уны бөтөрөү юлдары" тигән темаға фәнни-ғәмәли семинар үтте. Уны Мәскәү дәүләт лингвистика университеты ойошторҙо. Университеттың ғилми-тикшеренеү бүлеге начальнигы Андрей Кравцов һүҙҙәренсә, уҡыу йорто былдай осрашыуҙарҙы Рәсәйҙең күп милләтле һәм күп конфессиялы ҡалаларында йыш үткәрә. "Башҡортостанда дини һәм милли экстремизм хәүефһеҙлеге юҡ, - тине сығышында Андрей Кравцов".

✓ **Башҡортостан юлдаш каналында Ирәмәл тауы тураһындағы тапшырыуҙы автор: "Бына ошонда инде боронғо славян халҡының төйәге..." - тигән һөйләм менән тамамланы. Бына һиңә бер батман балға бер балғалаҡ дегет!**



ШАҢДАУ

# БЕР БАТМАН БАЛҒА...

## бер балғалаҡ дегет тә өҫтәлеп ҡуя

**Гәзитебеҙҙә Әхмәр Ғүмәр-Үтәбай алып барған "Милли идеяға торош" рубрикаһын журналист-яҙыусының уңышлы табышы тип ҡабул итәм. Беренсенән, халыҡ ижадын, халыҡ аҡылын балҡытыу булһа, икенсенән, буталған, ҡаңғырған баштарҙы һиҫкәндереп, уйланырға мәжбүр итеү был рубрика.**

Иҫемдә, рәссам һөнәренә уҡып йөрөгәндә беҙҙең уҡыу йортоноң бер һәйбәт тәрбиәүи алымы бар ине. Йәйге каникулдарҙан һуң ирәүәнләнеп йөрөп килгән студенттар өсөн (ниндәй факультет булыуына ҡарамай) плакаттар конкурсы иғлан ителә ине. Һәр йыл төрлө тема бирелә: йә октябрь байрамы, йә Еңеү байрамы тураһында булырға тейеш ул плакаттар. Темаһын ун көн эсендә уйлап табырға, ҡараламаға һүрәт итеп төшөрөп, уҡытыусы хөкөмө аша үткәрергә, аҙаҡ шуны ҙур ҡағыҙға матур итеп төшөрөп тапшырырға. Бөтә студенттар гөр килешеп: "Идея! Идея! Идея!" - тигән уй менән йүгерешә. Һуңынан иң уңышлы идеянан тыуған плакаттарҙан күргәҙмә ойошторола...

Гәзиттәге рубрика "Милли идеяға торош" тип аталғас, һүҙлекте асып ҡарарға булдым (1964 йылғы һүҙлек). Унда, идея - философик төшөнсә, дөйөм аң, донъяға ҡараштың нигеҙе булып торған принцип, тип яҙылған. "Принцип" һүҙен эҙләп, артабан һүҙлекте аҡтарҙым. Унда, принцип - нигеҙ, асыл, төп сығанаҡ, төп ҡағиҙә, тип яҙылған. Тимәк, "Милли идеяға торош" тигән һүҙбәйләнеште "Донъяға ҡараштың нигеҙе булып торған төп ҡағиҙә" тип тә аңларға булалыр. Шулай итеп, башҡорт халыҡ мәҡәлдәрендә икән ул был донъяға ҡараштың нигеҙе булып торған төп ҡағиҙәләр. Шуны белеп, аңлап етмәгәнбеҙ икән. Ә бына олатай-өләсәйҙәр белгән быны, юҡһа, телмәрҙәрендә һүҙ һайын халыҡ мәҡәлдәрен, әйтемдәрен ҡулланмаҫ инеләр бит. Студент саҡтағы күренеште юҡҡа ғына яҙманым мин.



"Идея эҙләйем. Ҡайҙа ул, ҡайһы ваҡытта булған?" тигән уйланыуҙар һәр заманда ла актуаль. Ул һорауҙарға яуапты үҙебеҙҙең халыҡ аҡылында табырға өйрәтергә кәрәк йәштәребеҙҙе.

Әлбиттә, ул аҡылдың ҡайһы берҙәре, шул аҡылды уйлап сығарған халҡымдың толерантлығы, киң күңеле, йомартлығы аптыратып та ҡуя ҡайһы саҡта. Бөгөнгө әхлаҡһыҙлыҡ, нәфсе ҡолдары ишәйгән заманда ул аҡыл-кәңәштең ҡайһы берҙәрен "Ата-бабайҙар шулай ҡушҡан..." тип ҡулланһаҡ, милләттән нимә ҡалыр икән, тип тә уйлап ҡуяһың. Күптән түгел Башҡортостан юлдаш каналында "Семь жемчужин" тигән тапшырыуҙар теҙмәһенең Ирәмәл тауы тураһындағы өлөшөн һоҡланып ҡарап ултырҙым. Тик ниңәлер ул тапшырыуҙы автор: "Бына ошонда инде боронғо славян халҡының төйәге..." - тигән һөйләм менән тамамланы. Бына һиңә бер батман балға бер балғалаҡ дегет! Урал тауҙары теҙмәһенә ингән Ирәмәл тауын башҡорттарҙың төйәге итеп белә инек быға тиклем. Үәт һиңә - идея! Ошондай бер ниндәй тарихи материалдар менән раҫланмаған хәҡиҡәтте журналистар өҫтәй ҙә ебәрә шул инде. Башҡортостан юлдаш каналында ла бындай хаталы һүҙҙәр, мәғлүмәттәр йышая башланы. Ҡыҫҡаһы, ошондай бер ниндәй нигеҙе булмаған мәғлүмәттәргә юлығаһың да, халҡыбыҙҙың боронғо әйтемдәрен өлегә дәүер йәштәренә икенсе төрлө әйтке килә лә тора: "Таш менән атҡанға аш менән атма", "Бары менән байрам тип йәшәмә", "Юрғаныңа ҡарап аяғыңды һуҙып ҡына ятма, үҙеңә тамам юрған ал"...

Әлбиттә, мин әйтмәһәм дә, йәш быуын беҙҙенсә түгел, яңыса фекер йөрөтә. Бер ҡыҙыҡ хәл иҫтә ҡалған. Ҡыҙыма матур яңы күлдәк кейҙерҙем дә, балалар баҡсаһына алып барғанда: "Калай матур күлдәк кейгән, әллә был яңы ҡыҙыҡаймы?" тип һоҡланып танымай ҙа торорҙар әле үҙенде",- тинем. Кисен балалар баҡсаһынан алып ҡайтҡанда ҡыҙым: "Көттөм, көттөм, күлдәгем тураһында бер кем дә бер һүҙ ҙә әйтмәне бит, әсәй..." - тине, күңелһеҙләнеп. Бына яҙ етте, ҡыҙыма шаҡмаҡлы туҡыманан тегелгән яҙғы пальто һатып алып кейҙерҙем. Балалар баҡсаһына алып барғанда үткән осорҙағы һүҙҙәрҙе әйтеүҙән тыйылдым. Йылы яҙ, ҡояш балҡый, тәрбиәсе балаларҙы тышта уҡ ҡаршы ала. Көтмәгәндә ҡыҙым тәрбиәсе янына уҡ килеп баҫты ла: "Карағыҙ, ә минә матур, яңы пальто һатып алды әсәйем. "Әллә был яңы ҡыҙыҡаймы?" тип танымай ҙа тораһығыҙҙыр әле", - тип, итәктәрен тотоп өйрөлөп алды ла: "Был бит мин - Айгөл!" - тип өҫтәп ҡуйҙы. Кескәй баланың ҡыйыулығына һоҡландым. Эйе, ниңәлер беҙҙең быуынды: "Кеше нимә әйтер, кеше нимә уйлар, былай итмә, тегеләй итмә", - тигән тыйыуҙар менән тәрбиәләнеләр шул. Йәш быуын улай түгел...

Ә барыбер халыҡ аҡылына ҡолаҡ һалырға кәрәк. Боронғо әйтемдәр әле төп ҡағиҙә була алмаһалар ҙа, улар боронғоларҙың сафлығын сағылдыра. Тәбиғәт балалары булған улар. Мәҡәл, әйтемдәр тәрбиә биреү ҡоралы ла! Шуға ла уларҙы ғүмер ...

Мәҡәл, әйтемдәр тәрбиә биреү ҡоралы булып ҡулланылған, әйтелгән. Боронғо йырҙарыбыҙҙа ла бар һабаҡ алыр аҡыл. Мәҫәлән, "Атам дуҫы, тиеп, ышанма егет, атаң дуҫы етәр башыңа..." Әйткәндәй, һәр ҡыҙыҡһынған кешенең боронғо йырҙар йыйынтығы юҡтыр. Тағы ла йырҙың һәр һүҙен асыҡ итеп ишеттереп йырлаған йырсы ла һирәк хәҙер. Әллә "Боронғо йырҙар" тигән рубрика ла асып, унда йырҙың тарихын һөйләп, һүҙҙәрен хәтергә төшөрәһегеҙме гәзиттә? Юлай Ғәйнетдинов, Спартак Ильясовтар ошо өлкә буйынса оло хазина туплаған белгестәр түгелме һуң?

**Фәүзиә ЯХИНА.**

**ӘЙТКӘНДӘЙ...**

**Әле беҙҙә тыуған телен үҙ иткән, үҙ телендә һөйләшкән, башҡортса гәзит-журналдар уҡыған етәкселәр юҡ кимәлендә. Йәл, халҡыбыҙ мәҡәлдәрен дә ҡулланмай улар. Һәр хәлдә, улар ауыҙынан башҡортса матур телмәр ишетелмәй тиерлек. Ә бына ситтән ингән аңлашылмаған һүҙҙәрҙе ҡулланырға ярата һәр береһе. Әле бына Үҙәктән "праймериз" һүҙе төшөрөлдө. Алдан һайлауҙар икән уның мәғәнәһе. Әлеге лә баяғы көләмәс иҫкә төшә. Бер ауыл кешеһе көнөҙөн баҙарҙа картуф һатып тора ла, ҡайтырға сығыр алдынан бер кафеға инеп, тамаҡ ялғап алырға була. Менюҙе уҡыһа, бар ашамлыҡтар ҙа бик ҡиммәт икән. "Пюре" тигән матур һүҙ эргәһендәге хаҡ ҡына арзан икәнен күреп, ашнаҡсыларҙан бер тәрилкә "пюре", 2 стакан сәй, өс киҫәк икмәк һорай. "Шулай бик әҙ генә ашайһығыҙмы ни?" тигән һорауҙы ишеткәс, "Ярай әтеү, ике тәрилкә пюре бирегеҙ",- тип өҫтәй. Ашнаҡсы килтергән картуф иҙмәһен күреп: "Бәй, бындай пюре өйөм баҙында ла туп-тулы бит..." - тип аптырай ауыл кешеһе. Аптыраһа ла, ике тәрилкә пюрене лә ашап ҡуя. Шуның кеүек, "праймериз" кеүек сит ил һүҙҙәрен ябай халыҡ аңламай ҡалһын, тип индерәләрҙер инде. Шул пюре кеүек...**

УҠЫУСЫ ҺҮҘЕ

# ГӘЗИТТӘН АЙЫРМАҺЫН ХОҘАЙ!

**Һис кенә лә шаштырыу түгел, "Киске Өфө" гәзитен иң яҡын туғаным һымаҡ көтөп алам! Хоҙай Тәғәлә мине һеҙҙең гәзиттән айырмаһын, тип теләйем.**

Һеҙҙәге егәрлелек һәм дә тапҡырлыҡты көндәҙ шәм яндырып эҙләргә кәрәк беҙҙең заманда. Гәзиттә яҙылғандарҙың йөрәккә шифа булырлыҡ көсө барлығын тояам үҙемдә, уларҙан ҡеүәт алып йәшәйем. Геройҙарығыҙ ҡыйыу фекерҙәре менән уртаҡлаша. Уларҙы ҡуркмайынса уҡыусылар иғтибарына еткерергә лә ҡыйыулыҡ кәрәк бит әле. Көслө авторҙарығыҙ бар. Әхмәр Ғүмәр-Үтәбайҙың зирәк фараздарын уҡып, һәр кеше үҙенә дәрт-дарман, фәһем алалыр. Мин үҙем рәссам булһам да, туған телдең һүрәтләү көсө ни тиклем ҙур булғанына инанып йәшәйем. Һынлы сәнғәт, бигерәк тә башҡорт халҡының декоратив сәнғәте аңыбыҙға шулай уҡ бик күп мәғлүмәт өҫтәй. Ғөмүмән, яҙыусының, журналистың да, рәссамдың да бурысы берҙәр: халҡыңды уйланырға, фекер ҡорорға мәжбүр итеү, тормош ҡуйған һорауҙарға яуап табырға ярҙамлашыу. "Киске Өфө"нө уҡыған һайын ошо бурыстарҙың мөһимлеген ныҡыраҡ аңлай барам.

**"Киске Өфө"ләргә уңыштар теләп, 83 йәшлек рәссам Ғүмәр Һиҙиәтша улы МӨХӘМӘТШИН - һеҙҙә гел һағынып тороусыларҙың береһе булырмын.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Башҡортостан Хөкүмәте "2011-2013 йылдарға Башҡортостан халҡының финанс белем кимәлен арттырыу" республика маҡсатлы программаһын раҫланы. Программа биш төп этаптан тора. Тәү сиратта мәғлүмәт-консультация үҙәктәре булдырыласаҡ. Бындай үҙәктәр ауылдарҙа ойоштоpолған да инде. Ауыл хужалығы идаралығы нигеҙендә белгестәр халыҡҡа субсидия, дотациялар хаҡында мәғлүмәт бирә, документтар юллауҙа ярҙам итә. Банк продукттарын пропагандалау өсөн махсус баҫма продукция булдырылған. Мәктәп уҡыусылары ла, пенсионерҙар ҙа финанс белем аласаҡ. Программа өс йылға иҫәпләнгән.

✓Башҡорт дәүләт университетында "Профессор Жәлил Кейекбаев һәм уның Урал-Алтай һәм төрки филологияһы үҫешенә индергән өлөшө" халыҡ-ара фәнни-ғәмәли конференцияһы үтте. Форум билдәле ғалимдың 100 йыллыҡ юбилей сараларына ярашлы ойошторолдо.

✓Ҡырғыҙстандың баш ҡалаһы Бишкекта билбау менән көрәш буйынса донъя чемпионаты үтте. Унда 19 илдән 175 спортсы ҡатнашты. Башҡортостандан Рәсәй беренселегендә еңеп сыҡҡан ике көрәшсе - Альберт Рәхмәтуллин һәм Антон Матренин сығыш яһаны. Егеттәрҙе ярышҡа Мәләүез районынан тренер Фәнүр Ғәйнетдинов әҙерләне. Альберт Рәхмәтуллин классик стилдә 75 килограмға тиклем ауырлыҡ категорияһында көрәшеп финалға сыҡты. Хәл иткес алышта ул Молдова көрәшсеһе Игорь Бешляганы еңеүгә өлгәште һәм Донъя чемпионы исемен яуланы.

✓Һамар-Өфө-Силәбе автомобиль магистрале идаралығы мәғлүмәттәре буйынса, Ырымбур өлкәһенең, Башҡортостан һәм Татарстандың федераль кимәлдәге автомобиль юлдарында һауа шарттары насар булмаҡсы. Боҙлауыҡ, томан, ҡар ятыуы көтөлә. Автотрассалар буйлап хәрәкәт итеүгә бәйле барлыҡ һорауҙар буйынса Һамар-Өфө-Силәбе автомобиль магистрале идаралығының тәүлек әйләнәһенә эшләүсе 8 (347) 228-12-18 телефонына мөрәжәғәт итергә мөмкин.

✓22 ноябрҙә Өфөлә йәштәр өсөн вакансиялар йәрминкәһе үтәсәк. Йәш өфөләрҙе эш менән тәьмин итеү, шулай уҡ йәштәрҙе бөгөнгө хеҙмәт баҙары шарттарына яраҡлаштырыу сараның төп маҡсаты булып тора. Йәрминкә Ибраһимов бульвары, 47/1 адресы буйынса урынлашҡан Өфөнөң Халыҡ мәшғүллеге үҙәгендә үтәсәк. Башлана - 15 сәғәттә.

✓ Ғәҙәттә, енәйәтселәр банк аша аҡса күсереүҙе һорай. Шикле шылтыратыуҙар булһа, туғаныгыҙҙың телефон һандарын йыйып, бәйләнешкә инергә тырышырға кәрәк. Бер осраҡта ла аҡсаны ят кешегә бирергә ярамай.



ТӨРЛӨҺӨНӘН

## ҠАЛА БУЙЛАП - БОҘОҠ АВТОБУСТАР

**Йәмәғәт транспортында йөрөгәндә, гүмеребеҙҙе хәүеф аҫтына ҡуябыҙ, тип күп осраҡта уйламайбыҙ. Бәҡтиһәң, ҡала автобустарының күбеһе техник талаптарга яуап биреп бөтмәй икән. Быны ЮХХДИ хеҙмәткәрҙәре тарафынан үткәрелгән "Автобус" операцияһы раҫлай. Биш көн эсендә генә Өфө урамдарында техник талаптарға яуап бирмәгән 446 автобус теркәлә. Бынан тыш, ике водителдең руль артына эскән килеш ултырыуы асыҡлана.**

Иҫерек килеш автобус йөрөткән водителдәр һирәк күренеш булһа ла, йәмәғәт транспортының күп өлөшө пассажирҙар ташыуға бөтөнләй яраҡһыҙ: ҡайһы бер автобустарҙың тормозы эшләмәй, икенселәрҙең - руле. Йөк ташыу газелдәре пассажир транспортына әйләндерелә, ләкин былдай үҙгәрештәр бер ҡайҙа ла теркәлмәй.

Автобустың техник талаптарға яуап бирмәүе асыҡлана икән, водителгә транспорт менән файҙаланыу ваҡытлыса тыйыла. Етешһеҙлек тулыһынса юҡ ителгән осраҡта ғына хужа руль артына ултыра ала. Бынан тыш, ҡағиҙәне боҙған водителде 300-500 һум күләмендә штраф көтә. Республика буйынса автомобиль юлдарын күҙәтеү дәүләт идаралығы хәбәр итеүенсә, пассажирҙарҙың күбеһе водитель һәм кондукторҙарҙың тупаҫ мөғәмәләлә булыуына ҡәнәғәтһеҙлек белдерә. Шулай уҡ юл тиҙлеген арттырыуҙарына, ҡайһы бер туҡталыштарҙы үтеп китеүҙәренә зарланалар. Был күбеһенсә шәхси транспорттарында пассажирҙар йөрөтөүселәргә ҡағыла. Дәүләт автобусы водителдәре тәртиплерәк, ти юл хәрәкәте хәүефһеҙлеген һаҡлаусылар.

## ДАУАХАНАЛАР ДАУА ҺОРАЙ

**Башҡортостан буйынса кеше хоҡуҡтары вәкәләтсеһе Рим Ҡәйүмов республика дауаханаларын тикшереп сыкты. Һөҙөмтәләр ҡыуанырлыҡ түгел. Ҡаралған 70 учреждениеның күбеһендә медицина шарттары тулыһынса үтәлмәй.**

Мәҫәлән, Учалы үҙәк ҡала дауаханаһында пациенттарға система ҡуйыр өсөн тейешле ҡорамал урынына пластик шешәләр ҡулланыла. Ә Мишкә районындағы дауахана бик иҫкергән. Уның төп корпусы 1936 йылда уҡ төҙөлгән булған. Иҫәнғол дауаханаһы 60 процентҡа ғына йыһазландырылған. Ҡайһы бер биналарға эҫе һыу, канализация, телефон элемтәһе үтмәгән. Ғөмүмән, байтаҡ дауаханаларҙа иҫке ҡорамалдар файҙаланыла. Роспотребнадзор мәғлүмәттәре буйынса, Башҡортостандағы 38 процент медицина учреждениеһы ғына санпин талаптарына яуап бирә. Быйыл дауаханаларҙа инфекция таралыу осрағы иһә 73 тапҡыр теркәлгән.

Был кире күренештәрҙең сәбәбе - медицинаға етерлек кимәлдә аҡса бүлмәүҙә, тип иҫәпләй Рим Ҡәйүмов: "Ябайлаштырып әйткәндә, табиптарҙы насар дауаларға мәжбүр итәләр. Һөҙөмтәлә, кадрҙар китә. Бигерәк тә улар ауылдарҙа етешмәй".

Йыйылған мәғлүмәттәр һәм тәкдимдәр дәүләт власы органдарына, ҡала һәм район хакимиәттәренә ебәреләсәк. Кеше хоҡуҡтарын яҡлаған ойошмаға ҡолаҡ һалыусы булырмы, юҡмы, ваҡыт күрһәтер.

ҮӘТ, МӘСЬӘЛӘ!

**Өфө ҡала округы хакимиәтендә ауыл хужалығы йәрминкәләрен ойоштороуға бәйле мәсьәлә тикшерелде. Унда БР Дәүләт Йыйылышы -Ҡоролтай рәйесе Константин Толкачев, БР ауыл хужалығы министрының беренсе урынбаҫары Николай Коваленко, республика һәм баш ҡала районДары хакимиәттәре вәкилдәре ҡатнашты.**



# АҘЫҠ-ТҮЛЕКТЕ ЕТЕШТЕРЕҮ ҘӘ,

## һатып алыусыға еткереү ҙә еңел түгел

Йәрминкәләр, һис шикһеҙ, етештереүселәр, һатып алыусылар өсөн дә отошло сара. Ҡала халҡы ҡышҡылыҡҡа картуф, йәшелсәләрҙе, итте башлыса көҙгө йәрминкәләрҙә туплап ҡала. Хужалыҡтарға ла был осорҙа ярайһы уҡ аҡса эшләп ҡалыу мөмкинлеге бар. Баш ҡалаға ҡайһы бер райондарҙан йөҙәрләгән йөк машиналарынан торған ылауҙар менән киләләр. Был йәһәттән бигерәк тә Кушнаренко, Благовар, Мишкә, Ҡырмыҫҡалы, Өфө, Иглин, Балтас, Яңауыл, Благовещен райондары әүҙем. Быйыл 159 көҙгө йәрминкә ойошторолған. Уларға 46 районДан 14,5 мең йөк машинаһында тауар килтерелгән.

Ауыл райондары хакимиәттәре вәкилдәре билдәләүенсә, бөгөн үҫтерелгән уңышын һатыуға сығарырға теләүселәр алдында транспорт проблемаһы киҫкен тора. Бигерәк тә быйыл, уңыш яҡшы булғанда, был мәсьәлә үҙен ныҡ һиҙҙертә. Тауарҙы йәрминкәләргә сығарыр өсөн йөк машиналары етмәй. Әммә республика Хөкүмәте, шул иҫәптән ауыл хужалығы министрлығы, был йәһәттән бер нисек тә ярҙам итә алмай. Сөнки бөтә транспорт хәҙер шәхси ҡулдарҙа. Проблеманы бер юл менән генә хәл итеп була: тейешле ойошма-предприятиелар менән килешеүҙәр төҙөргә кәрәк. Йәғни, килемдең бер өлөшөн улар аласаҡ. Бөгзе райондар ошо рәүешле эшләргә бөгөндән үк әҙер. Тик ошо юҫыҡта бәйләнештәр булдырыр өсөн дәүләт органдары тарафынан ярҙам кәрәк, ти улар.

Етештереүсенең транспорты булмауы арҡаһында ул үҙ тауарын алыһатарҙарға биреп ебәрергә мәжбүр. Ғөмүмән, ауыл кешеһе туранан-тура һатып алыусыға сығыр өсөн әллә күпме ҡаршылыҡтарға осрай. Транспорты булған хәлдә лә, алыҫ ерҙән ҡалаға килеп еткәнсе, уның йәрминкә майҙанындағы урынын алыһатар билән өлгөрә. "Еңел генә аҡса эшләргә теләүселәрҙе бер нисек тә ҡыуа алмайбыҙ, - ти йәрминкәне ойоштороусылар. - Хоҡуҡ һаҡлау органдары, был беҙҙең эш түгел, тип, ситтә ҡалыуҙы хуп күрә".

Ҙур йәрминкәләрҙе Өфөлә генә түгел, ә башҡа ҡалаларҙа ла йышыраҡ үткәреү зарур. Мәҫәлән, башлыса сәнәғәт тармағы үҫешкән Стәрлетамаҡ, Салауат ҡалаларына ауыл хужалығы продукцияларын йәрминкәләр аша һатырға була. Әлеге мәлдә Өфөлә йәрминкәләр аҙна һайын ял көндәрендә булып тора. Һауа торошона ҡарап, уларҙы алдағы айҙарҙа ла ойоштороу ҡаралған. Әммә Илеш районы хакимиәте башлығы Илдар Мостафин әйтеүенсә, был йәрминкәләрҙә хужалыҡтарҙа етештерелгән продукцияның 1-5 проценты ғына һатыла. Шуға күрә йәрминкә сараларын йәҙға тиклем оҙайтырға, көндәр һалҡынайтһа, туҡланыу урындары ойоштороорға кәрәк, тип тәҡдим итте ул.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Баш ҡалала йәрминкәләр ике тиҫтә йыл үткәрелә килһә лә, ойоштороу мәсьәләләре әленән-әле тыуып тора. Был башлыса етештереүселәргә һатыу урындарын бушлай бүлеүгә ҡайтып ҡала. Мәҫәлән, алдан ғаризалар ҡабул итеү әйҙә һалынмаған. Башҡа атап үтелгән проблемалар ҙа ауыл хужалығы эшсәндәренә лайыҡлы табыш алырға ҡамасаулай. Был иһә үҙ сиратында тотош тармаҡтың үҫешенә аяҡ салыусы сәбәптәрҙең береһе булып тора.**

Ишкенә МӨХӘМӘТОВ.

БЕҘҘЕ АЛДАЙҘАР!

## ӘСӘЙ, АҠСА ҺАЛ...

**Ышанып барған бер ҡатлыраҡ кешеләрҙең күңеленә инеп, телефон ярҙамында аҡса урлаусы енәйәтселәр һәр ваҡыт тапалған, билдәле схеманы файҙалана. Әммә ундай енәйәтселәрҙән яза күреүселәр кәмемәй.**

Йыш ҡына мутлашыусылар ҡорбандарына үҙҙәре шылтыратыуҙан тартынмай. Мәҫәлән, кемдер өй телефонына, үҙен яҡын туған итеп танытып, шылтырата һәм янылыш кеше үлтереүе тураһында һөйләй башлай. Тауышының ят булыуын ҡурҡышына, йәрәхәтләнеүенә һылтай. Аҙаҡтан ялған туғандың ашығыс һүҙҙәренә икенсе енәйәтсе ҡушыла. Йәнәһе, хоҡуҡ һаҡлау органдары хеҙмәткәре. Ул үҙ сиратында яҡын кешене аҡса ярҙамында ҡотҡарып була, тип хәбәр итә.

Күп осраҡта енәйәтселәрҙең ауына оло кешеләр эләгә. Мутлашыусылар теләһә кемгә шылтыратып ҡарай, аңғәмәсеһенең уны нисегерәк ҡабул итеүен тикшерә. Әгәр кеше ышана башлаһа, уны тулыһынса үҙҙәренә буйһондора. Ғәҙәттә, енәйәтселәр банк аша аҡса күсереүҙе һорай. Шикле шылтыратыуҙар булһа, туғаныгыҙҙың телефон һандарын йыйып, бәйләнешкә инергә тырышырға кәрәк. Бер осраҡта ла аҡсаны ят кешегә бирергә ярамай. Шылтыратыуҙар тураһында полицияға хәбәр итергә тейеш.

Мутлашыуҙың тағы бер төрө - кеҫә телефонына килгән смс-хәбәрҙәр. "Әсәй, шул-шул телефон һанына аҡса һал, аҙаҡ аңлатырмын, минә шылтыратма" йәки "Һеҙ беҙҙең компания исеменән автомобиль оттоғоҙ. Документтарҙы әҙерләр өсөн шул-шул иҫәпкә аҡса күсерегеҙ" тигәнерәк шикле хәбәрҙәр таратыла. Уларға иғтибар итмәҫкә йәки мәғлүмәтте ҡат- ҡат тикшерергә кәрәк.

Тимур ЧАНЫШЕВ,
Өфө ҡалаһы эске эштәр идаралығы хеҙмәткәре.

## Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Өфөнөң Дим районында тимер юл аша йәйәүлеләр күпере реконструкциялана башланы. 900 метрҙан ашыу оҙонлоғондағы күпер Дим районының кешеләр йәшәгән яғын бер нисә тимер юл предприятиелары менән тоташтыра һәм тиҫтәләгән тимер юлдар аша хәүефһеҙ үтергә мөмкинлек бирә. Реконструкция 2013 йылда тамамланырға тейеш.

✓30 октябрҙә Өфөлә, Сәйәси репрессиялар ҡорбандарын иҫкә алыу көнөндә, Еңеүҙең 50 йыллығы исемендәге скверҙағы һәйкәлгә сәскәләр һалыу тантанаһы үтәсәк. Шулай уҡ ҡала округы хакимиәте сәйәси репрессияларҙан зыян күргәндәргә, шулай уҡ аҡланғандарға ярҙам итеү акцияһы ла ойоштора. Уларҙың барыһына ла бүләктәр тапшырыласаҡ. Рәсми мәғлүмәттәргә ярашлы, бер Башҡортостанда ғына 50 меңдән ашыу кеше репрессияланған. Өфөлә әлеге ваҡытта сәйәси репрессияларҙан зыян күргән өс меңләп кеше йәшәй.

✓2 һәм 3 ноябрҙә Өфөлә, "Нефтсе" мәҙәниәт һарайында, "Текстиль һәм мода" XII махсус күргәҙмә сиктәрендә "Евро-Өфө-Азия - 2011" мода форумы үтәсәк. Форум йыл һайын яңы исемдәр аса. Тамашасыларҙы авторлыҡ коллекцияларын күрһәтеү көтә, йәш дизайнерҙар, рәссам-модельерҙар һәм ҡайтанан асылған ательелар үҙ эштәрен тәҡдим итәсәк

✓Өфөлә бер кешегә 20 квадрат метр торлаҡ майҙаны тура килә. Был күрһәткес илдең башҡа мегаполистары араһында күпкә түбәнерәк. Бүтән ҙур ҡалаларҙа был һан бер кешегә 22,6 квадрат метр тәшкил итә. Башҡортостандың баш ҡалаһында оҙайлы перспективала торлаҡ менән тәьмин ителеш нормаһын 26,5 квадрат метрға еткереү планлаштырыла.

✓Башҡорт дәүләт опера һәм балет театры солисы Әлфиә Кәримова ошо көндәрҙә Испанияла Халыҡ-ара вокалсылар конкурсында еңеү яулаған. Аликанте ҡалаһында донъя кимәлендә билдәле булған Испанияның опера йырсыһы Ана Мария Санчес етәкселегендә үткәрелгән форум Испания һәм Италия, Рәсәй һәм Ҡытай, Көньяҡ Корея һәм башҡа илдәрҙән ҡатнашыусыларҙы йыйған. Өсөнсө турға 14 ҡатнашыусы ғына сыҡҡан, улар араһында Әлфиә лә булған. Ярыштарҙың финал этабында Өфө солисы жюри ағзаларын ике ауыр ария башҡарыуы менән хайран ҡалдырған. Конкурс һөҙөмтәләре буйынса Әлфиә Кәримова I премияға лайыҡ булған.

✓ *Йыш ҡына япа-яңғыҙы ҡалған өлкәндәр ниндәйҙер документтарға ҡул ҡуйырға мәжбүр була. Сит кешеләр тарафынан күрһәтелгән ҡыҙыҡһыныуҙы улар хәстәрлек һәм иғтибар тип ҡабул итеүсән.*

*НИКАХТАР КҮКТӘ ЯРАЛА*

# ӨЛГӨЛӨ ҒАИЛӘ...

## башҡаларға маяҡ



**Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театрында "Йәш ғаилә - 2011" ҡала конкурсы булып үтте. Ҡағиҙә буларaҡ, бындай конкурстарҙа иң өлгөлө һаналған ғаиләләр ҡатнаша. Был юлы ла туғандары, яҡындары ярҙамында йәш ата-әсәләр балалары менән үҙҙәрен һәр яҡтан өлгө булырлыҡ итеп күрһәтә алды.**

Конкурс өс өлөштән торған һынауҙарҙан ғибәрәт ине. "Беҙ барыбыҙ ҙа баласаҡ иленән" - үҙ-үҙең менән таныштырыу өлөшө, "Беҙҙең өйҙөң йәме" - балалар конкурсы, "Ғаилә яҙмышында - ил яҙмышы" тип исемләнгән күргәҙмә-презентациялар йәш ғаиләләр араһынан иң-иңдәрҙе һайлап алырға ярҙам итте. Бәйгене ҡарарға килгән тамашасыларҙың да һәр сығышта үҙҙәре менән уртаҡ һыҙаттар күреүенә шик юҡ, сөнки беҙ барыбыҙ ҙа - баласаҡ иленән.

Конкурс йомғаҡтары буйынса жюри ағзалары дүрт ғаиләне төрлө номинацияларҙа еңеүсе тип тапты, ә өс ғаилә - I, II, III дәрәжә дипломдар менән билдәләнде. Светлана һәм Дамир Вәлиевтар "Иң үҙенсәлекле", Кристина һәм Динис Уйылдановтар - "Иң күңелле", Марина һәм Михаил Гладковтар - "Иң театраль", Эллина һәм Владимир Мавриндар - "Иң музыкаль" ғаиләләр, тип баһаланһа, Оксана һәм Шәһит Мифтахетдиновтарға - 3-сө дәрәжә, Ирина һәм Андрей Ларионовтарға - 2-се, Гөлсәсәк менән Ринат Ғатауллиндарға 1-се дәрәжә лауреат исеме һәм дипломдар бирелде. Конкурста ҡатнашҡан 7 ғаиләгә лә сертификат тапшырылды. 3-сө дәрәжә лауреат исеменә лайыҡ булған башҡорт ғаиләһе Оксана менән Шәһит Мифтахетдиновтарға һәм уларҙың көйәрмәндәренә сара тураһындағы фекерҙәре менән уртаҡлашыуҙарын һорап мөрәжәғәт иттек.

**Шәһит МИФТАХЕТДИНОВ, Өфө ҡалаһы:** "Йәш ғаилә" конкурсында тәүге тапҡыр ҡатнашабыҙ. Былтыр ҙа саҡырғайнылар, тик улыбыҙ бәләкәй булыу сәбәпле, килә алманыҡ. Быйыл Батырйәнебеҙгә 4 йәш тулғас, әсәһе менән һөйләшеп, үҙебеҙҙең көстө һынап ҡарарға булдыҡ һәм, минең уйымса, уңышлы ғына сығыш яһаныҡ. Сәхнәгә сығарып, улыбыҙҙы иң тәүҙә үҙебеҙ баһаланыҡ. Сәхнәгә йыш күтәрелгән бала һүҙен ҡурҡмай әйтергә, ҡаушамаҫҡа өйрәнә, уның хәрәкәттәре һығылмалы, ым-ишараһы ихласыраҡ була ғәҙәттә. Ҡайһы бер балаларға артислыҡ һәләте тәбиғәттән дә бирелеүе мөмкиндер, шулай ҙа, минең уйымса, был оҫталыҡты үҫтерергә лә мөмкин.

Үҙебеҙ менән таныштырыу өлөшөндә халҡыбыҙҙың боронғо туй йолаһының килен һөйөү эпизодын сәхнәләштерергә булдыҡ һәм халыҡсан рухтағы сценарий барлыҡҡа килтерҙек. Был йола беҙҙең Баймаҡ яҡтарында әле лә һаҡланып ҡалған, ә күп кенә райондарҙа ул бөгөнгө көндә онотола ла башлаған. Шуға ла үҙебеҙ өсөн ҡәҙерле булған ошо күренеште күмәк халыҡ алдында сәхнәләштерҙек тә инде.

**Фәрзәнә ХОҘАЙБИРҘИНА, Баймаҡ районы Бәхтегәрәй ауылы:** Бөгөн быуындар бәйләнешен һаҡлап алып ҡалыу бик әһәмиәтле. Йәштәр ғаилә тарихын, шәжәрәләрен белһә, үҙ-ара мөнәсәбәттә иң мөһимде күрә, баһалай ала. Ваҡтөйәк мәсьәләләрҙе ҡабартмай. Ошо сифатты балалары ла үҙләштереп үҫә. Мифтахетдиновтар ғаиләһе был йәһәттән беҙҙең өсөн өлгө булып тора, тип әйтер инем. Конкурста ла улар шуны күрһәтергә теләне. Шәһиттең олатаһы Сабирйәндән күсә килә был ғаиләнең ҡото. Тимерсе, һуғыш ветераны Сабирйәнде ауылдарында бик хөрмәт иткәндәр. Хәҙер ҙә яҡшы һүҙҙәр менән хәтерләйҙәр. Шуға күрә Мифтахетдиновтар үҙ исемдәренә тап төшөрмәй, тырышып көн күрә. Мифтахетдиновтар менән Хоҙайбирҙиндар өс тиҫтә йыл элек ҡоҙалашҡайны. Ошо арала туғанлыҡ тойғоһо бер ҡасан да һүрелгәне юҡ. Ҡоҙаларыбыҙҙың ярҙамсыл, ихтирамлы булыуы һоҡландыра. Ҡатын - муйын, ир - баш, тигән аҡыллы һүҙгә таянып йәшәргә кәрәктер. Шәһит ҡоҙа ла ғаилә өсөн яуаплылыҡты үҙ өҫтөнә алған. Сөнки үҙе шулай тәрбиәләнгән. Улын да ысын башҡорт рухында - батырҙарса үҫтерә. Ғаилә ни тиклем ишлерәк, шул тиклем яҡшыраҡтыр ул. Балалар ата-әсәһенә, бер-береһенә терәк булып үҫә. Шәһит тә ҙур ғаиләлә тәрбиәләнде. Ҡоҙаса менән икеһенә, һеҙҙең ғаиләгеҙ ҙә ишле булһын, тип теләйем.

**Шәүғәнә МӨХӘМӘТЙӘНОВА, Силәбе өлкәһе Ҡоншаҡ районы Кесе Ҡаҙаҡбай ауылы:** Оксана ҡыҙым бәләкәстән тырыш булып үҫте. Үҙебеҙҙең өлгө шулай булғандыр инде. Сөнки һүҙ менән генә тәрбиә биреп булмай. Беҙҙең яҡтарҙа, ҡыҙғаныс-ҡа ҡаршы, йәштәр туған телен бик ҙур ауырлыҡ менән үҙләштерә. Ғаиләлә үҙ диалектыбыҙҙағы башҡорт телендә аралашабыҙ. Шуға ҡыҙыбыҙ ҙа ерле һөйләште яҡшы белә. Ләкин әҙәби телгә Өфөгә башҡорт гимназияһына уҡырға ингәс кенә өйрәнде. Үҙем балалар баҡсаһында тәрбиәсе булып эшләйем. Хәҙер беҙҙә лә ҡайһы бер баҡсаларҙа башҡорт теле дәрестәре уҡытыла. Мин эшләп йөрөгән Ҙур Ҡаҙаҡбай ауылында ла башҡорт теле уҡытыу индерелде. Ыңғай күренеш, ләкин тәү сиратта ғаиләлә туған тел мөхите булдырыу кәрәк.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Тормош - конкурс түгел, уны билдәләнгән, планлаштырылған һәм тапалған сценарий буйынса үтеү ҙә мөмкин түгел. Шул уҡ ваҡытта, ошондай саралар фекерҙәрендә буталғандар, аҙымдарында яңылышҡандар һәм саттарҙа икеләнеп ҡалғандар өсөн үҙенсәлекле бер маяҡ ролен үтәй. Был йәһәттән конкурста халыҡ рухын асып һала, милли йолаларҙы сағылдыра, ысын ир һәм ысын ҡатын ниндәй булырға тейеш, тигән һорауға яуап бирә алған Мифтахетдиновтар ғаиләһе өлгө булып тора, беҙҙеңсә.**

*ҺОРАУ - ЯУАП*

### АТАЙЫҢДЫ ҮҘ ИТҺӘҢ

**Үҙ атайым иҫән булһа ла, үгәй атайым мине ҡыҙы итеп яҙҙырҙы. Атайым вафат булды, минән башҡа уның фатирына дәғүә итеүсе вариҫтары юҡ. Ләкин мираҫ миңә лә тейеш түгел, тиҙәр.**

- Суд ҡарары буйынса үҙегеҙҙең биологик атайығыҙ йәки башҡа нәҫел-нәсәбегеҙ менән мөнәсәбәттәрегеҙ һаҡланған осраҡта ғына һеҙ вариҫ булып иҫәпләнәһегеҙ. Әгәр ысынлап та шундай ҡарар бар икән, үҙ атайығыҙ вафатынан һуң һеҙ вариҫлыҡ хоҡуғына эйәһегеҙ.

### СИТ ҠАТЫН ЭЙӘЛӘШКӘН

**Өләсәйем янына күрше фатирға яңыраҡ күсеп килгән бер ҡатын эйәләшкән. Йортта йәшәүселәр был ҡатын янына ниндәйҙер шикле кешеләр йыш йөрөүен күрә. Ялған документтар әтмәләп, улар өләсәйҙән ҡул ҡуйҙыртһа, фатирын тартып алыуҙары ихтимал, тип борсолабыҙ...**

- Беренсенән, өләсәйегеҙгә күрше ҡатын түгел, ә балалары һәм ейән-ейәнсәрҙәре яҡыныраҡ, ҡәҙерлерәк булһын өсөн бөтәһен дә эшләргә кәрәк. Янына йышыраҡ килегеҙ, ярҙам итегеҙ, уның мәнфәғәттәре менән йәшәгеҙ. Йыш ҡына яҡындары тарафынан онотолған һәм япа-яңғыҙы ҡалған өлкәндәр ниндәйҙер документтарға ҡул ҡуйырға мәжбүр була. Сит кешеләр тарафынан күрһәтелгән ҡыҙыҡһыныуҙы улар хәстәрлек һәм иғтибар тип ҡабул итеүсән. Шуның өсөн дә өләсәйегеҙ тормошона сит-яттарҙың ҡыҫылыуына юл ҡуймағыҙ. Әгәр ҙә өләсәйегеҙ ниндәйҙер ҡағыҙға ҡул ҡуйып өлгөргән булһа, хәлде үҙгәртеү күп йәһәттән уның үҙенә бәйле. Нигеҙле булған хәлдә, теләһә ниндәй килешеүҙе лә юҡҡа сығарырға, ә васыятты иһә яңынан яҙҙырырға була икәнлеген иҫтә тотоғоҙ.

### ИНСПЕКЦИЯ ЯҠЛАУЫНДА

**Үҙәкләштерелгән йылы һыу биреү системаһына тоташтырылған йортта йәшәйем, газ колонкаһы менән файҙаланам. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, торлаҡ менән идара итеүсе компания ай һайын әҫе һыу өсөн аҡса түләтә. Был мәсьәлә буйынса кемгә мөрәжәғәт итергә?**

- Коммуналь түләүҙәрҙең законлығына төбәк торлаҡ инспекцияһы контроллек итә (РФ Хөкүмәтенең "Рәсәй Федерацияһында дәүләт торлаҡ инспекцияһы тураһында" 1994 йылдың 26 сентябрь ҡарары нигеҙендә). Торлаҡ хужалығы һеҙҙең мөрәжәғәттәрҙе яуапһыҙ ҡалдырған хәлдә әлеге торлаҡ инспекцияһына идара итеүсе компанияның юридик адресын күрһәтеп һәм мәсьәләнең айышын аңлатып хат ебәрегеҙ. Факттарҙы тикшергәндән һуң торлаҡ инспекцияһы һеҙҙең мөрәжәғәт буйынса аныҡ сара күрергә бурыслы.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА әҙерләне.**

## Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы

### Күҙгә арпа сыҡһа



Күҙгә арпа сығыу айырыуса йыл миҙгеле алмашынғанда йыш күҙәтелә. Уны дауалау өсөн: 1 ҡалаҡ етенде 1 стакан ҡайнар һыуға һалырға һәм марляны шуға тығып сылатып, күҙ ҡабағына һөртөргә.

### Бәйғәмбәр тырнағы (календула) майы

Был май тышҡы тәьҫирҙәргә тиҙ бирешеп барыусы тирене боҙолоуҙан, ҡояшҡа яныуҙан һаҡлай. 250 грамм суҫҡа мыйын иретергә һәм шуға ике ҡалаҡ календула сәскәһе ҡушырға. Өҫтөндә күбектәр барлыҡҡа килгәнсе утта ҡайнатырға һәм бер төн төнәтергә. Икенсе көндө йылытып, ике-өс ҡат марля аша һөҙөргә. Һыуытҡыста ярты йыл һаҡлана, ә бүлмәлә - 2 аҙна. Был майҙы тәнгә һөртәһең.

### Сәс тәрбиәләү

❖ Сәсте йыуғас, 30-40 минуттан һуң ғына тара;

❖ газ плитәһе, электр приборы янында киптермә, сәс төҫһөҙләнә, остары саталана;

❖ тарағыңдың теште ре осло булмаһын;

❖ һәр кемдең үҙ тарағы булһын;

❖ сәс электрланмаһын өсөн ағас тараҡ файҙалан;

❖ төрлө буяуҙар менән йыш буямаҫҡа, сәстең тамыры ҡорой;

❖ арпа бешереп, һөҙөп, шул һыу менән сәс йыуығыҙ.

### Экземаны дауалау

❖ Картуф һыуынан компресс яһарға, япҡан сепрәгенде кипкән һайын еүешләп торорға;

❖ ваҡ ҡырғыстан үткәрелгән картуф иҙмәһе лә экзема сыҡҡан тирене шәп дауалай (картуфты йыуырға, әммә ҡабығын әрсемәҫкә);

❖ яңы ғына һығылған һарымһаҡ һутын һөртөргә лә була.

### Ҡолаҡ шаулаһа

Байтаҡ кеше ҡолаҡ шаулауы менән яфалана. Ә унан ҡотолоу юлы ябай ғына: тауышлы бүлмәләргә инмәҫкә; йоҡларға ятыр алдынан аҡҡан һыу тауышын тыңларға (яҙмалар етерлек хәҙер); душ аҫтында йыуынырға; һис юғы көнөнә бер тапҡыр йәшелсә йәки емеш һуты эсеп ғәҙәтләнергә.

**Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.**




# МИЛЛӘТ ТӘРБИӘЛЕ, ҡатындары тәрбиәле булһа

## Белемле ҡатын

Әсәләре наҙан булһа, балаларына ғилем мөхәббә-тен, әхлаҡ дәрестәрен, һәр мөьмингә кәрәк булған нәмәләрҙе кем өйрәтер? Аталары мәғлүмәтле булһа ла, балаларҙы тәрбиәләргә хәле етмәҫ. Мәктәп мөғәллимдәре уҡыуға, яҙыуға өйрәтһә лә, тәбиғәт һәм холоҡ мәсьәләләрендә әсәләр өйрәтәсәк нәмәләрҙе өйрәтә белмәҫ. Шуның өсөн, бала тәрбиәһе хаҡында булған хеҙмәттәрҙең иң бөйөгө - әсәләр өстөндәләр. Шуның өсөн ҡатын ғилемле булырға тейеш.

Мосолман ҡатындарына төрлө фәндәр, сит телдәр өйрәнерҙән алда, дин, әхлаҡ, кеше менән аралаша белеү әҙәбе, өй эсендә буласаҡ һөнәрҙәр, уҡыу һәм яҙыу, йортто тәрбиәләү, ғаилә менән идара итеү ғилемдәрен белеү һәм өйрәнеү кәрәк булыр.

Дин тәрбиәһе алған кеше - Аллаһы Тәғәләне хаҡ Аллаһ тип таныр, ҡулынан килгән ҡәҙәр ғибәҙәтендә булыр, атаһы менән әсәһен, ауылдаштарын һәм күршеләрен, нәҫел һәм ҡәбиләһен ололар; бер кемгә лә, үҙенә лә зарар итмәҫ. Шуға ла балаларын дингә нигеҙләнеп тәрбиәләгән ҡатын уларҙан яҡшылыҡ күрер, барлыҡ халыҡтан маҡтау ишетер, исеме лә ҡиәмәткә ҡәҙәр рәхмәт менән иҫкә алыныр.

Әхлаҡ ғилеме ҡатындар өсөн мотлаҡ икәнлегендә шик юҡ. Әгәр ҡатын-ҡыҙ гүзәл холоҡло булһа, бөтөн ғаиләне берләштерер һәм кинәндерер; холоҡһоҙ булһа, бөтөн ғаиләне харап итер.

Ҡатын-ҡыҙ - ер тетрәү менән берҙер, уның арҡаһында өйҙәр һәм ҡалалар емерелер; ҡатын-ҡыҙ - туптыр, уның менән ҡалалар яулап алыныр.

Аш бешерә, кейем тегә, өй тәрбиәһе һәм ҡул һөнәре белеү - ҡатын-ҡыҙ өсөн бөйөк камиллыҡтыр. "Һөнәр - фәҡирлектән имenlек" тиерҙәр. Ысындан да, һөнәрле бер ҡатын - балалары менән тол һәм етем ҡалған ҡара көндә лә хур булмаҫ. Ғаиләлә ҡатын кеше ҡул һөнәрҙәре белһә, өйҙең байлығы юҡ ергә сарыф ителмәҫ.

Яҙыу һәм уҡыу белгән ҡатын өй эсендә ултырғанда ла һәр төрлө файҙалы яҙмалар уҡыр, тарих, география һәм башҡа әҙәбиәттән хәбәрҙар булыр, ире сәфәрҙә булһа, арала йөрөйәсәк хаттарҙы яҙҙырыу һәм уҡытыу өсөн сит кешеләр янына йөрөмәҫ, шуның менән йәшерен серҙәрҙе фаш итергә мәжбүр булмаҫ. Бының һөҙөмтәһе булараҡ, тәмһеҙ һүҙҙәр һөйләү һәм ялған-яңылыш хәбәрҙәр күсереү ғәйептәренән азат булыр, бөйөк ғалимдарҙың һүҙҙәрен тыңлап ултырыуға һәм үҙ һүҙҙәрен уларҙан тыңлатыуға лайыҡ булыр. Ире ни ҡәҙәр уҡымышлы булһа ла, ғилем өлкәһендә уға тиңдәш, донъя сәфәрендә иптәш була белер.

Китаптар - аулаҡта серҙәш, яңғыҙлыҡта иптәш булыр, хәсрәтте таратыр, күңелде нурландырыр, икейөҙләнмәй торған дуҫ, ышаныслы арҡаҙаш булғанлыҡтан, аҡыллы һәм гүзәл холоҡло заттар тарафынан яҙылғанлыҡтан, ҡатындар өсөн уҡыу, әлбиттә, файҙалылыр. Фәҡәт уҡыу өсөн китап һайлау дуҫ һайлау ҡәҙәре үк ауыр булыр. Китаптар араһында ҡайһы берҙәре боҙоҡ юлдаштарҙан да зарарлыраҡ булыр.

Форсат булғанда, сәләмәтлек һаҡлау ҡағиҙәләренән һәм ауырыу кеше тәрбиәләү тәртиптәренән иң мөһим булғандарын бер ҡәҙәр булһа ла белеү әсәләр һәм ҡатындар өсөн файҙаһыҙ булмаҫ. Сөнки бындай ҡатын кәрәк ваҡытта балаларына һәм башҡаларға оло ярҙам күрһәтә белер.

Сәләмәтлек һаҡлау ҡағиҙәләрен белгән әсәләр ашау, эсеү, кейеүҙә файҙалы булған нәмәләрҙе зарарлыларынан яҡшы айырыр, шул сәбәпле уларҙың балалары сәләмәт йәшәр.

ТЕЛЕМ, ТЕЛГЕНӘМ...

# ҺИН ДӘРЕС БИРГӘНДӘ...

## ҡурай моңо ла яңғырап торһон



**Бөгөнгө мәҡәләлә тел дәрестәренең һәр береһендә үткәрелергә тейешле ҡайһы бер эштәргә байҡау яһайыҡ.**

Башҡорт теленең төп фонетик үҙенсәлеге - сингармонизм. Йәғни төп башҡорт һүҙҙәрендә йә ҡалын, йә нәҙек һуҙынҡылар ғына була. Унан, беҙҙең телдә 33 кенә телмәр өнө барлығын да иҫәпләһәк, башҡорт теле мөхитендә генә үҫкән баланың артикуляцияһы үҫһен өсөн тәбиғи мөмкинлек бик әҙ. Башҡорт балалары араһында һәр өнөн асыҡ итеп, халыҡ әйтмешләй, ауыҙ эсендә бутҡа бешермәй генә һөйләүселәрҙең бик самалы булыуы шуның менән дә аңлатыла. Шуға ла тел дәрестәренең һәр береһендә артикуляцион күнегеүҙәргә (тиҙәйткестәр, йәғни тел көрмәлдергестәр, шиғырҙар, мәҡәлдәр, махсус төркөмләнгән һүҙҙәр һ.б.) урын булырға тейеш. Бәләкәйҙән формалашҡан дикция артабан урыҫ телендә дөрөҫ һөйләшеү өсөн дә кәрәк бит әле.

Көн дә эшләнә торған эштәрҙең тағы береһе - диктант, йәғни ишеткәнде яҙыу. Диктант тиғәс тә, тотош сәғәткә һуҙылған түгел, ә бер нисә һөйләмде әйттереп яҙыу күҙ уңында тотола. Бының өсөн дәреслектән күсереп яҙырға тәғәйенләнгән һәр күнегеү тексы ярай. Диктант өсөн һайланған һөйләмдәрҙе уҡытыусы һәр ваҡыт үҙе генә уҡымай, сиратлап балаларҙан да уҡыта. Шулай булғанда, уҡыусыларҙың фонематик ишетеү һәләте, йәғни төрлө кешенең тауышын айырып алып аңлау һәләте үҫә. Был эштең мин тик ыңғай яҡтарын ғына күрәм. Мәҫәлән, күсереп яҙғанда эште төрлө уҡыусы төрлө ваҡытта тамамлай, ә диктантта бер үк ваҡытта эш бөтә. Тағы ла диктант тексын уҡыған бала үҙ дикцияһына ла иғтибар итә башлай һ.б.

Уҡытыусы, үткән теманың нисек үҙләштерелгәнен белер өсөн, ғәҙәттә, һорауҙар бирә, һәм класта күберәк шундай хәл күҙәтелә: бер-ике ҡыҙ ҡул күтәрә, ҡалғандар китапҡа ҡаҙала, яуап эҙләй. Бер баланың исеме әйтелеү менән, класс тынлыслана, һәр кем үҙ эше менән артабан мәшғүл. "Яуапты тыңлап ултырығыҙ, төҙәтерһегеҙ, өҫтәрһегеҙ" кеүек һүҙҙәр стенаға ҡағылып, иҙәнгә тәгәрәгән борсаҡ кеүек уҡыусының ҡолағы аша зиһененә үтмәй. Бындай "һорау-яуап" эштәре кластан тик берәүҙе - яуап биреүсене генә - әүҙемләштерә ала, шуға ла уның һөҙөмтәһе юҡ дәрәжәһендә. Ә зыяны булып тора. Яуап дөрөҫ булмаһа, класс яуап бирмәһә, уҡытыусының ауыҙынан әр һүҙҙәре йышыраҡ сыға. Әрләп үҙ предметыңды ярattyрып булмай.

Әгәр әҙер һорау биреү урынына "Үткән тема буйынса һәр берегеҙ мөмкин тиклем күберәк һорау төҙөгөҙ" тип, эш бирелһә, бөтә класс уны үтәүҙә ҡатнашасаҡ бит. Һөҙөмтәлә бөтә балалар ҙа үткән теманы иҫкә төшөрә, яңыһын үҙләштерергә әҙерлек ала. Унан, һорау төҙөү яуап биреүгә ҡарағанда ҡатмарлыраҡ, уйларға, башты эшләтергә, белемдәрҙе теүәлләргә кәрәк була. Һәр дәрестә үткәрелгән бындай эш уҡыусыларҙы һөйләмде дөрөҫ төҙөргә булһа ла өйрәтә ала. Югиһә, милләттәштәребеҙҙең байтағы үҙ туған телендә һөйләм төҙөй алмай бер була: тәүҙә хәбәрҙе әйтә лә унан бәйләнешле-бәйләнешһеҙ һүҙҙәр теҙә.

Тағы бер кәңәш. Бөгөн техник сараларға ҡытлыҡ юҡ. Башҡорт халыҡ йырҙары һәм көйҙәре ингән яҙмаларҙы табыуы ауыр түгел. Кеше ниндәй көйҙө даими тыңлай, шуны күңеле телэй башлай. Барабан һуҡҡанды тыңлаһа, барабан оҡшай. Халыҡ йырҙарына, ҡурайға һөйөү уларҙы даими тыңлау, ишетеү нигеҙендә генә тыуа ала. Шуға ла халыҡ йырҙары туған тел дәрестәренең фоны итеп файҙаланылырға тейеш. Йыр - үҙәктәргә үтеп инерлек моң ғына түгел, ул тарих, халыҡтың күңел көҙгөһө. Шул орлоҡтар сәселгән бала теленән дә, хәлҡынан да, моңонан да биҙмәйәсәк. Туған тел дәрестәре балаларҙың ҡыҙыҡһыныуын тыуҙырырлыҡ, "Бына ниндәй икән беҙҙең телебеҙ!" тип һоҡланырлыҡ, һөнәрлөк, уларҙың теләп, көтөп алынған дәресе булырға тейеш.

**Вәкил ХАЖИН, педагогика фәндәре кандидаты.**

ШАҢДАУ

# КИРЕ ҠАҠМА...

## аңлап ҡабул ит

**"Киске Өфө"гэзитендә Вәкил Хажиндың "Телем, телгенәм" рубрикаһындағы сығышын бик ентекләп уҡып барам. Һәм, әйтергә кәрәк, мин уның уй-фекерҙәрен, иҫбатлауҙарын, тел уҡытыуҙағы өр-яңы ҡараштарын аңлап һәм хуплап ҡабул итәм. Ғалим күптән өлгөрөп еткән көнүҙәк мәсьәләне күтәреп сыға.**

Ысынлап та, балаларҙы теория менән артыҡ бимазалау уларҙың аңын, үҫешен тоткарлай. Бынан 50-60 йыл элек беҙ уҡығандағы дәреслектәр, талаптар, башҡорт теленә булған мөнәсәбәттәр күптән иҫкерҙе. Беҙҙең ейәнейәнсәрҙәрҙең мәктәптән телебеҙҙе яратып, үҙ итеп, хатта ниндәйҙер кимәлдә белем алып сығып китмәгәне беҙгә билдәле, сөнки дәреслектәр телгә һөйөү тәрбиәләй алмай. Әлбиттә, теорияны бөтөнләй инҡар итеү тураһында һүҙ алып бармай тел белгесе. Мәҫәлән, тыныш билдәләренең ҡуйылышын ҡағиҙәгә таянмайынса, ятламайынса ғына белеп тә булмай. Шундай мәсьәләләрҙе күҙ уңында тотоп, ҡайһы берәүҙәр В. Хажин иптәштең фекерҙәрен аңлап етмәй, инҡар итеп, ҡаршы сығыш яһаусылар ҙа табыласаҡ, әлбиттә. Сөнки яңылыҡты аңлап ҡабул итеү өсөн уйланырға, эҙләнергә, өйрәнелгән ҡалыптан сығырға, хатта үҙеңдең "мин беләм"легенде лә еңергә кәрәк. Ә кире ҡағыу күпкә еңел.

Ижади һәләте булмаған, уйланмаған йәки тәжрибәһеҙ йәш уҡытыусылар тап китаптағыса ғына үткәрә лә туған тел дәрестәрен, ҡәнәғәтлек хисе кисерә, ә ижади уҡытыусылар күптән үк инде В.Хажин тәҡдим иткән концепция нигеҙендә үткәрергә баҙнат итә уларҙы. Мин үҙем, уҡытыусы булараҡ, элекке уҡыусыларымдың эш стилен ситтән булһа ла күҙәтеп йөрөйөм. "Май сүлмәге тышынан билдәле" тиҙәр бит. Мәҫәлән, Баймаҡ районы Таулыҡай мәктәбендә башҡорт теле уҡытыусыһы булып эшләп, хаҡлы ялға сыҡҡан Хәсәнова Рәйсә Сәфәрғәле ҡыҙының үҙ дәрестәрен китапса ғына, теория өйрәтеү менән генә сикләнеп үткәрмәгәнлеге районда ғына түгел, бөтә республикаға билдәле. Мин үҙем уның башҡорт теле дәрестәрен халҡыбыҙ йолаларына, йыр-моңдарына, тарихына, ғөмүмән, Вәкил Хажин күҙаллағанса, мәҙәниәткә бәйләп алып барыуын, уҡыусыларында ижад ҡомары тәрбиәләй алыуын беләм. Уларҙы үҙенең тауышына, үҙе ижад иткән ҡобайырҙарына, шиғырҙарына һоҡландырып, киң ҡарашлы шәхестәр итеп тәрбиәләргә баҙнат итеп (методика ҡушҡанса ғына түгел), янып эшләгән сағын беләм. Милләтебеҙ телен тап шундай уҡытыусылар уҡытырға һәм тап шундай юсыҡта өйрәтергә тейешбеҙ, минеңсә лә.

Вәкил Исмәғил улының "Башҡорт теле дәресендә теорияны тәфсирләп-тәфсирләп өйрәтеүҙең кәрәге юҡ", тигән фекере менән килешмәй мөмкин түгел. Мәҫәлән, телдәрҙең күплек ялғауҙарын өйрәнеү өсөн дәреслектең ике бите туп-тулы теория-ҡағиҙәләр, һүҙ-миҫалдар (махсус дәреслек табып уҡып сыҡтым). Ижади һәләткә эйә булмаған йә тәжрибәһеҙ йәш уҡытыусы шул ҡағиҙәләрҙе ятлатып, 2-3 дәресен сарыф итеп, уҡыусының тенкәһенә тейә бит инде. Рус телле башҡорт балаларына йәки башҡа милләт вәкилдәре өсөн бындай, йәғни ошо үрҙә әйтелгәнсә үткәрелгән дәрестәр ялыҡтырғыс минуттарға әүерелә, әлбиттә.

Уйланырға, кәңәшләшергә урын бар. Бер төптән тороп телебеҙҙе уҡытыу, уны халҡыбыҙҙың ғорурлығы итеп күтәреү сараларын эҙләп табыу зарурлығы көн кеүек асыҡ. Вәкил Исмәғил улының концепцияһын аңлап ҡабул итәйек, хуплайыҡ, йәмәғәт! Тик оҙон-оҙаҡ бәхәстәргә урын ҡалдырмай, йәһәтерәк эшкә тотоноу ҙа кәрәк. Башҡорт теле уҡытыусыларының фекерҙәренә лә, уҡыусылар фекерҙәренә лә урын табылыр, тип өмөтләнәм.

**Рәүеф БИКТАШЕВ. Сибай ҡалаһы.**

ХӘТЕРКИТАП

**"Халҡыңа хеҙмәт итеүең, фәнгә бағышланған ғүмер халыҡ күңелендә мәңгегә һаҡлана. Жәлил Ғиниәт улының тормошо йыр булды, хеҙмәте халҡына бағышланды, шуға ла улар халыҡ күңелендә оҙаҡ һаҡланасаҡ", - тип яҙа Жәлил Кейекбаев тураһында "Дәртле йыр" китабында Татарстандың билдәле ғалим-төркиәтсеһе М. З. Зәкиев. Ғалим-полиглот Жәлил Кейекбаев, ысынлап та, халыҡ күңелендә оҙаҡ һаҡланасаҡ шәхес. Ул үҙ ғүмере дауамында егермәнән ашыу (рус, инглиз, немец, ғәрәп, венгр, эстон, сыуаш, монгол, тунгус, уйғыр, ҡаҙаҡ, үзбәк, төрөк, татар һ.б.) тел өйрәнә, 50-нән ашыу ғилми хеҙмәт яҙа. "Хәҙерге башҡорт теле лексикаһы һәм фразеологияһы" уҡыу ҡулланмаһы, "Основы исторической грамматики урало-алтайских языков", "Хәҙерге башҡорт теле", "Урал-алтай тел белемен инеш" монографиялары бөгөн дә тел ғилемен өйрәнеүҙә нигеҙ булып тора. Үҙенең тәүге ғилми эшендә үк ул башҡорт телен өйрәнеүҙең иң көнүҙәк проблемаларына ҡағыла, башҡорт әҙәби телен үҫтереү һәм байытыу буйынса тәҡдимдәрен индерә. Башҡорт теленең диалекттарын өйрәнеү буйынса ла ҙур эш башҡара, студенттарҙың диалектологик экспедицияларын ойоштора. Һуңынан башҡорт диалекттарын һәм һөйләштәрен классификациялай. Башҡорттар араһынан беренсе филология фәндәре докторы дәрәжәһен ала Жәлил Ғиниәт улы. Түбәндә ғалим тураһында уҡыусылары, замандаштары хәтирәләре менән уртаҡлаша.**



# ЙЫРҒА ТОРОШ ҒҮМЕР,

## йәки Оло ғалим Жәлил Кейекбаев тураһында һүҙ

**Әхмәт СӨЛӘЙМӘНОВ, филология фәндәре докторы:** Профессор Жәлил Кейекбаев бик ғәҙел, талапсан уҡытыусы булды. Студенттарының саҡ ҡына булһа ла тырышлығын күрһә, сикһеҙ ҡыуаныр ине. Берәйһенең шпаргалка яҙып, мутлашыуын йә лекция ваҡытында юҡ-бар менән шөғөлләнеүен, семинарға әҙерләкһеҙ килеүен белеп ҡалһа, шелтәнең иң тоҙлоһо менән "һыйлар" ине. Иң яманы - уның ауыҙынан "Виртуозное нахальство!" тигән һүҙҙе ишетеү булғандыр.

Бик сетерекле мәсьәләләр килеп тыуғанда, уларҙы дөрөҫ хәл итеү юлын күп ваҡыт профессорыбыҙ Жәлил Кейекбаев табыр булды. Ни эшләргә лә белмәй, шәхсән аптырауға ҡалғанда ла кәңәш һорап уға барыр инек. Лекция уҡығанда Жәлил Ғиниәт улы бәхәсле, ҡатмарлы проблемаларҙы ла аңлайышлы итеп төшөндөрә белде. Телгә үтә лә һиҙгер булды һәм студенттарынан да шуны талап итте. Ә был уның туған телде һөйөүе һәм хөрмәт итеүе менән аңлатыла. Ул барҙа, шәкерттәре лә, радио, телевидение хеҙмәткәрҙәре лә, артистарыбыҙ ҙа тел тәңгәлендә үҙҙәрен күҙәтеү аҫтында торғандай тота ине. Һәр хәлдә, орфоэпия законын боҙмаҫҡа тырыштылар. Хәҙер иһә туған телгә һөйөү хаҡында һөйләүселәр күп, тик ошо телдә дөрөҫ һөйләү ҡағиҙәһен күҙәтеүсе генә аҙ.

**Рәмзиә БИКӘНӘСОВА, Башҡортостан Фәндәр академияһының Гуманитар тикшеренеүҙәр институты ғилми хеҙмәткәре:** Ике йылдан ашыу Жәлил Кейекбаевтың архивы менән шөғөлләнәм. Был - әле өйрәнелмәгән өлкә, ҡалдау ер тип әйтер инем. Көн һайын үҙемә яңы асыштар яһайым. Уның архивында ниндәй генә китаптар, мәғлүмәт, хаттар юҡ! Уның китапханаһын да эҙләп таптым.

Беҙ Башҡорт дәүләт университетында уҡығанда Жәлил Ғиниәт улы яҡты донъяларҙан киткәйне инде. Унда уҡығанда беҙ "Жәлил Кейекбаев тигән бик шәп ғалим булды, үкенескә күрә, бик иртә донъя ҡуйҙы, ул "Педагогия училищелары өсөн" тигән дәреслек авторҙарының береһе" тигән мәғлүмәт менән генә сыҡтыҡ. Уның хеҙмәттәре буйынса лекциялар уҡыған кеше булманы. Ә бит ул башҡорт теленең дөрөҫ әйтелеше буйынса 1964 йылда уҡ кандидатлыҡ диссертацияһы яҡлаған берҙән-бер кеше. Бындай аналогик хеҙмәт ул саҡта әзербайжандарҙа ғына була, Ҡаҙағстан, Үзбәкстан, Төркмәнстан, Ҡырғыҙстан, Татарстанда бындай хеҙмәттәр ҙә, ғалимдар ҙа ул заманда булмай. Әлеге көндә лә был тема буйынса хеҙмәттәр юҡ.

Фән кандидаттары әҙерләүгә ҙур әһәмиәт бирә Жәлил Ғиниәт улы. Төрки халыҡтар араһында фән докторҙары күберәк булһын тип тырыша, үҙенең студенттарын Мәскәүгә ебәрә. Күп аспиранттарға оппонент була. Аспиранттар уға Урта Азиянан, хатта Грузиянан үҙҙәренә оппонент булыуын һорап хаттар яҙған. Әгәр уның хеҙмәттәре тураһында хәбәрҙар булмаһалар, уға сит студенттар мөрәжәғәт итмәҫ ине бит инде. Билдәле тибетолог, рәссам, күренекле ғалим Юрий Николаевич Рерих вафат булғас, уның бер бүрәт милләтенән булған аспиранты Балдыржа Бадыраев Жәлил Ғиниәт улына хат яҙып, үҙенең оппоненты булыуын үтенә. Был да сит республика студентының Кейекбаевтың хеҙмәтен юғары баһалауына бер дәлил.

**Әхмәр АҘНАБАЕВ, БДПУ профессоры:** Жәлил Кейекбаевтың диалекттар мәсьәләһендәге бер хатаһы хаҡында төрлө фекерҙәр йөрөй. Әммә ул йәшәгән һәм иҗад иткән осор менән Башҡортостандың бөгөнгөһөн сағыштырып ҡарағанда, уның хатаһының нигеҙен күрергә, аңларға мөмкин. Заманында ул, нисектер асылып китеп, ике тарихты һөйләп ташлағайны: "Бер бөрола мине комсомолдан сығарҙылар, йәнәһе, немецтар менән аралашам, немец шиғырҙарын, әкиәттәрен тәржемә итәм, немецтарҙы маҡтайым һ.б. Был хәлдән 5-6 ай элек Өфөгә Вольф исемле немец шағиры (коммунист) килгәйне. Яҙыусылар союзы етәксеһе ҡушыуы буйынса мин уны оҙатып йөрөнөм. Ошо фактты файҙаланып, кемдәрҙер КГБ-ға минең өҫтән ошаҡ хаты яҙған. Ул йылдарҙа ошондай ошаҡ хаттары менән республиканың бик күп данлыҡлы кешеләрен һәләк иттеләр. Ҡулға алыр алдынан кешене, коммунист булһа - партиянан, комсомол булһа - комсомолдан сығаралар ине. Шул хәлдәрҙе күреп-белеп йөрөгәс, комсомол билетын һалып сыҡҡас, йөшәгән фатирыма ҡайтып торманым, сөнки унда КГБ кешеләре көтөп тороуы мөмкин ине. Бер машинанан икенсеһенә күсеп юл яҙҙыра-яҙҙыра, вокзалға төштөм, бәхетемәлер инде, Мәскәү поезы китергә генә тора ине. Мәскәү эргәһендәге бер ауылда курсташым (рус кешеһе) мәктәп директоры булып эшләй ине. Тоттом да шунда барҙым. Уҡытыусылар етешмәгән ваҡыт, ул мине эшкә алды. Шулай ҙа иҫкәртеп ҡуйҙы: улай-былай хәл килеп сыҡһа, һин минә бер нәмә лә һөйләмәнең, йәғни мин һинең тарихыңды белмәнем. Шулай килештек. Бәхеткә күрәләр, ул-был хәл булманы. Ҡайҙа икәнемде бер кемгә лә, хатта туғандарыма ла яҙманым. Һуғыш башланғас ҡына Башҡортостанға ҡайттым. Хәҙер минең менән ҡыҙыҡһыныусы ла булмаһа. Башта үҙ районымда - мәктәп директоры, һуңынан Өфө китап нәшриәтендә баш мөхәррир булып эшләнем, төрлө институттарҙа немец телен уҡытып йөрөнөм. Бер көн эштән һуң элекке фатирыма инеп сыҡтым, хужалар иҫән-аман йәшәп яталар ине. "Ярай ҡайтмағанһығыҙ. Бер айға яҡын кистәрен килеп, һине эҙләнеләр", - тине улар.

Әммә кемдәрҙер мине онотмаған булған икән: 50-се йылдар уртаһы, кандидатлыҡ диссертацияһы яҡлап, юғары уҡыу йорттарында эшләп йөрөйөм, докторлыҡ диссертацияһы өсөн материал йыям. Бер көн минең исемгә посылка килеп төштө. Өфөнән ебәргәндәр, үҙәк почтаның штампы тора. Асып ҡараһам,унда Зәки Вәлидиҙең унлаған китабы ята. Ул саҡтарҙа был кешене тәрләсә гәйепләп, тыйып, исемен дә онотторорға тырышалар ине. Уның менән хеҙмәттәш булған кешеләрҙе, шул иҫәптән Муса Мортазин ғәскәрендә йөрөгәндәрҙе ҡулға алып бөттөләр. Тимәк, кемдер мине лә Зәки Вәлиди менән бәйләп, ҡулға алыныуымды бик теләй... Баштан бер уй йүгереп үтте: был китаптарҙы фатирымда ҡалдырһам, төнөн тентеү менән килеп етәсәктәр һәм, әлбиттә, китаптарҙы табасаҡтар, аҙағы ни менән бөтөүе аңлашылалыр... Китаптарҙы күтәрҙем дә КГБ-ға киттем. Бер майор ҡабул итте: миңә ҡаршы провокация ойоштороусыны табығыҙ һәм хәбәр итегеҙ, тигән ғариза ҡалдырып киттем. Әммә һуңынан бер һүҙ ҙә булманы..."

1955 йылда Өфөләге пединституттың филология факультетының башҡорт-рус бүлегенә уҡырға индем. Тәүге көндән үк уҡытыусылар араһында башҡорттарҙың аҙ булыуын күрҙем: факультетта асылда бер генә башҡорт уҡытыусыһы бар ине (Ғ.Ғ. Сәйетбатталов). Ж.Ғ. Кейекбаев ул саҡтарға докторантурала уҡып йөрөгән икән, ул беҙ һуңғы курстарҙа уҡығанда ҡайтты. Башҡорт телен Әмир Фәтихов тигән уҡытыусы уҡытты, үҙе Саҡмағош районынан ине, башҡорт әҙәбиәтен Х.Ш. Зиннәтуллина, Б. Мәғәсүмова, Ә. Ниғмәтуллин, уларға тиклем Ә. Чаныш тигән уҡытыусылар уҡытҡан. Беҙҙең төркөмдөң старостаһы Темәстән килгән Айрат Исҡужин тигән егет ине. Ул Ш.Х. Зиннәтуллинаның бер дәресендә шаръяп әйтеп һалды: "Беҙҙең уҡытыусылар институт эсендә генә башҡортса һөйләшәләр икән. Ишекте ябып, урамға сыҡһалар, татарсаға күсәләр ҙә китәләр!" Уҡытыусыбыҙ ҡыҙарып-бүҙарып китте, әммә бер нәмә лә әйтмәне. Ул Ҡазанда тыуған, татар мәктәбендә уҡыған, әммә Өфөгә килеп, башҡорт әҙәбиәте буйынса диссертация яҡлаған ине. Рус теле уҡытыусылары араһында ла башҡорттар юҡ ине: рус кешеләре менән бергә татар теле уҡытыусылар эшләй ине. Башҡа факультеттар йәки ректорат составы хаҡында әйтеп тораһы ла юҡ. Бына ниндәй шарттарҙа эшләргә тура килгән Ж.Ғ. Кейекбаевҡа. Шулай булғас, башҡорт диалектологияһы тураһындағы хеҙмәтенә төньяҡ-көнбайыш башҡорттары диалектын индерә ала инеме ул? Индергән хәлдә лә уның яҙғандарын һыҙып ташларҙар һәм үҙен милләтселектә гәйепләрҙәр ине, сөнки уны яҡларҙай кешеләр республика етәкселәре араһында ла, пединституттың үҙендә лә булмаған. Бөгөн университеттың (элекке пединституттың) тарих факультеты уҡытыусылары араһында башҡорттарҙан дүрт-биш фән докторы эшләй. Йәғни хәҙерге шарттарҙа Ж.Ғ. Кейекбаев теге хатаһын һис ебәрмәҫ ине, быға иманым камил.

**Ризван ХАЖИЕВ, ветеран журналист:** Мин ул ваҡытта университетта уҡып йөрөй инем, төркөмөбөҙҙөң старостаһы булдым. Жәлил Ғиниәт улы аҡһабыраҡ йөрөй торғайны. Дәрескә килеп инә лә, тикшер әле, кемдәр юҡ, тип ҡуша. Килмәүселәр булһа: "Бар, эҙләп тап, алып кил", - ти торғайны. Гел йылмайып, яғымлы һөйләште, бер ваҡытта ла уның тауыш күтәргәнен ишеткәнебеҙ булманы. Ҡулында ус аяһындай ғына ҡағыҙ була торғайны. Шул ҡулындағы ҡағыҙға ҡарап ала ла, бөтөн нәмәне таҡтаға яҙып һөйләй, грамматиканан миҫалдар килтерә, үҙе аҡбурға буялып бөтә. Әүҙем кеше ине, янып йәшәне. Үҙ заманында башҡорт зыялыларының матур өлгөһө булып торҙо.

Ғәзим Шафиҡовтың "Известия Башкортостана"ла 1991 йылда сыҡҡан "Бына шундай яҙмыш" тигән бер мәҡәләһе бар. "Иң ҡурҡынысы шунда: бынамын тигән ғалимдар, үҙ халҡының ысын улдары йыш ҡына ауыр көрәш һынауҙарын күтәрә алмай, - тип яҙа ул. - Йәрәктәре күтәрмәй. Кәмһетелеү, эҙләкһеҙ һөжүм, яла яғыуҙар, асыҡтан-асыҡ оятһыҙ мөнәсәбәт уларҙы үлемсле яралай. Тап ошолай үлтерелде үҙ халҡының данлыҡлы улдарының береһе Жәлил Кейекбаев. ...Ә бит Жәлил Кейекбаев башҡорт тел белемен донъя юғарылығына күтәрә ала ине, мотлаҡ күтәрә ине..."

Бөйөк ғалим менән хушлашҡанда, 1968 йылдың яҙында, мин уның исеме киләсәктә Өфө урамдарының береһенә биреләсәк, тигәйнем. Хәҙер, ысынлап та, баш ҡалала бөйөк ғалим исемендәге урам бар. Лира Яҡшыбаева уның тураһында "Һынауҙарҙан туҡылған яҙмыш" документаль повесть яҙып нәшер итте. Унда автор Жәлил Кейекбаевтың бар тормошон, ижади эҙләнеүҙәрен, тупаҫ бохайырҙар ҡорған кәртәләр аша нисек атлауын башынан алып ахырынаса күҙ алдына баҫтыра. Мәскәү, эстон, ҡаҙаҡ, венгр, яҡут, татар, әзербайжан ғалимдары Жәлил Кейекбаевты саҡ күтәреп йөрөтмәгән йылдарҙа үҙебеҙҙә иһә аҙым һайын тәгәрмәскә таяҡ тығалар, ҡолас ташлап эшләргә, ижад итергә аяҡ терәп ҡаршылар, ҡамасаулайҙар. Хатта бына нисәмә йыл уның исемен Башҡорт дәүләт университетына биреү буйынса Башҡортостан матбуғатының сығыштарына ҡолаҡ һалыусы ла юҡ. Шул уҡ ваҡытта Жәлил Кейекбаевтың шәкерттәре лә әлегә тиклем ләммим һүҙ әйткәне юҡ. Нисек кенә булмаһын, 1946 йылдан алып БДУ-ла эшләгән, башҡорттарҙан тәүге фән докторы, тәүге профессор, башҡорт фәнен үҫтереүгә оҙаҡ йылдар хеҙмәт иткән Жәлил Ғиниәт улы Кейекбаевтың исеме Башҡорт дәүләт университетына бирелергә тейеш.

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ әҙерләне.**

***✓ Әсәйебеҙ беҙҙе һәр ваҡыт атайыбыҙ өлгөһөндә "Атайың ни әйтер?" тигән иҫкәрмә менән тәрбиәләне. Бер яҡтан, ул үҙе атайыбыҙҙың һүҙенән сыҡмаһа, икенсе яҡтан, шул һүҙҙәре менән беҙҙе лә атайҙы хөрмәт итергә өйрәтте.***

# КҮҘҘЕҢ ҺУҠЫРЛЫҒЫ

## ә рух һуҡырлығы

**Борон-борон заманда, әллә ни борон да түгел, үткән быуаттың 50-се йылдар аҙағында, 60-сы йылдар башында Өфө ҡалаһында ағалы-ҡустылы ике башҡорт егете күптәрҙең диҡҡәтенә лайыҡ булған, иғтибар үҙәгенә әүерелгән. Был мыҡты кәүҙәле һыу һөлөгөндәй ике егет бик бөхтә кейенеп, аяҡтарына һәр ваҡыт ап-аҡ носкиҙар кейеп, ғорур баҫып йөрөр булған. Уларға баш ҡалала һоҡланмаған кеше, ғашиҡ булмаған ҡыҙҙар ҡалмаған. Көйөргәҙе районының Яҡшымбәт ауылында тыуып үҫкән ағалы-ҡустылы Марат менән Румил АҘНАБАЕВтар тураһында бара һүҙ. Марат Талғат улы - медицина фәндәре докторы, профессор, Рәсәй Федерацияһының һәм Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған фән эшмәкәре һәм атҡаҙанған табибы, БР Фәндәр академияһы академигы, Рәсәй Медицина-техник фәндәре академияһы академигы, Катаракта һәм рефракцион хирургия буйынса Халыҡ-ара совет һәм Европа йәмғиәте ағзаһы, ә Румил Талғат улы - билдәле йәмәғәт эшмәкәре, Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы башҡарма комитеты рәйесе урынбаҫары. Улар бөгөн беҙҙең "Диалог" рубрикаһында ҡунаҡта.**

**▸ Ул саҡта Өфө урамын хайран итеп йөрөүсе ағалы-ҡустылы Аҙнабаевтар үҙҙәренең дворян нәҫеленән икәнен, атап әйткәндә, бөрйәндәрҙең Иҫке (Иҫәкәй), тамъяндарҙың Шағәле Шаҡман, үҫәргәндәрҙең Бикбау бейҙәре менән берлектә Аҡ батшаға барып ярлыҡ алыусы ҡыпсаҡ ырыуының данлыҡлы кенәзе Мишәүле Ҡарағужаҡ бейҙең тоҡомонан икәнен белделәрме икән?**

**Марат Талғат улы:** Әлбиттә, был нәҫелгә ҡарауыбыҙ хаҡында беҙҙең эске һиҙемләү, тойомлау бар ине. Ул саҡта бындай темаларға һөйләргә ярамай ине бит. Партияның район комитеты ағзаһы булып торған атайыбыҙ ауыҙынан да ишетмәнек был тарихты. Ә шулай ҙа Хәмәт, Сөләймән бабайҙар, ауылдағы башҡа олораҡ ағайҙар, ауыҙ тултырып һөйләмәһә лә, ауыҙҙарын ҡаплап, шым ғына мәғлүмәт еткерә торғайны беҙгә. Ни тиһәң дә, беҙҙең шәжәрә бар ине, әммә шәжәрәне атайымдар йәшереп тотто. Шәжәрәбеҙ кириллицаға күсертелмәгәйне, ғәрәп графикаһында ине, күптәргә аңлашылмағанға күрәме, ул ярым йәшерен рәүештә һаҡланды. Өфөгә килеп уҡый башлағас, академик Раил Кузеевтың "Башҡорт шәжәрәләре" тигән китабының 13-сө бүлегенән үҙебеҙҙең шәжәрә менән танышыуға өлгәштем. Уға тиклем мин үҙебеҙҙең ҡыпсаҡ кенәзе Мишәүле Ҡарағужаҡ затына ҡарауыбыҙға легенда итеп ҡарай инем һәм шәжәрәбеҙҙең шундай ҙур кеше - Р. Кузеев китабында урынлашыуын күргәс, тамам инандым.

**Румил Талғат улы:** Беҙҙең ғаиләлә балаларҙы тәрбиәләүгә ҙур иғтибар бирелде. Абдулла кантон ейәнсәре булған өләсәйебеҙҙең үҙен тотошо, кеше алдында үҙебеҙҙе нисек тоторға өйрәтеүе - былар барыһы ла беҙгә йоғонто яһамай ҡалмағандыр. Беҙ кенәз тоҡомонан икәнлегебеҙҙе белмәһәк тә, бәләкәстән ундай тәрбиә барҙы. Кеше тураһында һөйләгәндә уның тик яҡшылығын ғына әйтергә кәрәклекте лә беҙ өләсәйҙән ишеттек. "Кеше алдында үҙегеҙҙең физик өҫтөнлөгөгөҙҙө күрһәтмәгеҙ, аңығыҙ ҡушҡанса эш итегеҙ, тик шул саҡта ғына башҡалар алдында хөрмәт ҡаҙанырһығыҙ", "Бөтә кеше лә бер иш, бер ваҡытта ла башҡаларҙан үҙегеҙҙе өҫтөн тотмағыҙ", "Бер ваҡытта ла ваҡытығыҙҙы бушҡа үткәрмәгеҙ" тигән аҡыл да ошо уҡ тәрбиә мәктәбенән булды. Студент саҡта ял итергә каникулға ҡайтһаҡ, атайыбыҙ беҙгә бер көн генә ял итеү мөмкинлеге бирә торғайны.

**Марат Талғат улы:** Атайыбыҙ үҙенең телмәрендә бойороҡ һөйкәлешен бик һирәк ҡулланды, бойороҡто ла кәңәш формаһында бирә торғайны. Мине әсәйебеҙ атайыбыҙҙы төшкө ашҡа саҡырырға идараға ебәрер ине. Ҡайһы саҡ атайҙың эше бөткәнсе көтөп ултырырға ла тура килде. Атай шунда, мәҫәлән, ылаусыларға эш ҡушҡанда "Ермолайға бар", тип әйтмәй, ә "Ермолай сығырға кәрәк ине бит әле, шул яҡҡа барып килерһең инде" тип йомшаҡ ҡына өндәшер ине.

**Румил Талғат улы:** Эйе, беҙгә эш ҡушҡанда ла ул быны үҙебеҙҙең инициатива һымаҡ килтереп сығарыр ине. Билдәле, үҙең теләп, үҙең белеп эшләгән эшкә бер нәмә лә етмәй. Ахырыһы, атайыбыҙ был аҡылды бик тәрәндән белгәндер.

**Марат Талғат улы:** Атайыбыҙҙың хеҙмәт биографияһы көтөү көтөүҙән башланған. Бик әүҙем комсомол ағзаһы, район гәзитенең хәбәрсеһе лә булған. Яҙыусы Сабир Кинйәкәйҙең атайыбыҙға яҙған хаттары ла һаҡлана. Ауылыбыҙ тәүҙә бәләкәй генә ине. Атайҙар һуғыштан ҡайтҡан фронтовиктар менән бергәләп Бөрйәндән ҡарағай ағастары алып ҡайтып, ауылыбыҙға ҡарағай өйҙәр һалдылар. Шулай итеп, ауылыбыҙ ҙурая-ҙурая барып колхоз үҙәгенә әүерелеп китте. Маячныйҙан Яҡшымбәткә электр сымын тартыуҙы ла улар үҙҙәре эшләне. Шулай итеп, Яҡшымбәт беҙҙең яҡтарҙа тәүге электр энергияһы үткән ауылға әйләнде. Атайыбыҙ кешеләр менән һөйләшеп килешергә, эште ойошторорға бик оҫта ине.



***Шәжәрәбеҙ кириллицаға күсертелмәгәйне, ғәрәп графикаһында ине, күптәргә аңлашылмағанға күрәме, ул ярым йәшерен рәүештә һаҡланды. Өфөгә килеп уҡый башлағас, академик Раил Кузеевтың "Башҡорт шәжәрәләре" тигән китабының 13-сө бүлегенән үҙебеҙҙең шәжәрә менән танышыуға өлгәштем. Уға тиклем мин үҙебеҙҙең ҡыпсаҡ кенәзе Мишәүле Ҡарағужаҡ затына ҡарауыбыҙға легенда итеп ҡарай инем һәм шәжәрәбеҙҙең шундай ҙур кеше - Р. Кузеев китабында урынлашыуын күргәс, тамам инандым.***

**▸ Улай булғас, атайығыҙ һеҙҙе бер ҡасан да әрләмәгәндер, һеҙгә "аҡыл сыбығы" эләкмәгәндер инде?**

**Марат Талғат улы:** Уның әрләгәнен иҫләмәйем, шулай ҙа миңә бер тапҡыр шыйыҡ сыбыҡ менән тартты. Малай саҡта булды был. Бесән мәлендә күбә тарттырыу, кәбән һалыу эштәре менән булабыҙ. Ололарҙан йәшереп кенә тәмәке тартыусы малайҙар мине лә өндәй, улар тәмәке ҡабының тышындағы тачанкалағы пулеметты күрһәтеп, ауыҙ һыуҙары ҡороп тартыуҙың рәхәтлеге тураһында һөйләй. Өлкәнерәк малайҙар беҙҙе, 39-сы йылғы дүрт малайҙы тәки тәмәке һурырға өйрәттте. Эскә алмайбыҙ инде, алһаҡ, килеп тороп сәсәйбеҙ. Атайым барыбер һиҙгән икән. Бер мәл янына саҡырып алды ла, тал сыбығы менән миңә берҙе эләктерҙе. Икенсегә ынтылғанында, себештәрен ҡурсалаған инә ҡаҙ һымаҡ, арабыҙға өләсәйем төштө. Атайымдың сыбығы өләсәйемдең ҡулына эләкте. Уның ҡарауы, атайымдың был һабағы миңә ғүмерлеккә булды, ҡабат тәмәкене ауыҙыма ла алманым.

**Румил Талғат улы:** Әсәйебеҙ беҙҙе һәр ваҡыт атайыбыҙ өлгөһөндә "Атайың ни әйтер?" тигән иҫкәрмә менән тәрбиәләне. Бер яҡтан, ул үҙе атайыбыҙҙың һүҙенән сыҡмаһа, икенсе яҡтан, шул һүҙҙәре менән беҙҙе лә атайҙы хөрмәт итергә өйрәтте.

**▸ Кенәз бабағыҙ Мишәүле Ҡарағужаҡҡа һәйкәл аҫҡан саҡта һеҙҙең ауылдағы бер хәлгә иғтибар иткәйнем: ул да булһа, бөтә ил буйынса ауыл хужалығы ҡыйралып ятҡан саҡта һеҙҙә ерҙәр һөрөлгән, сәселгән, ауылығыҙ төҙөк. Республика буйлап йөрөгән саҡта, ғөмүмән, ҡыпсаҡ ырыуы вәкилдәре йәшәгән ауылдарҙағы ошондай тәртипте йыш күҙәтеп, хайран ҡалам. Быны һеҙҙең ырыуға бәйләп аңлатып буламы?**

**Марат Талғат улы:** Ҡыпсаҡтар тынғыһыҙлығы менән башҡаларҙан айырылып торалыр, тием. Улар Алтын Урҙа дәүеренә тиклем далала ҙур бер ҡағанат, империя ҡороп йәшәгән айырым халыҡты тәшкил иткән. Аҙаҡ, ҡағанат тарҡалғас, ҡыпсаҡтар төрлө халыҡтарҙың айырым өлөшөн тәшкил итә башлай. 1939 йылғы халыҡ иҫәбен алыу ваҡытында үзбәктәрҙең Фирғәнә өлкәһендәге йөҙ меңдән ашыу халҡы үҙҙәрен ҡыпсаҡ милләте тип таный.

**Румил Талғат улы:** Ҡыпсаҡтар элек-электән тынғыһыҙ йәшәү рәүешенә дусар ителгән. Дала стихияһы ла уларҙы һәр ваҡыт хәүеф көтөп йәшәргә мәжбүр иткән. Далала һәр ваҡыт дошман һөжүм итеренә әҙер булмаһаң, юҡҡа сығаһың бит инде. Унда һине һаҡларлыҡ тауҙар ҙа, урмандар ҙа юҡ. Ғөмүмән, урман кешеһенә һәлкәүлек хас, ул тәбиғәт биргәнен файҙаланып та йәшәй алған, бөгөн булмаһа, иртәгә булыр, тип көн иткән. Икенсенән, Дәште Ҡыпсаҡ империяһы юҡҡа сыҡҡандан һуң Уралтауға һыйынған ҡыпсаҡтарға бер кем дә бер нәмә лә әҙерләп ҡуймаған. Шуның өсөн улар яңы йәшәү урынына килеп ултырыу менән донъя көтөргә керешкән, ер эшенә тотонған. Ҡыпсаҡтарҙың донъя көтөүгә дәртле булыуын ошо тарихи фактор менән дә аңлатып булалыр. Колхоз-совхоздар бөтһә лә, әлегә тиклем беҙҙең ауылда бер баш мал да кәмемәгән һәм бер гектар ер ҙә һөрөлмәй-сәселмәй-урылмай ҡалғаны юҡ.

**Марат Талғат улы:** Беҙҙең белемәлә ун бер ауыл шул рәүешле йәшәй. Бер заман "ҡыҙыл баштар" беҙҙең яҡтың колхоздарын совхозға әйләндерергә йөрөнөләр. Беҙҙең колхозды атайҙар һаҡлап алып ҡалды. Шул арҡала Өс Мотал, Түкән, Туғай Кинйәһе, тағы ла бер нисә ауыл бөттө, элекке улыс үҙәге булған Яҡуп бригада ғына булып тороп ҡалды. Бөткән ауылдарҙың был хәлгә ҡалыуының төп сәбәбе уларҙың юлбашсылары булмауындалыр. Ә бына беҙҙә ундай кешеләр булды һәм улар ауылды һаҡлап ҡалды.

**▸ Һеҙҙең икегеҙҙең дә профессиональ һәм йәмәғәт эшмәкәрлегегеҙ дөйөм алғанда "һуҡырлыҡты" юҡҡа сығарыуға ҡоролған. Марат Талғат улы тура мәғәнәһендә, күҙ табибы булараҡ, кешеләрҙең яҡты донъяға күҙен аса, ә Румил Талғат улы башҡорт милләтенең мәнфәғәттәрен яҡлаған йәмәғәт ойошмаһы етәкселәренең береһе булараҡ, милләтебеҙҙе рухи һуҡырлыҡтан арындырыу юлында. Һуңғы ваҡытта илебеҙҙе һәм милләтебеҙҙе һаҡлар, үҫтерер милли идея хаҡында күп һөйләйбеҙ, ә бына һеҙ был идеяға торорлоҡ йүнәлеште нимәлә күрәһегеҙ?**

**Марат Талғат улы:** Күҙе дөмә һуҡыр булған Бетховен кешелектең күҙен асырлыҡ ниндәй музыкаль әҫәрҙәр ижад иткән. Шулай уҡ дөмә һуҡыр Ванга ысынбарлыҡты күҙле кешеләргә ҡарағанда ла яҡшыраҡ күргән. Шуға күрә донъя яҡтылығын күреүҙән генә мәхрүм булыу һуҡырлыҡ түгелдер, күңелендә ил, милләт төшөнсәһе, милли рухы булмаған кеше һуҡырҙыр.

**Румил Талғат улы:** Башҡорттоң йәшәү рәүеше, башҡа бер халыҡтың да ярҙамына таянмайынса, үҙаллы йәшәргә мөмкинлек бирә. Һәр 30 йыл һайын баш күтәрергә һәләтле халыҡ үрсей алған, үҙ-үҙен туҡландыра, кейендерә һәм ҡоралландыра алған. Ҡыҫҡаһы, үҙ-үҙен тәьмин итеп йәшәгән. Үткән быуаттың 80-се йылдарында милләтебеҙ үҙенең йәшәү рәүешен, кем икәнлеген дә онотоп, милли мөхитенән айырыла башлағайны. Хатта ил ағаһы булыр ололарыбыҙ ҙа тарихыбыҙға битараф ҡалды. 80-се йылдар аҙағында, 90-сы йылдар башында илебеҙҙә үҙгәрештәр башланғас, милли хәрәкәттең башында тороусылар ошондай юғалтыуҙарҙы тергеҙеүҙе төп маҡсат итеп ҡуйҙы. Ошо йүнә-

✓ *Торатау итәгендә ҡуйыласаҡ "Ырыуҙар ташы"ның символик мәғәнәһенән тыш, ғәмәли әһәмиәте лә ҙур буласаҡ. Башҡорт милләтендә бер нисә тиҫтә ырыу бар һәм ул ташҡа һәр бер ырыуҙың исеме яҙылып ҡуйылырға тейеш.*



лештә тарихыбыҙҙы өйрәнеү, китаптар сығарыу, шәжәрәне аяҡҡа баҫтырыу иң ҙур эштәребеҙҙең береһе булды. Хәҙер инде үҙенең шәжәрәһен, йәғни кем икәнлектәрен белгәндәр тормошҡа, донъяға икенсе күҙлектән ҡарай. Тарихи һуҡырлығыбыҙ юҡҡа сыҡҡайны, күңел күҙҙәребеҙ асылды. Яҡшы, беренсе баҫҡысҡа күтәрелдек, хәҙер инде икенсе баҫҡысҡа күтәрелер өсөн беҙ башҡаларҙан артта ҡалмаҫҡа бурыслы. Бының өсөн инде эшҡыуарлыҡты үҙләштерергә, матди байлыҡҡа эйә булырға тейешбеҙ. Әлеге ваҡытта бар милләттәр ҙә милли идея эҙләй. Беҙҙең өсөн милли идея: милләтебеҙҙең телен, мәҙәниәтен, ерен, динен һаҡлап ҡалыр өсөн үҙ-үҙебеҙҙе тәьмин итерлек кимәлгә күтәрелеү.

**Марат Талғат улы:** Беҙ һәр ваҡыт үҙебеҙҙе ситкәрәк ҡуйып, башҡаларға юл бирҙек. Шул уҡ ваҡытта урыҫ телен белмәгән кеше лә ситкә этәрелде. Ә инде урыҫ телле милләттәштәребеҙҙә милләт тойғоһо бик һай булыуын тәшкил иткән баймаҡтарҙа милли инстинкт иң юғары кимәлдә булһа ла, улар ҙа ҡатнаш никахтан азат түгел. Башҡорттар элек ҡыҙҙарын тик башҡортҡа ғына биргән, һирәк осраҡта ғына ҡаҙаҡтарға бирергә ризалашҡан. Улар ҡыҙҙарын татарҙарға һәм мишәрҙәргә бирмәгән. "Кеше мишәргә ҡыҙ бирәме ни?" тигән һүҙҙәрҙе әле булһын хәтерләйем. Был ул халыҡтарҙы кәм күреүҙән түгел, халыҡтың үҙ-үҙен милләт булараҡ һаҡлау инстинкты юғары булыуҙан килеп сыҡҡан. Яусылыҡ институты эше лә халыҡты ҡатнаш никахтарҙан аралау маҡсатында ойошторолған, шәжәрә төҙөүҙең дә бер маҡсаты ошоға бәйле. Ҡатнаш никахтар әле беҙҙең халыҡтың бәкәленә һуға. Ҡатнаш никахтан тыуған балалар башҡорттоҡо түгел, быны иҫбатлап тороу кәрәкмәй, был хәл аксиомаға әүерелде.

**Румил Талғат улы:** Беҙҙең халыҡ революциянан һуң икегә бүленә. Сөнки көнбайыш диалектта һөйләшкән башҡорттар, уҡытыу татар телендә алып барылғас, үҙҙәрен татар итеп хис итә башланы. Шуға күрә беҙҙең халыҡтың өстән бер өлөшө татарға бүленеп ҡалды. Хәҙерге ваҡытта көнбайышта йәшәүсе өлкәндәр үҙҙәренең татар телендә һөйләшкән башҡорт булыуҙарын аңлаған хәлдә лә, уларҙың балаларында бындай тойғо юҡ. Шуға күрә ундай йәштәрҙе бары тик тарихҡа таянып ҡына үҙ асылын танытып була. Әйтәйек, ырыу аша. Сөнки татарҙарҙа ырыу төшөнсәһе бөтөнләй юҡ. Шуға күрә Торатау итәгендә ҡуйыласаҡ "Ырыуҙар ташы"ның символик мәғәнәһенән тыш, ғәмәли әһәмиәте лә ҙур буласаҡ. Башҡорт милләтендә бер нисә тиҫтә ырыу бар һәм ул ташҡа һәр бер ырыуҙың исеме яҙылып ҡуйылырға тейеш. Бында килгән һәр бер кеше таштағы үҙ ырыуы атамаһын уҡып, үҙен башҡорт милләтенең тулы хоҡуҡлы вәкиле итеп тоясаҡ. Яңы өйләнешкән йәштәрҙең "Ырыуҙар ташы"на барып, үҙҙәренең ырыуҙарын иҫкә алып, сәскә һалып, фотоға төшөүҙәрен дә йолаға әүерелдерергә була.

**Марат Талғат улы:** Тағы ла ундағы музейҙа милләттең шәжәрәһе булырға тейеш. Милли идея ла Торатауға барыуҙан башланһын. Ҡытайҙа мин шуға оҡшаш комплекстарҙы күрҙем. Унда һәр бер провинцияның үҙ ташы һәм башҡа атрибуттары ҡуйылған. Мин Торатауҙағы "Ырыуҙар ташы"н тотош комплекс итеп күрәм. Ни өсөн тигәндә, бер таштa ғына барлыҡ ырыуҙарҙың атрибуттарын күрһәтеү мөмкин түгел.

**▸ Ҡатнаш никахтарға килгәндә, бөгөн Америка ҡатнаш никахтарҙан баш тарта. Ни өсөн тигәндә, наркоманлыҡҡа, гомосексуализмға бирелеүселәрҙең, шизофренияға дусар булыусыларҙың иң күбен ҡатнаш никахтарҙан тыуыусылар тәшкил итә. Шуға күрә бөгөн АҠШ-та ҡатнаш никахтар 3-5 процент ҡына. Беҙ иһә, һаман да ҡатнаш никахтарҙан тыуған балалар аҡыллы һәм матур була, тип йәшәйбеҙ...**

**▸ Беҙҙең милләттә ағай менән ҡусты араһында ҡыҙыҡлы мөнәсәбәт бар. Ә бына Талғат олатайҙың Марат һәм Румил тигән улдары араһында ул мөнәсәбәт нисек?**

**Марат Талғат улы:** Мин үҙ ғүмеремдә бер ҙур хата яһаным. Медицина институтының икенсе курсында уҡып йөрөгәндә Румил ҡустым менән һунарға сыҡтыҡ. Шунда Румил: "Абзый, мин мединститутҡа барырға йөрөйөм әле. Нисек уйлайһың?"- тигән хәбәр һалды. Мин уға: "Ҡуйсәле, унда уҡыуы шул тиклем ҡатмарлы, ауыр. Анатомия, биохимия, тип йәнде ҡыялар, гел ятлап уҡырға кәрәк", - тинем. Нишләп шулай әйткәнемдер инде? Шунан ул минең һүҙемде тотоп, ауыл хужалығы институтының механика факультетына китте. Румил ул, тотонһа, эшен аҙағынаса алып барып еткерә торған кеше, мединститутта ла бик яҡшы уҡый алыр ине. Беҙ ҡустым менән татыубыҙ, һүҙгә килешкәнебеҙ бөтөнләй юҡ, беҙҙең ғаиләлә лә ундай аңлашылмаусанлыҡ юҡ.

лына ҡайтып, бер көн Аҙнабаевтарҙы йыйып алабыҙ. Ҡосаҡлашып ҡунаҡ булыр өсөн генә түгел, әлбиттә. Зыяратты рәткә килтерәбеҙ, мәсеткә барабыҙ, туғандарҙы барлап сығабыҙ. Көйөргәҙе йылғаһы буйына төшөп, табын ҡорабыҙ, балаларыбыҙҙы таныштырабыҙ. Кемдең ҡайҙа уҡырға ингәнен, эшкә урынлашҡанын, ниндәй уңышҡа өлгәшкәнен, кемдең сабыйы тыуғанын, кемдең проблемалары барлығын тикшерәбеҙ.

**▸ Рәсәйҙең иң көслө кешеһе Эльбрус Ниғмәтуллин һөйләүенсә, ярыштарҙа еңеп сыҡҡандан һуң кемдәрҙендер уның янына килеп: "Минең дә ҡанымда 15 процент башҡорт ҡаны бар. Мин дә башҡорт", - тиеп әйтә икән. Ысынлап та, көслөләргә ылығалар, уның менән ҡан туғанлығы эҙләйҙәр. Шулай түгелме?**

**Марат Талғат улы:** Бер мәл Күмертау ҡалаһы башлығы Беляевҡа ингәндә ул да үҙенең әсәһенең башҡорт булыуын әйткәйне. Ысынлап та, һәр бер милләттең абруйлы шәхесе дөйөм кешелек тарафынан үҙенеке итеп ҡабул ителгәндә генә башҡалар уға һәм уның милләтенә тартыла.

# ЛА ФАЖИҒӘ,

## тағы яманыраҡ...

сан, улар, асылда, карьера өсөн йәшәй. Беҙҙең ҙур-ҙур профессорҙарыбыҙҙың да күбеһендә милләт тойғоһо юҡ, уларҙың үҙҙәренә яҡшы, уңайлы булһа - еткән. Был турала әйтмәй булмай.

Донъя хәҙер ныҡ үҙгәрҙе. Беҙ үҙебеҙҙең мөхиткә бикләнеп кенә лә йәшәй алмайбыҙ. Йәшәй алған хәлдә лә ҙур уңыштарға өлгәшә алмауыбыҙ бар. Башҡорт кешеһенә был донъяла үҙен яҡшы, комфортлы тойор өсөн кәмендә дүрт тел белергә кәрәк. Беренсеһе - туған теле, икенсеһе - урыҫ теле, өсөнсөһө - инглиз теле, дүртенсеһе - төрөк теле. Революциянан һуң беҙ колхоз-совхоз, социализм формацияһына күсә алмайынса яфаланһаҡ, хәҙер капиталистик формацияға күсә алмайбыҙ. Тәүҙә социализмға бик ауыр күсһәк тә, башҡорт милләте социализмды иң ныҡ яҡлаусы ла хәҙер. Сөнки социализмдағы мөлкәткә община байлығы тигән ҡараш башҡорттоҡона тап килә. Хәҙер мөлкәткә индивидуаль ҡараш формалаша һәм был йәһәттән беҙ йәнә тиҙ генә үҙгәрә алмай яфаланабыҙ.

**▸ Төбәк компонентын юҡҡа сығарыу тураһында һүҙ сыҡҡас, чечендар үҙҙәренең балаларына туған телде, мәҙәниәтте мәсеттәрендә уҡытырға әҙер булыуы хаҡында белдерҙе. Был милләт туғанлыҡ менән көслө. Ундай нигеҙ беҙҙә лә бар: беҙ ырыуҙарыбыҙ, зат-нәҫел араларыбыҙ менән көслө.**

**Марат Талғат улы:** Беҙҙең милләт ҡатнаш никахтар шауҡымына ныҡ бирелгән. Мин үҙем дә шул шауҡымға эләктем. Баймаҡ районында һәр дүрт никахтың береһе ҡатнаш. Асылда бөрйән



**Марат Талғат улы:** Ҡатнаш никахтар совет осоронда ла хупланды. Ә был аҙ һанлы халыҡтарҙы күп һанлыһы тарафынан йоттороу маҡсатында атҡарылды. "Эт тә насар түгел, бүре лә, ә бына эт менән бүренән тыуыусылар иң ҡурҡынысы", тип әйтә торғайны ғалим Айрат Ишемйәров.

**Румил Талғат улы:** Кешегә йәшәр өсөн күңел тыныслығы кәрәк. Күңел тыныслығы булһын өсөн үҙеңде ниндәйҙер ҙур бер көстөң өлөшө итеп тойорға тейешһең.

***Башҡорттоң йәшәү рәүеше, башҡа бер халыҡтың да ярҙамына таянмайынса, үҙаллы йәшәргә мөмкинлек бирә. Һәр 30 йыл һайын баш күтәрергә һәләтле халыҡ үрсей алған, үҙ-үҙен туҡландыра, кейендерә һәм ҡоралландыра алған. Ҡыҫҡаһы, үҙ-үҙен тәьмин итеп йәшәгән. Үткән быуаттың 80-се йылдарында милләтебеҙ үҙенең йәшәү рәүешен, кем икәнлеген дә онотоп, милли мөхитенән айырыла башлағайны. Хатта ил ағаһы булыр ололарыбыҙ ҙа тарихыбыҙға битараф ҡалды. 80-се йылдар аҙағында, 90-сы йылдар башында илебеҙҙә үҙгәрештәр башланғас, милли хәрәкәттең башында тороусылар ошондай юғалтыуҙарҙы тергеҙеүҙе төп маҡсат итеп ҡуйҙы. Ошо йүнәлештә тарихыбыҙҙы өйрәнеү, китаптар сығарыу, шәжәрәне аяҡҡа баҫтырыу иң ҙур эштәребеҙҙең береһе булды. Хәҙер инде үҙенең шәжәрәһен, йәғни кем икәнлектәрен белгәндәр тормошҡа, донъяға икенсе күҙлектән ҡарай. Тарихи һуҡырлығыбыҙ юҡҡа сыҡҡайны, күңел күҙҙәребеҙ асылды.***

Әйтәйек, һин башҡорт икәнһең, һинең атайың, әсәйең, үҫкән ереү, ауылың, туғандарың бар. Меңәр йылдар һуҙымында күңеләңә һеңгән ауаздар, туған моңоң бар. Ә ҡатнаш никахҡа килгәндә инде, һәр ике халыҡтың тормошто, тәбиғәтте үҙенсә күреүе бергә бутала, һөҙөмтәлә бала ошо ике урталыҡта тороп ҡала. Унда ике ҡан ҡайнаша һәм был хәл теләһә ниндәй ауырыуҙар килтереп сығара. Шуға ла ата-бабалар ҡан ҡатышыуынан арыныр өсөн кәләште башҡа милләттән түгел, ә икенсе ырыуҙан алған, кейәүҙе икенсе ырыуҙан һайлаған. Ә инде ырыу эсендәге ҡан ҡатышыуынан һаҡланыр өсөн шәжәрә ярҙамға килгән.

**Румил Талғат улы:** Беҙ кәңәшләшеп эшләйбеҙ. Мин уның әйткәнен тыңлайым, ул да бит инде мин эшләй алмай торған йомошто ҡушмай. Мин үҙем дә ағайымдың хаталарын ваҡытында әйтеп барам. Ул уйлана, аҙаҡ минең дөрөҫлөктө йөпләп ҡуя.

Яйы сыҡҡанда тағы ла бер нәмәне әйтеп ҡуяйым. Марат ағайым шул тиклем ярҙамсыл. Ул институтта директор булып эшләгәндә беҙҙең ауылдан медицина институтына уҡырға инмәгән бала ҡалдымы икән? Беҙҙең туғандарҙың балаларына, балаларының балаларына әле булһын ҡулдан килгәнсе ярҙам итеп торабыҙ. Шунһыҙ булмай. Әле беҙ йыл һайын йәй Яҡшымбәт ауы-

**Румил Талғат улы:** Үҙеңдең башҡортлоғоңдо ҡылыс менән иҫбат итеү мәле үтте. Улай булмай. Һин үҙеңде тотошоң, мөғәмәләң, мөнәсәбәтең менән башҡаларҙы артыңдан эйәртә алһаң ғына өлгәшеп була быға.

**Марат Талғат улы:** Мин пикет, демонстрация даулап йөрөгән бер егеткә: "Кеҫәңдә 10 һум аҡсаң юҡ, байраҡ күтәреп күпме йөрөргә була? Хәҙер ул заман үтте бит",- тинем. Мин үҙебеҙҙең халыҡ араһынан күберәк кадрҙар уҡытып әҙерләргә тырыштым. Мин әҙерләгән егеттәрҙең хәҙер һәр береһенең үҙ клиникаһы бар. Улар үҙҙәренең шәхси клиникаларында директор, баш табиб булып бик уңышлы эшләй һәм бик етеш тормошта йәшәй.

**Румил Талғат улы:** Мин Баҡалы районына эшкә барып, унда район советы рәйесе булып эшләнем. Мине йөрөтөүсе водителем татар милләтенән ине. Ул һаман да мине һағыныуын белдереп, икенсе кеше аша: "Мин ике башҡорт етәксеһен йөрөттөм. Улар икеһе лә миңә кешелекле булдылар. Уларға ҡарап мин һәр ваҡыт башҡорттарға хөрмәт менән ҡараным..." - тигән сәләмен еткерҙе. Ошоларҙы ишеткәс, күңелгә рәхәтлек килде. Һуң ул водитель булып эшләүсе татар егете миңә түгел, милләтемә баһа бирҙе бит.

### ӘЙТКӘНДӘЙ...

**Ошо көндәрҙә Румил Талғат улы үҙенең 70 йәшен тултырҙы. Уның һын-һыпатына, йәшәү дәрте бөркөлөп торған булмышына, уй-фекерҙәрендәге саялығына ҡарағанда, һис кенә лә 70 йәште биреп булмай. Күңеле ғәм, сәм, йөрәге дәрт һәм рух тулы кеше һис ҡасан да ҡартаймай, тиҙәр. Дөрөҫтөр. Үткән быуаттың 50-60-сы йылдарында баш ҡалабыҙҙы хайран итеп йөрөүсе ағалы-ҡустылы Марат һәм Румил Аҙнабаевтар бөгөн дә бар донъяны хайран итеп, ергә ныҡ баҫып йөрөй. Аҫыл заттан, данлыҡлы дворян балалары бит улар!**

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ яҙып алды.**

**✓ Йәштәрҙең кисерештәрен аңлай Мөслимә, уларға тик яҡшылыҡ теләй. Ҡатын-ҡыҙҙарҙа бик һирәк кенә осрай торған ошондай иҫ киткес яҡшы сифатты, бәхеткә күрә, Аллаһы Тәғәлә Мөслимәгә биргән.**





Хәлил ҺӨЙӨНДӨКОВ

# Шәүрә

(Ҡисса)

Ғарифтың көслө ҡулдарынан ысҡынғыны килмәне Шәүрәнең. Ҡайныһының мөхәббәт хистәре менән һуғарылған был илаһи йыры уның күңелен иретеп, бөтөнләйгә әсир итте. Был юлы ул ҡайныһынан күҙҙәрен йәшермәне. Ғарифтың йырын дауам иткәндәй, Шәүрәнең дә йөрәгенән моңдар ташып сыҡты:

*Сәскә атҡан гөлдәр, ай, баллана.*
*Бал ҡорттары ҡунып та бал ала.*
*Болан балаһындай үҫкән ҡыҙ бала*
*Һөйгән генә булып та алдана.*

Шәүрәнең моңло тауышына ҡоштар һайрауынан тынып ҡалған һымаҡ булды. Уның йыр ғүмерендә тәүге тапҡыр ишеткән Ғариф, сихырланған кеҙеләй, өнһөҙ ҡалды. Улар шулай ҡулға-ҡул тотоношҡан килеш, бер-береһенән күҙҙәрен ала алмай, бер-береһенә ҡарап туя алмай торҙолар. Бер аҙҙан Ғарифтың ялҡын тулы күңеленән тағы бер йыр шишмәләй урғылды:

*Алтын ғына булып, ай, ағайым,*
*Көмөш кенә булып та тамайым.*
*Шәүрә һылыу, һинең алдарыңда*
*Шәм филтәһе булып та янайым.*

- Ҡуйсы, ҡайным, янма, - тине Шәүрә Ғарифтан һаман күҙҙәрен ала алмай. - Янһаң, минә ҡалмаҫһың бит... - Ул ҡайнына һырынды.

- Йә, ярар, һин әйткәсең - янмам. Үҙемдә тик һинең өсөн генә һаҡлармын, - тип ярым шаяртып Ғариф Шәүрәне үҙ ҡосағына ҡыҫты. Ҡыҫты ла, уның алланып торған сикәһенән супылдатып үбеп тә алды. - Һин дә минең турала уйлайһыңмы ни, Шәүрәкәй?

- Уйлау ғына түгел, һинең өсөн янып, күмергә әйләнеп барам инде мин, ҡайным, - тине Шәүрә.

- Улай булғас, һин дә үҙеңдә минең өсөн һаҡла, йәнем, - тип, Ғариф уны үҙенә тағы ла нығыраҡ ҡыҫты. Шәүрә ҡайныһының күкрәгенә башын, ә Ғариф Шәүрәнең хуш еҫтәр килгән башына сикәһен терәгән килеш, бөтә донъяһын онотоп баҫып торҙолар. Ошо бәхетле минутта Ғариф менән Шәүрә өсөн тирә-яҡта үҙҙәренән башҡа бер нәмә лә юҡ һымаҡ ине. Күңелдәре менән бер-береһенә үтеп инеп, мәңгелеккә кире сыға алмаҫлыҡ булып аҙашты улар. Бындайын да ләззәтле тойғоларҙы улар бығаса бер ҡасан да кисергәндәре юҡ ине ...

Тағы ла күпме шулай онотолоп тороҙар ине, ләкин яҡында ғына һыйыр мөңрәгән тауышҡа һиҫкәнеп киттеләр. Шәүрә көскә Ғарифтың ҡосағынан ысҡынып:

- Ҡуй, ҡайным, ҡәйнәм дә көтә торғандыр, һыйырҙы алып ҡайта һалайым, - тиғән булды.

- Беҙҙә осраштырған һыйырҙы, - тип өҫтәне Ғариф. - Ошо көндән алып мин үҙемде Ер йөҙөндә иң бәхетле кеше итеп тоясаҡмын, Шәүрә. Иртәгә тағы ла һыйыр эҙләргә килерһеңме?

- Ул көн һайын юғалып тормаҫ бит?..

- Ә һин уны көн дә ошо яҡҡа ҡыуып ебәр.

- Хәҙер быҙауын ташлап ҡайҙа ғына китһен инде ул. Уның да бит хәҙер үҙенә күрә донъялағы иң ҡәҙерлеһе - бозәүкәсе бар. Әйткәндәй, ҡайҙа әле ул Аҡбаш быҙауы менән?

- Әйтмәйем, үҙең эҙләп тап, - тип шаяртты Ғариф.

- Һөйөнсөгә әйткән шартыңды үтәнем бит мин, ҡайным. Һин дә үтәргә тейешһең, - тине Шәүрә.

- Үтәүен үтәнем, әммә хаҡты мин түбәнерәк ҡуйғанмын тип уйлай башланым әле, Шәүрәкәй...

- Әй, оятһыҙ ҙа икән һин, ҡайным, - тип Шәүрә уны еңелсә генә этеп ебәрҙе.

- Ҡайны кешене улай этәргә ярамай, - тип Ғариф етеҙ генә итеп Шәүрәнең биләнән эләктереп алды һәм уны ҡосаҡлап, ирендәренән һурып үпте. Шәүрә ҡаршылашманы...

- Ярай, күрһәтәйем инде Аҡбашыңды, - тине Ғариф бер аҙҙан ярһыуын көскә баҫып. Үҙе кеүек үк ярһыуынан йыштын ала башлаған Шәүрәне етәкләп, быҙауын ялап торған һыйыр янына алып килде.

Өйгә Шәүрә бик күтәренке кәйеф менән ҡайтып инде.

- Ҡәйнәм, һөйөнсө, Аҡбаш быҙаулаған! Тәрәнүҙәктән табып алып ҡайттым...

- Һөйөнсөһөнә - баллап-ҡаймаҡлап бер самауыр сәй, килен...

Ҡырҙағы яҙғы матур тәбиғәт Ғарифҡа тағы ла гүзәлерәк булып тойолдо. Ҡояш та элеккенән матурыраҡ йылмая, ҡоштар ҙа моңлораҡ, дәртлерәк һайрай. Шәүрә уны ярата! Ошондай шатлыҡлы уйы Ғарифтың башынан сыҡманы. Тиҙерәк өйгә ҡайтып, Шәүрәһен тағы ла күрергә ашҡынды. Ләкин еңгә-бисәһе алдында ул Шәүрәһенә ҡарарға баҙнат итәме ни инде? Шәүрә лә, әлбиттә, ҡәйнә алдында ҡайныһына күтәрелеп ҡарамаясаҡ. Өйҙә уларҙы бер-береһенә яҡын ебәрмәй торған тылсымлы шаршау бар шул...

* * *

– Мөслимә еңгә, тирмәләр әҙер. Тап һин әйткәнсә, дүрт тирмә ҡорҙом, - тине Сабир. - Мин үҙем бөгөн малдар менән шунда йәйләүҙә ҡунырға ҡалам. Һеҙ иртәгә күсенеп килһәгеҙ ҙә була. Ғариф ағайым йылҡыларҙы үҙем ҡыуып алып барам тине.

- Ярай, улай булғас, бик шәп булған, - тине Мөслимә. - Юғиһә, бер аҙ һуңлабыраҡ та киттек. Башҡалар йәйләүгә әллә ҡасан уҡ сыҡты инде. Иртәгә, Алла бойорһа, иртүк күсенеп барырбыҙ.

Мөслимә йәйләүгә күсенергә әйберҙәрен йыя башлау ыңғайы менән Шәүрә килененә лә күрһәтмәләр бирҙе:

- Килен, өй ҡаралтыларын, самауыр, ҡаҙан, һауыт-һабаларҙы әҙерләп, төйнәп ҡуйырға кәрәк. Ана, Сәбилә киленгә лә әйт, ярҙамлашһын. Үҙеңдең һәйбәтерәк кейем-һалымыңды ла алырға онотма.

Мейес тирәһендә тәмле еҫтәр сығарып Аҡбаш һыйырҙың ыуыҙ ҡоймағын ҡойоп йөрөгән Шәүрәнең кәйефе яҡшы ине. Әле күптән түгел генә ҡайныһылыҡта ҡайныһы менән осрашып һөйләшкәндәрен күҙ алдына килтереп, татлы уйҙарына бирелеп, ҡәйнәһенең ни әйткәнен аңғармайыраҡ ҡалды.

- Әү, ҡәйнәм, нимә тиһең? - тип ҡабатлап һораны.

- Иртәгә йәйләүгә күсенәбеҙ, тим, килен. Бөгөндән әҙерләнеп ҡуйырға кәрәк, - тип нәмәләр алып барырға кәрәклеген ҡабатлап теҙеп әйтеп сыҡты Мөслимә. Үҙе һандығынан кейем-һалымдарын сығара башланы.

Шул арала мейес тирәһендә уралғылап йөрөгән Кәлимулла, ашығып ҡапҡан әсә ҡоймаҡҡа телен бешереп, ҡысҡырып илап ебәрҙе.

- Әсә-ә-әй, ана киленең утты көслө яғып, ҡоймаҡҡа әсә итеп бешергә- ә-ән! Башҡаса улайтһа, айырам мин уны! - Ул күҙҙәрен һөртә-һөртә әсәһе янына килде.

- Ярар, улым, иртәгә йәйләүгә сығабыҙ. Унда ҡоймаҡты ла һалҡын итеп бешерербеҙ, - тип йыуатты Мөслимә улын.

Иртәгеһен таң менән Сәбилә ике арбаға ат екте. Сабиры күп ваҡыт ҡырҙа йөрөгәс, ирҙәр эшенә лә үҙе өйрәнеп алғайны ул. Арбаларҙың береһенә өй ҡаралтылары тейәлде, ә икенсеһенә үҙҙәре ултырып барыр өсөн йомшаҡ кейеҙ, юрғандар түшәнеләр. Бөтә нәмә әҙер булғас, барыһы ла өйгә инеп урындыҡҡа теҙелешеп ултырҙы. Мөслимә доға ҡылды.

- Йәгеҙ, балалар, хәйерле сәғәттә, - тине ул урынынан ҡуҙғалып. - Атаһы ла йылҡыларҙы тауҙан төшөрә торғандыр инде. "Һеҙ юлға сығыуға төшөрөп еткерермен", тигәйне...

Алдағы арбаға Мөслимә үҙе менеп ултырҙы. Шәүрә, ат ҡыуып барырға тейеш булғанлыҡтан, уң яҡтан урын алды. Ә уларҙың уртаһында бәләкәй Кәлимуллаға урын табылды. Йөк тейәлгән арбаға Сәбилә урынлашты. Уның янында туҡтауһыҙ тәтелдәгән, әленән-әле Кәлимуллаға телен күрһәтеп эләкләшеп барған өс йәшлек Мөхәммәтҡә лә урын табылды. Улар әкрен генә ҡуҙғалып китте.

Йәйләүселәр юлда үҙ-ара һөйләшмәне тиерлек. Һәр кемдең башында үҙ уйы ине. Тик Кәлимулла үҙенең сираттағы һорауҙары менән уларҙың уйҙарын бүлдерҙе.

- Әсәй, ул йәйләүҙә балыҡ бармы икән?

- Барҙыр, улым, нишләп булмаһын ти. Һаҡмарҙың бөтә урыны ла балыҡҡа бай бит, - тине әсәһе.

- Әсәй, мин һинең тирмәңдә йоҡлармын, яраймы?

- Ә атайың ҡайҙа йоҡлар?

- Уны киленең менән һалырбыҙ.

- Ни өсөн улай тип әйтәһең? - тип көлдө килененең сикәһе алһыуланғанын күҙенең ҡырыйы менән генә шәйләп алған Мөслимә.

- Ә мин һинең менән әллә ҡасандан уҡ йоҡлағаным юҡ, әсәй, - тине Кәлимулла ғәҙәтенсә танау эсен сокой-сокой. - Киленең төндә йоҡлағанда һаташып һөйләнә лә, мин йоҡлай алмайым.

- Нимә тип һөйләнә һуң? - тине әсәһе көләп.

- Үткән төндә киленең "Ҡайным, кил миңә", тип мине һығып үлтерә яҙҙы. Нишләп мин уға "ҡайны" булайым ти... У-ух, - тип Кәлимулла осло нәҙек теһрәге менән янындағы Шәүрәгә төртөп алды.

Уларҙың һөйләшкәнен тыңлап барған Шәүрә оялышынан ҡыҙарып, шыбыр тиргә батты. Ни әйтергә лә белмәне. Бәхеткә ҡаршы, ҡәйнәһе уның ошо уңайһыҙ хәлен төҙәтеп ебәрергә ашыҡты:

- Кит, юҡты һөйләп ултырма, улым. Үҙең һаташып төш күргәнһеңдер.

Кәлимулла, әлбиттә, ысынбарлыҡты һөйләй. Шәүрә менән Ғариф бер-береһенә булған мөнәсәбәтен нисек кенә белдермәҫкә тырышмаһын, байтаҡ ҡына донъя тәжрибәһе булған Мөслимәнән барыбер бер ни ҙә йәшерә алмайҙар. Йәштәрҙең кисерештәрен аңлай Мөслимә, уларға тик яҡшылыҡ теләй. Ҡатын-ҡыҙҙарҙа бик һирәк кенә осрай торған ошондай иҫ киткес яҡшы сифатты, бәхеткә күрә, Аллаһы Тәғәлә Мөслимәгә биргән. Ғариф менән Шәүрәнең араһындағы мөнәсәбәтте башҡа кешеләр һиҙеп ҡалмаһын өсөн айырыуса борсола ул. Был ғашиҡтарҙы кеше күҙенән алыҫыраҡ алып китеү теләге быйыл йәйләүгә сығыуҙарының төп сәбәптәренең береһе булып тора ла инде.

Шәүрә оялышынан ҡәйнәһенә күтәрелеп ҡарарға ҡыйманы.

- Ни өсөн улай тынып ҡалдың, килен? Әллә йәйләүгә сыҡҡың килмәйме? - тине Мөслимә, Шәүрәнең күңелен күтәрергә тырышып. Үҙе арба келтерләгән ыңғайына матур көйгә һалып йырлап ебәрҙе:

*Урал урмандары шау-шыу итә*
*Ҡиблаларҙан елдәр иҫкәндә.*
*Кешәнешә дарья йылҡы малдар*
*Йәмле йәйләүҙәргә күскәндә...*

- Ана-а-а, тауҙан йылҡыларын ҡыуып атаһы ла төшөп килә.

Мөслимә килене менән нисек кенә һөйләшергә тырышып ҡараһа ла, Шәүрәнең уға ҡайтарып берәй ни әйтергә баҙнаты етмәне. Шундай яҡшы күңелле ҡәйнәһе алдында ул үҙен сикһеҙ ғәйепле итеп тоя ине...

Алда, боролоп-боролоп аҡҡан Һаҡмар үҙәнендә, ағарып ултырған дүрт тирмә өйө күренде. Тәүҙәрәк Сабир тирмәне өсәү итеп ҡорорға уйлағайны. Ғариф менән Мөслимәгә, Шәүрә менән Кәлимуллаға һәм тағы бер бәләкәйерәк тирмәне - ялсылар өсөн. Ләкин байбисә уға дүртенсеһен дә ҡороп ҡуйырға ҡушты. "Атаһы өсөн айырым тирмә булырға тейеш. Ир кешегә ир-ат, тиң-тоштары килеүе бар. Ҡатын-ҡыҙға ирҙәр менән ултырыу килешмәгән ваҡыттар була..." тигәйне Мөслимә.

Улар менән йәнәш кенә тигәндәй, йылҡы өйөрөн ҡыуып Ғариф үҙе барҙы. Ат өҫтөндә уның бик ыҡсым итеп ултырыуы үҙенә килешеп кенә тора. Ялан яңғыратып һирәк-һаяҡ һыҙғырғылап та ебәрә, йәиһә "Йә, малҡай!" тип ирәбе генә тауышланып атын тиҙләтә. Ғарифтың яғына ҡарамаҫҡа тырышһа ла, Шәүрә уның йөрәк тибешенә ҡәҙәр ишеткәндәй булып барҙы. Һөйгәненең һәр хәрәкәте, һәр өнө ифрат та яғымлы булып тойолдо Шәүрәгә. Ғәҙәттә бар кешелә лә була торған етешһеҙлектәрҙең береһен дә үҙенең ҡайныһында күрмәне. Ҡайныһы уның өсөн барлыҡ кәмселектәрҙән азат булған фәрештә һымаҡ тойолдо. Яратҡан кешеңдә тик яҡшы яҡтан ғына күрһәтә торған тылсымлы күҙлек кейҙерә икән ул мөхәббәт. Шул күҙлек бер ҡасан да ватылмаһын ине. Ул саҡта бөтә кешеләр ҙә бер-береһенә ҡарата һөйөү хистәрен һүндермәй, ғүмер буйы бәхетле йәшәрҙәр ине.

Һәр төрлө уйҙарына сумған Шәүрә тирмәләр янына килеп еткәндәрен һиҙмәй ҙә ҡалды. Ылауҙар килә ятҡанын әллә ҡайҙан күреп йөрөгән Сабир, һарыҡ көтөүен яҡынға өйөрөп ҡуйып, йәйләүселәрҙе ҡаршы алып тора ине.

- Тирмәләр бер-береһенә бик яҡын булмағанмы, Мөслимә еңгә? - тип һораша-һораша, бер ыңғайҙан байбисәнең хуплау һүҙҙәренә лә өмөт итеп, ылау атларын туғара ла башланы.

- Юҡ, самай ғына булған. Тик Ғариф ағаңдың тирмәһен бынан арыраҡ, анау ҡыуаҡ артынараҡ ҡуйырға кәрәк ине.

- Ярар, еңгә, уны күсереүе ауыр булмаҫ, - тип аттарын туғарып бөткән Сабир ситтәге тирмәнең кейеҙҙәрен тағата ла башланы.

Күп тә үтмәй, Ғарифтың тирмәһе ҡыуаҡ артында тора ине инде.

Оҙаҡламай тышта аҫылып ҡуйылған ҡаҙанда йәш һимеҙ тәкә ите бешә башланы. Тәмле ит еҫе бөтә яланға таралды, иртәнән бирле ашамай ҡырҙа йөрөгән Ғарифтың танауын ҡытыҡланы...

**(Дауамы бар).**

БЕҘҘЕҢ ЗАМАН ГЕРОЙЫ

# АМЕРИКАҒА БАРЫП...

## ушу оҫтаһы икәнен раҫлатты



(Башы 1-се биттә).

### Юлға сыҡтыҡ...

Сит илгә барыр өсөн аҡса туплау хәстәрен март айында уҡ башлағайным. Республикаһың Спорт һәм туризм министрлығына мөрәжәғәт итергә булдым. Әммә унда, кунфу олимпия спорт төрө исемлегенә инмәй, тигән һылтау менән миңә ярҙам итеүҙән баш тарттылар. Шулай ҙа йәй айҙарында күберәк эшләп, атай-әсәйем һәм дуҫтарҙың ярҙамы арҡаһында чемпионатҡа барырға етерлек аҡса туплай алдым.

Өфөнән Мәскәүгә поезд менән, Мәскәүҙән Лос-Анджелесҡа Вашингтон аша самолет менән барып төштөк. Мәскәү менән Лос- Анджелес араһын 17 сәғәттә үттек. Әйткәндәй, самолетта Вашингтон ҡалаһына тиклем Рәсәй киноһы йондоҙҙары менән бергә осточ. Лос-Анджелесҡа 2 спортсы, 2 тренер һәм Кунфу федерацияһы вәкиле бергә барҙыҡ. Унда беҙҙе Олег Спектр исемле Рәсәй егете ҡаршы алды. АҠШ-та төпләнеп, американлыларҙы спорт буйынса күнектерә икән. Үҙенең спорт залы бар, беҙҙе шунда урынлаштырҙы. Мине Рәсәй кешеһенең бөтәбеҙҙе лә үҙенең өйөнә урынлаштырыуы һөкландырҙы. Ситкә сығып киткән кешеләрҙең үҙ яҡташтарына ярҙам ҡулы һуҙырға әҙер булыуының сере, моғайын туғандарын, ватандаштарын һағыныуҙандыр.

### Америка менән танышыу

Иң тәүҙә американлыларҙың асыҡ йөҙлө булыуы иғтибарҙы йәлеп итте. Улар һәр кемгә йылмайып тәклеп, бер ҡулын күтәреп: "Сәләм, хәлең нисек?" - тип үтеп китә. Былар таныштарына сәләм бирәләр, ахры, тип уйлап, тәүҙә мин уларҙың ҡыланышын аңламай торҙом. Артабан был хәл аҙым һайын ҡабатланғас, улар өсөн был күрешеү матур ғәҙәт булыуын аңланым. Американлыларҙың бәрәүҙә лә эше юҡ, шулай ҙа улар һәр кешегә ҡарата ихлас мөнәсәбәт булдырған.

Тағы бер күҙгә ныҡ бәрелеп торған күренеш: Америкала артыҡ ауырлыҡ менән яфаланыусылар һаны бик күп. Әлеге лә баяғы, тиҙ әҙерләнә торған ризыҡ менән туҡланыуҙан килеп сығалыр был. Шуға күрә Америка ҡыҙҙары беҙҙең ҡыҙҙарҙан күпкә ҡайтыш. Донъяның ике ҡитғаһында - Австралия менән Африкала ғына әлегә булғаным юҡ, әммә шуны әйтә алам: матурлыҡ һәм һомғоллоҡ буйынса Рәсәй ҡыҙҙарына етмәй. Милләттәштәребеҙ тураһында әйтеп тораһы ла түгел. Был һүҙемде ҡеүәтләп, бер ваҡиға тураһында һөйләйем әле. Лос-Анджелеста егеттәр менән бер төнгә барға килдек тә, ҡыҙҙар күҙләйбеҙ. Төҫ-башҡа ҡәҙимге генә күренгән өс ҡыҙ башҡаларҙан айырылып тора. Эргәләренә барып, таныша башланыҡ. Мин инглиз телен һындыра-һындыра тегеләргә үҙебеҙҙең Рәсәй спортсылары булыуыбыҙҙы аңлатам. Шул ваҡыт берәһе фырт ҡына боролдо ла, рус телендә: "Һиңә ни кәрәк, тураһын әйт!" - тип һалмаһынмы! Иң матур ҡыҙҙар тигәнебеҙ Мәскәү, Санкт-Петербург һәм Әрмәнстан ҡыҙҙары булып сыҡты...

Америкаға барырға тура килһә, уның Лас-Вегас һәм Лос-Анджелес ҡалаларын мотлаҡ барып күрергә кәрәк, тигән ҡараш йөшәй. Лас- Вегас - матурлыҡ, уйын, ҡомар һәм сағыу уттар батшалығы булһа, беҙҙе әсир иткән Лос-Анджелес - күңел асыу, кино, телевидение иле. Голливуд тап ошо ҡалала урынлашҡан. Бәхеткә күрә, беҙ туҡталған йорттан ике туҡталыш алыҫлыҡта ғына урынлашҡайны ул ҡаласыҡ. Голливудтың "Йондоҙҙар аллеяһы"на килгәйнек, бер талай былдағы тантаналы матурлыҡҡа ҡарап һушыбыҙ китеп торҙо. Байрамса төҫтәр сағыулығы, төрлө әкиәти персонаждар һәм башҡалар туристарҙы ысынбарлыҡтан ситкә алып китә, мөғжизәле донъяла гиҙҙерә. Шуғалыр ҙа, был урындан туристар өҙөлмәй. Бөтә донъяға билдәле "Мадам Тюссо" балауыҙ һындар музейында төрлө билдәле кешеләрҙең һындарына тамаша ҡылдыҡ. Кино, мультфильм, музыка йондоҙҙары һындарын "тотоп" ҡараныҡ. "Башҡорт тотоп ҡарамайынса ышанмай" тигән хәҡиҡәткә ҡат-ҡат әйләнеп ҡайтырға тура килде шулай. "Ышанаһыңмы, юҡмы?" тигән музейҙа әлеге лә баяғы күҙ менән күреп тә, тотоп ҡарамайынса ышанмаҫлыҡ мөғжизәләргә юлыҡтыҡ, кешене ҡурҡытыу маҡсаты менән эшләнгән тотош бер ҡаласыҡ эсендә лә йөрөнөк. Көтөлмәгән урындан килеп сыҡҡан ғифриттар ысынлап та терләтте, малай! Америкала күңелде күтәрә, ял иттерә беләләр икән, тигән һығымтаға килдек. Лос-Анджелеста барыһы ла ял итеп, күңел асып ҡына йәшәй кеүек. Күңел асыу ҡаласығы ғәйәт ҙур майҙанды алып ултыра - Өфө ҡалаһының бер районы самаһы булалыр, моғайын. 77 доллар түләп инеп, көн буйы ошо ҡаласыҡта йөрөп туйғас, иртәгә үтәсәк ярыштарға әҙерләнә башланыҡ.

### Америкала... Ҡытай ҡалаһы

Иртә менән халыҡ-ара фестиваль - Кунфу федерацияһының 30 йыллығы айҡанлы ойошторолған донъя чемпионаты буласаҡ урынға ҡуҙғалдыҡ. Чайна-таун (ҡытай ҡалаһы) районында үтте ул. Был районға барып ингәс тә үҙеңде ысын Ҡытай илендәге кеүек хис итәһең: ҙур ҡапҡа аша үтеү менән һине ике ҙур аждаһа һыны ҡаршылай, арыраҡ ҡытай стилендә төҙөлгән йорттар панорамаһы асылып китә. Бында бөтә ерҙә лә тик ҡытайса аралашалар, ҡытайса йәшәү рәүеше алып баралар. Үҙҙәренең фабрикалары, гәзиттәре, телевидениелары, бәләкәй генә Шанхайҙары ла бар хатта!

Чемпионат "Алтын аждаһа" исемле ҙур ресторанда үтте. Байрамса мөхит булдырылған: ҡытай милләтле Голливуд актерҙары, музыканттар, бейеүселәр саҡырылған. Ярыш күргәҙмә сығыштарҙан ғибәрәт ине. Төрлө илдәрҙән көслө спортсылар килгән: Ҡытай, Тайвань, Аргентина, Венгрия, Испания, Италия, Рәсәй һәм башҡалар. Сығыш яһағандан һуң ял итергә, ашап-эсергә була. Арыған, һыуһаған спортсы теләһә ҡайһы ашһыуҙы бушлай ашай, ял итә ала. Был ярыштарҙа беҙ, ике башҡорт егете, мин - нунчаки, ә Сибай егете Артур Ишмырҙин - өс быуынлы ҡорал менән сығыш яһап, тәүге урындар алдыҡ һәм донъя чемпиондары исемен яуланыҡ.

### Икенсе һынау - Аргентинала

Төрлө илдәр аша АҠШ-тан Аргентинаның ушу буйынса Донъя кубогы үтәсәк Мендоза ҡалаһына осточ. Лос-Анжелес менән Мендоза араһын аэропорттарҙа туҡтай-туҡтай, бер тәүлек буйына үткәнгә күрә, бараһы урынға еткән көндө бик арыныҡ. Аргентина ярлы ғына дәүләт икән. Шуға ҡарамаҫтан, донъя кубогы бик юғары кимәлдә ойошторолғайны. Бында мин катана тигән ҡылыс менән сығыш яһап, беренсе урынға сыҡтым. Артабан ушу-саньда тип аталған тулы контактлы көс һынашыу буйынса 2007 йылда Тайвань утрауында үткән ярыштағы күптәнге танышым испан егете менән осраштым. Ярыш барышында мин өҫтөнлөк алдым һәм финалға сыҡтым. Күпмелер ваҡыт ял итеп алғандан һуң финалда урындағы спортсы Мендоза егете менән осраштыҡ. Бына тотамиға менеп, көс һынаша башланыҡ. Тәүге раундты ярайһы ғына уңышлы сығыш яһаным. Аҙаҡҡы икенсе раунд та бик уңышлы тамамланды. Әммә тулҡынландырғыс бер-нисә секундтан һуң еңеүсе тип Мендоза егетен танынылар. Мин бер аҙ аптыраным, әлбиттә, тик хисгәрҙе тышҡа сығарманым, "Ҡунаҡ булһаң, тыйнаҡ бул", ти бит халҡыбыҙ. Шул ваҡыт ярышты ҡарап ултырыусы тамашасыларҙан бер нисәүһе минең янға килде һәм инглизсә вата-емерә (уларҙа дәүләт теле - испан теле): "Афарин, һин иң шәп көрәшсе, һин еңдең бында", - тип, миңә йылмайҙылар һәм судьяларҙың теге егеткә мәрәйәрҙе өҫтәп яҙыуы тураһында ишараланылар. Мин уларға яуап итеп: "Юҡ, юҡ, мин еңмәнем, һеҙҙең егет еңде бит, судьялар хаҡлы", - тип йылмайҙым. Артабан нунчаки менән сығыш яһарға кәрәк ине. Әҙерләнергә ике минут ваҡыт бирҙеләр. Ярыштар алдынан тән ауырлығын кәметергә теләп асығыуым, әле генә тотамиҙан төшөүөм дә йоғонто яһағандыр, арығайным. Әммә әлекке тренерым Батыр Йәндәүләтовтың һәм табиптың киҫәтеүенә лә ҡарамай, ярышҡа сығырға булдым. Ике минут үтеүгә ҡулыма ике нунчаки тотоп, япон ниндзяһы кимоноһында сығыш яһап йөрөй инем инде. Тәүге урынға сығып булмаһа ла, 3-сө урын яуланым...

**Шулай итеп...**

**Донъя гиҙеп, күп кешеләр менән аралашып ҡайтҡан егет һүҙебеҙ аҙағында: "Сит илдең тупрағы ла сит, үҙеңдеке түгел икәнен тояһың", - тип ҡуйҙы. Донъя кимәлендәге еңеүҙәре менән ҡанатланып, оҙаҡ "осоп" йөрөмәгән ул һауала, ергә төшкән һәм Өфө иҡтисад лицей-интернаты базаһында көнсығыш һуғыш төрҙәрен үҫтереү буйынса "Прайд" исемле клубында тренерлыҡ итеүен дауам итә. Ихлас, кешеләргә ихтирамлы, рухи һәм физик сыныҡҡан, ҡатмарлы хәлдәрҙән еңел генә сыға белгән геройыбыҙ менән уның артабанғы еңеүҙәрен һөйләр өсөн киләсәктә лә гәзит биттәрендә осрашырбыҙ, иншалла.**

**Илгиз ИШБУЛАТОВ**
**яҙып алды.**




Артур Кәримов уҡыусылары менән.

✓ Ҡаҙаҡтар араһында, мәҫәлән, шундай әйтем йөрөй: "Батыр йөрәкле ул үҫтерәм тиһәң, кәләшлеккә башҡорт ҡыҙын ал!" Башҡа милләттәргә батыр улдар үҫтереп, үҙебеҙ бахыр хәлендә тороп ҡалмайыҡ, әхирәттәр!



ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

# Туған телен белмәгән, ғөрөф-ғәҙәттәрҙе һанға һуҡмаған ҡыҙ-ҡатынды Милләт әсәһе тип атап буламы?


Ейәнсуралар.


Сибайҙар.


Йылыйырҙар.


Дүртөйләләр.


Учалылар.

**(Башы 1-се биттә).**

Бала тәрбиәләү борон-борондан ҡатын-ҡыҙ елкәһендә булған. Ирҙәр яуҙа, һунарҙа йөрөгән, ил-йортҡа ҡатын-ҡыҙ күҙ-ҡолаҡ булып торған һәм бөтөн эштәрҙе ул оло яуаплылыҡ тойоп башҡарған. Шуға ла улар ирҙәренең хөрмәтенә лайыҡ булған. Беҙҙең ирҙәр һәр ваҡыт ҡатынын баһалай белгән, уны бер ваҡытта ла кәмһетмәгән. Халыҡ ижадында ла, рус һәм башҡа милләт ғалимдарының ғилми хеҙмәттәрендә лә яҙып ҡалдырылған был турала. Никольский, мәҫәлән, башҡорт ирҙәре баҙарға барһа, ҡатынына мотлаҡ бүләк, бәләкәй генә тәңкә булһа ла алып ҡайта, тип яҙа. Был да хөрмәт билдәһе. Әммә бөгөн ирҙәр алдында ла ҡатын-ҡыҙҙың баһаһы төштө, ҡәҙере китте. Нисек итеп дәрәжәбеҙҙе, ирҙәрҙең хөрмәтен кире ҡайтарыу тураһында ла һөйләшергә тейеш инек был ҡорҙа.

Ҡатын-ҡыҙҙарҙың күп проблемалары дәүләт тарафынан, дәүләт кимәлендә хәл ителә. Уларҙың һаулығын һаҡлау, эш менән тәьмин итеү, ҡатын-ҡыҙҙар араһында эшҡыуарлыҡты үҫтереү һәм башҡа шуның кеүек мәсьәләләр - улар төрлө дәүләт структураларының туранан-тура эше. Әллә ниҙә бер йыйылған башҡорт ҡатын-ҡыҙҙары ҡоронда беҙ ул мәсьәләләр тураһында һүҙ сурытып торорға түгел, ә үҙебеҙҙең Милләт әсәһе бурыстарын тикшерергә тейеш инек. Ошондай рухи, тәрбиәүи мәсьәләләрҙе күтәргән һөйләшеүҙәргә өмөтләнгәйнем. Әлбиттә, ойошторолоу яғынан шыма, юғары кимәлдә булды был сара. Ләкин ҡорҙағы һөйләшеүҙәр "Әсә - милләт тотҡаһы" тигән йүнәлештә булмағас, улары тышҡы ялтырауыҡ, бушҡа көс түгеү, ваҡыт үткәреү кеүек кенә булып ҡалды.

Тәбиғәт үҙе бар иткән бөтөн нәмәгә: тере йәндәргә лә, үҫемлек донъяһына ла үҙ-үҙен һаҡлау ҡеүәте һалған (аралаш йөрөгән малдар ҙа, ҡыр хайуандары ла, бер урманда үҫкән ағастар ҙа ҡатнашып китмәй). Ә кешегә ундай ҡеүәт һалынмаған, әммә аң-аҡыл бирелгән. Шуның өсөн үҙендә "үҙең" итеп һаҡлап ҡалыу фекере һалыу өсөн даими аңғартып, йүнәлеш биреп, аңлатып тороу фарыз. Йыйындар шуның өсөн ойошторолмаймы ни?! Тормошта осраған кәртәләрҙе йырып сыҡмаҫлыҡ ауырлыҡ итеп түгел, ә яҙмыш һынауы итеп ҡабул итерлек, рухи яҡтан ныҡ балалар тәрбиәләү, кәрәк саҡта уларҙың таянысы булырлыҡ әсәйҙәр булыу хаҡында һөйләшеү өсөн йыйылманыҡмы ни был ҡорға?

***Зөлфиә Ханнанова, БР Яҙыусылар союзы ағзаһы, Өфө ҡала округы хакимиәтенең гуманитар мәсьәләләр буйынса бүлек етәксеһе:*** Абруйлы, арҙаҡлы ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙ сәхнәгә күтәрелеп: "Вазифалы урындарҙа башлыса ирҙәр эшләй, әүҙем булайыҡ, юғары урындар биләйек, әхирәттәр!" - тип телмәр тотто ҡорҙа. Бик хуп. Ҡулыбыҙҙан килгәнсә, хәлебеҙҙән килгәнсә, илебеҙ, халҡыбыҙ өсөн тырышырбыҙ, әммә беҙҙең ерҙәге төп бурысыбыҙ ул түгел бит әле. Ирҙәребеҙ булһын етәкселектә. Үҫтерәйек уларҙы! Ҡатын-ҡыҙ хакимәнең ҡул аҫтында эшләп йөрөүе еңелме ни уларға? Һәйбәт урынбаҫарҙар булайыҡ. Муйын ҡайһы яҡҡа борола, баш та шул яҡҡа борола икәнен беләбеҙ бит инде.

Мин ир һүҙе һүҙ булған ғаиләлә тәрбиәләндем. Әсәйем ике институт тамамлаған кеше ине, атайым - Бөйөк Ватан һуғышы ветераны, училище генә тамамлаған. Әсәйем бер ҡасан да ғилемле, эшлекле булыуы менән атайым алдында маһайманы. Ниндәй генә эш башҡарыр булһа ла, унын менән кәңәшләшер булды. Хатта ғүмеренең һуңғы йылдарында 83 йәшлек атайым түшәктә ятып сирләгәндә лә әсәйем атайымды ҡәҙер итә белде. Һәр мәсьәләгә үҙенең ҡарашы булыуына ҡарамаҫтан, һуңғы һүҙҙе атайҙан әйттерҙе. Шундай ғаиләлә тәрбиәләнгәнгә микән, өйҙәрендә ирҙәренә баш булып маташҡан ҡатын-ҡыҙҙы өнәп еткермәйем.

Беҙҙең ҡатын-ҡыҙҙарға лидерлыҡ сифаттары хас, әлбиттә. Борон-борондан улар ирҙәр менән ҡуша яу сапҡан. Әллә шул сифат ҡайһы ваҡыт беҙгә ҡамасаулап та ҡуя микән? Ирҙәребеҙгә таяныс була беләбеҙме? Ни өсөн илебеҙ етәкселегендә эшләгән башҡорт ирҙәренең ҡатындары күпселек осраҡта башҡа милләттән? Әллә үҙебеҙ ирҙәребеҙгә үҫергә ирек бирмәйбеҙме? Әйткәндәй, башҡа милләт ирҙәре ҡыҙҙарыбыҙҙың саялығын шул тиклем оҫта файҙалана белә. Ҡаҙаҡтар араһында, мәҫәлән, шундай әйтем йөрөй: "Батыр йөрәкле ул үҫтерәм тиһәң, кәләшлеккә башҡорт ҡыҙын ал!" Башҡа милләттәргә батыр улдар үҫтереп, үҙебеҙ бахыр хәлендә тороп ҡалмайыҡ, әхирәттәр!

Милләт әсәһенең төп бурысы ил менән идара итеү түгел. Милләт әсәһенең төп бурысы: илебеҙҙең киләсәген ҡулына алырҙай, ысын хужа булырҙай, рухлы, белемле, эшлекле, йүнсел улдар тәрбиәләп үҫтереү. Гүзәл әсә булырҙай иманлы, инсафлы, күркәм холоҡло, күркәм ҡиәфәтле ҡыҙҙар тәрбиәләп үҫтереү. Беҙҙең төп бурысыбыҙ: халҡыбыҙҙың ырыҫ-ҡотон, ҡаныбыҙҙың таҙалығын һаҡлау. Илерҙәребеҙҙең тыныслығын, халҡыбыҙҙың иман байлығын, рухи ныҡлығын, яҡты киләсәген теләп, һәр саҡ доғала торған, илһөйәр, телһөйәр шәхестәр тәрбиәләп үҫтергән ил инәләре булырға яҙһын барыбыҙға ла.

***Төлфирә ДӘҮЛӘТЙӘРОВА, Ишембай районы "Торатау" гәзите редакторы урынбаҫары:*** Мин әле һаман булһа ауылдарҙағы бәйле күлдәкле, аҡ ойоҡбашлы әбейҙәрҙе һағынып иҫкә алам. Нурлы йөҙлө был инәйҙәр беҙҙе урамда ла, һәр аҙым һайын тәрбиәләп ултырыр ине. Уларҙың "Иманлы, тәртипле булығыҙ, үҙегеҙҙе ипле тотоғоҙ", тип әйткәндәре беҙҙең ҡылыҡ-фиғелгә уйылған, тормош тураһындағы башҡа кәңәштәре лә күңелдә урын алған. Ҡалала ғына түгел, хәҙер ауылдарыбыҙҙа ла шундай ағинәйҙәр булмауы беҙҙең милләтте ярлыландыра, бөлдөрә, хатта юлдан яҙҙыра.

Үкенес, әммә бөгөн "милләтем" тип яр һалып ҡысҡырып йөрөгән, хатта сәхнәләрҙән сығыш яһаған ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙҙың балалары үҙ телен белмәй, әсә телендә һөйләшмәй. Гүзәл заттың иң төп тәғәйенләнеше - үҙенең милләтен дауам итеү, үҙ милләтенә балалар үҫтереү бит инде ул. Ҡыҙғанысҡа күрә, беҙ бөгөн ошо бурыстың ни тиклем мөһим икәнлеген онота төштөк. Ул хаҡта хатта әлеге башҡорт ҡатын-ҡыҙҙары ҡоронда ла һүҙ әйтелмәне. Әгәр ҙә яҡты донъяға балалар тыуҙырғанһың икән, һин, әсә кеше, балаларыңда телһөйәрлек, илһөйәрлек, моңобоҙға, йырҙарыбыҙға, халҡыбыҙға һөйөү тәрбиәләргә лә тейешһең. Әгәр ҙә бала үҙенең милләтен, тарихын хөрмәт итмәй икән, уны был милләт вәкиле исемлегенән юйып ташларға ғына ҡала. Башҡорт ҡатын-ҡыҙҙары ҡоронда ҡатнашҡан һәр гүзәл зат ошоларҙы күңеленән үткәреп, берәй һығымта яһаһа, хәтеренә нығыраҡ уйып ҡуйһа, милләт алдындағы үҙенең төп бурыстарын иҫенә төшөрһә, был сараның файҙаһы булыр ине.

***Гөлдәр ХИЛАЖЕВА, Рәсәй Фәндәр академияһының Ижтимағи-сәйәси һәм хоҡуҡ тикшеренеүҙәр институты директоры урынбаҫары:*** Халҡыбыҙға үҙенең асылын һаҡлап ҡалыу бар замандарҙа ла еңел булмаған, әле лә еңел түгел, сөнки беҙ хәҙер күп быуаттар буйына күп милләтле дәүләттә йәшәйбеҙ. Әммә беҙгә бөгөн тағы бер хәүеф янай: бөтөн донъяны ялмап алған глобалләшеү процесының беҙҙең быуындан-быуынға тапшырыла килгән традицияларҙы йотоуы ихтимал. Хәҙерге заман башҡорт ҡатын-ҡыҙына глобалләшеү шарттарында үҙенең этник үҙенсәлектәрен һаҡлап ҡалыуы һәм милли мәҙәниәтен үҫтереүе тағы ла ауырыраҡҡа төшәсәк. Ошо һынауҙы нисек лайыҡлы күтәреү хаҡында ла һөйләшергә тейеш инек был ҡорҙа. Сөнки милләт буларaҡ һаҡланып ҡалырға теләйбеҙ икән, заман ҡуйған талаптар менән иҫәпләшмәй булмай.

Ниндәй генә тарихи осорҙо алып ҡарамайыҡ, ҡатын-ҡыҙ һәр ваҡытта ла үҙенең милләтенең традицияларын һаҡлаусы һәм дауам итеүсе булып иҫәпләнә. Тап әсә кеше үҙенең балаларында телгә, тыуған ергә, мәҙәниәткә һөйөү тәрбиәләй. Әммә

һуңғы йылдарҙа, бигерәк тә күпләп ҡалаларға күсеп йәшәй башлау менән, башҡорт ҡатын-ҡыҙы үҙенең ошо тарихи функцияһын үтәүҙән туҡтаны. Ошоларҙы - милләтебеҙҙең этник үҙенсәлектәрен һаҡлап ҡалыу, халҡыбыҙҙың рухи ҡиммәттәрен модернизациялау һәм глобалләшеү ҡорбаны итеүгә юл ҡуймау Милләт әсәһе иңендә.

***Зөһрә ФӘЙЗУЛЛИНА, шағирә, Сибай ҡалаһы:*** Ғаиләлә атай мал табыусы булһа, әсәй - ғаиләнең аҡылы. Әгәр ҙә ғаилә бәләкәй генә бер дәүләт икән, оло дәүләттә лә ирҙәр уны тыштан һаҡлаусы, ҡатындар эстән нығытыусы булырға тейеш. Милләт эсендә лә шулай, балаларыбыҙҙың ниндәй булыуы әсәйҙең ниндәй тәрбиә биреүенән килә. Бөгөн милләтебеҙгә рухлы балалар үҫтереү тигән бөйөк бурысыбыҙҙы онота төштөк. Әйтәйек, чечендарҙа һәм йәһүдтәрҙә шундай яҙылмаған ҡанундар йәшәй: нисә бала табырға, уларҙың кемеһенә ниндәй һөнәр бирергә кәрәклеге ғаилә эсендә хәл ителә, бының өсөн махсус эштәр башҡарыла. Ә беҙ баланың буйын үҫтерәбеҙ, рухын, күңелен үҫтереүгә, аңына милләт, илһөйәрлек, телһөйәрлек кеүек юғары төшөнсәләрҙе һеңдереүгә бөтөнләй иғтибар итмәйбеҙ. Һәр әсә үҙенең балаһы, ейән-ейәнсәрҙәре өсөн яуаплы. Баланы ашатып-эсереү менән генә сикләнергә түгел, унын күңеленә рухи орлоҡ һалырға тырышырға кәрәк. Ошо яуаплылыҡты йөкмәргә тейеш Милләт әсәһе. Онотҡанбыҙмы бындай талаптарҙы? Ауылдамы, ҡаламы - һәр ерҙә ағинәйҙәр мәктәбе ойошторайыҡ, уның тәрбиә-һабаҡтарын иҫкә төшөрәйек. Милләт әсәһе булырға яңынан өйрәнергә кәрәк беҙгә.

**Ләйсән НАФИҠОВА**
**яҙып алды.**



Ҡырмыҫҡалылар.



Әбйәлилдәр.



Мәләүездәр.

МӨҒЖИЗӘЛӘР ЗАМАНЫ



# КОСМОЭНЕРГЕТИКА ҺӘМ СӘЛӘМӘТЛЕК

## Космоэнергетик массаж

**Дауалау сеанстарын махсус космоэнергетик массаж менән аралаштырып алып барырға тәҡдим ителә. Энергетик массаж классик, дауалау, нөктә, мануаль һәм көнсығыш массаждары элементтарын үҙ эсенә ала. Был - пациент менән 30-40 минут дауамында аралашыу. Был инде тиҙ дауаланыуға һәм таҙарыныуға килтерә. Шулай уҡ энергетик массаж эске көсөргәнеште алып ташлай, туҡымаларҙы көсөргәнештән арындыра, остеохондрозды, быуындарҙы, умыртҡа һөйәген һәм бөтөн ағзаларҙы дауалай.**

Энергетик массаж аша алынған дауалау мөғжизәһе башҡа массаждар ысулы аша алынған һөҙөмтә менән сағыштырырлыҡ түгел. Бындай массажды 25 йәштән өлкән, һыны ҡатҡан, матдәләр алышыныуы боҙолған, тоҙ ултырған, невроз, бер нисә ағзаһында проблема булған барлыҡ пациенттарға ла алырға мөмкин. Энергетик массажға тиклем 5-10 сеанс космоэнергетика сеансы үтеп таҙарынырға кәрәк, юҡһа, бик ауыр буласаҡ - был ифрат көслө массаж! Тимәк, уны сикле, аҙнаһына - берике, бер курста етенән дә артыҡ алмаҫҡа кәрәк (иң яҡшыһы - 5 курс). Уларҙы сеанстарҙан тәнәфескә туҡтаған арала алыу уңайлы. Һөҙөмтәлелеге буйынса космоэнергетик массаж сеанстарҙан бер нисә тапҡырға көслөрәк.

**Йыһан ҡанундары.** Үҙебеҙ һәм башҡалар менән булған процестарҙың мәғәнәһен аңлау, аңлы рәүештә һабаҡ алыу һәм бер үк тырмаға ҡабат-ҡабат баҫмаҫ өсөн, йәшәүебеҙҙең төп ҡанундарын белеү кәрәк.

**Карма ҡануны.** Сәбәп артынан һөҙөмтә килә. Енәйәт артынан яза килә, изгелек өсөн - ғәфү итеү. Әгәр кешенең донъя гармонияһы менән бәйләнеше боҙолһа, кеше яфалана. Шул уҡ ваҡытта уның һайлау мөмкинлеге бар һәм ул хәл-торошто тамырынан үҙгәртә ала. Теләһә ниндәй кире энергияны тәүбәгә килеү, ғәфү үтенеү һәм мөхәббәт аша алып ташларға мөмкин.

**Уҡыу ҡануны.** Беҙ физик донъяға күңелебеҙҙе байытыр, ахырҙа, йыһан ҡанундарын аңлап, Аллаһы Тәғәләгә килер өсөн инәбеҙ. Бында бөтөн уҡыу, тормош - сикһеҙ үҫеш һәм камиллашыу. Тимәк, барлыҡ тормош һабаҡтарын рәхмәтле булып ҡабул итергә кәрәк.

**Тартыу ҡануны.** Оҡшаш оҡшашты тарта. Яҡшылыҡ - яҡшылыҡты, насарлыҡ - насарлыҡты. Әгәр аура бысраҡ икән, ул шундай уҡ бысраҡты тарта. Әгәр аура таҙа икән, ул тик таҙаны ғына тарта. Тимәк, алкоголик алкоголикты тарта, асарбаҡ - асарбаҡты, балыҡсы - балыҡсыны. Насар, кире уй - насарҙы, яҡшы уй яҡшыны ғына тарта. Оҡшаш тирбәлеүҙәр ҙә бер-береһенә тартыла.

**Ритмдар ҡануны.** Бөтөн нәмә ритмдарға буйһона: көндө - төн, йәйҙе - ҡыш, дәүерҙе дәүер алыштыра. Шуға күрә тәбиғи ритмдарға ярашлы йәшәргә кәрәк: яҙын ултыртырға, көҙөн йыйып алырға; иртән торорға, ҡараңғы төшөү менән ятырға. Бөтөн нәмәне ваҡытында башҡарыу зарур.

**Рауфан МОРТАЗИН.**
**(Дауамы бар).**

УҢЫШ ҠАҘАН



# БӘХЕТКӘ УН АҘЫМ

## Дөрөҫ аҙым һәр кем өсөн төрлө

Бер ваҡыт сит илдә инглиз телен аңлаусы аудитория өсөн дәрестәр үткәрҙем. Андың һәләттәренә ышанысты нығытыу өсөн был һәләттәрҙе аңлатҡан ғилми асыштарға туҡталдым. Әммә шул ваҡыт семинарҙың бағыусылары алдан планлаштырылмаған ун минутлыҡ тәнәфес иғлан итте. Тәнәфестә улар мине уратып алып: "Теория кәрәкмәй, ғәмәлдә күрһәт", - тине. Улар был аудиторияны яҡшы белеүе һәм, әгәр теория ғына һөйләнелһә, уҡыу өсөн түләнгән аҡсаны кире талап итеп, ялыуҙар ағыла башлаясағын раҫланы. Минең лекцияларымдың ғәмәлдә иң һөҙөмтәле һәм тикшерелгән алымға нигеҙләнеүе уларҙы инандыра алманы. Улар планымды үҙгәртеүҙе талап итте.

Ахырҙа, хужаларға буйһоноп, уҡытыу стилен үҙгәртергә тура килде. Был көндө уҡыусыларҙың бик аҙы ғына аураһын күрергә өйрәнде, бик аҙҙары психометрияла (кешелә булған предметҡа ҡарап, уның характерын билдәләү) уңышҡа өлгәште. Бик аҙҙары ғына минең уйҙан ғына ебәргән һүҙҙәрҙе тота алды. Андың ҡеүәте күҙлегенән ҡарағанда, бөтөн был һәләттәр "балалар баҡсаһы" программаһына тап килә. Әммә ғәмәлдә үҙләштереү өсөн уларҙың килеп сығышын, ижад донъяһы менән хеҙмәттәшлек итеү өсөн уларҙың тәбиғәтен аңларға кәрәк.

...Бала саҡта мин хеҙмәтсенең ашарға нимәнелер ултыртырға йәки һауыт-һабаны йыйыштырырға кәрәк ваҡытта ғына килеп инеүенә аптырай инем. Бер ваҡыт туғаным менән йәшенмәк уйнаныҡ һәм мин аш өҫтәле аҫтына йәшерендем. Ҡапыл тап әсәйем ултырған урында келәм аҫтында ниндәйҙер ҡалҡып торған нәмә күреп, уға баҫып ҡараным һәм ашнаҡсының: "Кем унда ҡыңғырау менән уйнай?" - тигән тауышын ишеттем...

Илаһ беҙҙең шылтыратыуҙарҙың һәр ҡайһыһына яуап бирмәй. Бер шылтыратыу уға барып етмәүе лә, икенсеһе барып етеүе мөмкин. Шуға ла бер тапҡыр ғына шылтыратып, ҡул һелтәп ҡуймағыҙ.

Нисек итеп Илаһ телендә һөйләшергә? Яҙмаларҙың иң башында үҙеңә ярҙам итеү өсөн башҡаларға ярҙам итеү тураһында һүҙ булғайны. Был теория ғына түгел, ә факт, сөнки беҙ барыбыҙ ҙа "кеше нәҫеле" тигән бер команданың ағзалары булып торабыҙ. Әгәр тормошто дөйөм уҙышыу тип ҡарарға күнекһәгеҙ, унда еңеүселәр булмай. Барыһын да тигеҙ иҫәп көтә, финишҡа беҙ барыбыҙ ҙа бер ваҡытта киләбеҙ. Яҡынығыҙға бер аҙым алғараҡ баҫырға ярҙам итеүегеҙ артта ҡалдығыҙ тигәнде аңлатмай. Илаһ бәрәү ҙә артта ҡалмаһын өсөн беҙҙе күҙәтеп тора. Һеҙ алға барыу өсөн тағы ла ҡеүәтлерәк этәргес алаһығыҙ.

Ижадсының теле - булдырыу. Проблеманы хәл итеү юлын тапһағыҙ - һеҙ Илаһҡа ярҙам итәһегеҙ. Уның менән иңгә-иң терәшеп алға бараһығыҙ. Бынан сығып, һәр саҡ проблема сығанағы булып торһағыҙ йәки уны ҡатмарландырырға ярҙам итһәгеҙ, һеҙ Илаһҡа ҡаршы сығаһығыҙ, унан алыҫлашаһығыҙ, тиергә мөмкин. Илаһ менән уның телендә йышыраҡ һөйләшһәгеҙ, тормошоғоҙ тағы ла яҡшырыр. Был доғаға ҡарағанда ла һәйбәтерәк. Юҡ, мин доға уҡыуҙан туҡтарға кәрәк, тимәйем. Әммә нимәлер һорап мөрәжәғәт итерҙән алда пауза эшләгеҙ һәм үтенесегеҙҙе яҡшылап уйлағыҙ. Бәлки, тап ошо ваҡытта Илаһ һеҙгә көрсөктән сығыу юлын табыуығыҙҙы, үҙ көсөгөҙ менән проблемаларҙы йырып сығыуығыҙҙы һорап мөрәжәғәт итәлер.

Яҡшыраҡ йәшәүгә ынтылғанда күптәр доғаға - ҡеүәтле алымға мөрәжәғәт итә. Әммә улар йыш ҡына бер хата ебәрә: проблеманы хәл итеү өсөн нимә эшләргә кәрәклеген һорау урынына, уны икенсе кешенең иңенә ауҙарыуҙы һорай.

**Роберт СТОУН.**



## 31 ОКТЯБРЯ ПОНЕДЕЛЬНИК ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Контрольная закупка"
09.40 "Жить здорово!"
10.50 "Модный приговор"
11.50 "Женский журнал"
12.00 Новости
12.20 "ЖКХ"
13.20 "Участковый детектив"
14.00 Другие новости
14.20 "Понять. Простить"
15.00 Новости
15.25 "Хочу знать"
15.55 "Обручальное кольцо". Сериал
16.55 "Федеральный судья"
18.00 Вечерние новости
18.45 "Давай поженимся!"
19.50 "Пусть говорят"
21.00 "Время"
21.30 "Дело гастронома № 1", 1-я серия. Сериал
22.25 "Судьба на выбор"
23.30 "Познер" Авторская программа
00.30 Ночные новости
00.40 "Форс-мажоры", 6-я серия
01.30, 03.05 "Роллеры"
03.00 Новости
03.40 "Врата"
04.30 "Хочу знать" с Михаилом Ширвиндтом"

## РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.08, 08.36 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.05, 08.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
09.05 "С новым домом!"
10.00 "О самом главном"
11.00 "Вести"
11.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
11.50 "Кулагин и партнеры". Сериал
13.00 "Тайны следствия". Сериал
14.00 "Вести"
14.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
14.50 "Вести. Дежурная часть"
15.05 "Ефросинья. Продолжение", 171-я серия
16.00 "Вести"
16.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
16.50 "Все к лучшему", 201-я серия
17.55 "Здравствуй, мама!" 17-я серия
18.55 "Прямой эфир"
20.00 "Вести"
20.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Тайны следствия-9", 11-13-я серии. Сериал
23.50 "Хроника одной казни. Хрущев против Рокотова". Док. фильм
00.45 "Вести+"
01.05 "Профилактика"
02.15 "Крик о помощи". Триллер
04.00 "Комната смеха"

## НТВ

05.55 "НТВ утром"
08.30 "Эра стрельца". Сериал
09.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
10.00, 13.00 "Сегодня"
10.20 "Обзор. Чрезвычайное происшествие. Обзор за неделю"
10.55 "До суда"
12.00 "Суд присяжных"
13.30 "Судебный детектив". Сериал
14.40 "Центр помощи "Анастасия"
15.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.00, 19.00 "Сегодня"
16.30 "Прокурорская проверка"
17.40 "Говорим и показываем"
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.30 "Улицы разбитых фонарей". Сериал
21.30 "Морские дьяволы". Сериал
23.15 "Сегодня. Итоги"
23.35 "Честный понедельник"
00.25 "Школа злословия"
01.10 "Футбольная ночь"
01.45 "В зоне особого риска"
02.20 "Один день. Новая версия"
03.00 "Город соблазнов". Остросюжетный сериал
04.55 "Мангуст". Детективный сериал

## БСТ

**07.00 "Салям"**
**10.00, 12.15, 00.00 "Полезные новости"**
**10.15, 15.15 "Учим башкирский язык"**
**10.30, 15.30 "Гора новостей"**
**10.45 "Городок АЮЯ"**
**11.00, 00.15 "Замандаштар"**
**11.15, 17.45 "Орнамент"**
**11.30, 12.30, 13.30, 14.30, 16.30, 17.30, 18.30, 19.30, 20.30 "Новости"**
**11.45 "Итоги недели"**
**12.45 "Надо знать!"**
**13.00, 22.00 "На самом деле"**
**13.45 "Бахетнама"**
**14.45 "В активном поиске"**
**15.45 "Царь горы"**
**16.00 "Бауырхак"**
**16.15 "Шатлык йыры"**
**16.45 Документальный фильм**
**17.15 "Надо знать!"**
**18.00 "Еду я в деревню"**
**18.30, 22.30 "Новости" (на башк. яз.)**
**18.45 "Сэнгелдек"**
**19.00, 19.40, 20.40 "Айболит-66"**
**21.00 Новости (на русск. яз.)**
**23.00 Послесловие" с Азаматом Саитовым"**
**23.15 "Пора разобраться"**
**00.30 Поет Марсель Кутуев**

## 1 НОЯБРЯ ВТОРНИК ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Контрольная закупка"
09.40 "Жить здорово!"
10.50 "Модный приговор"
11.50 "Женский журнал"
12.00 Новости
12.20 "ЖКХ"
13.20 "Участковый детектив"
14.00 Другие новости
14.20 "Понять. Простить"
15.00 Новости
15.25 "Хочу знать"
15.55 "Обручальное кольцо". Сериал
16.55 "Федеральный судья"
18.00 Вечерние новости
18.45 "Давай поженимся!"
19.50 "Пусть говорят"
21.00 "Время"
21.30 "Дело гастронома № 1". Сериал
22.30 "Среда обитания"
23.30 Ночные новости
23.50 "terra nova"
00.45 "Как потерять друзей и заставить всех тебя ненавидеть". Комедия
02.50, 03.05 "Семейные тайны"
03.00 Новости

## РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.08, 08.36 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.05, 08.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
09.05 "Ауаз"
10.00 "О самом главном"
11.00 "Вести"
11.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
11.50 "Кулагин и партнеры". Сериал
13.00 "Тайны следствия". Сериал
14.00 "Вести"
14.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
14.50 "Вести. Дежурная часть"
15.05 "Ефросинья. Продолжение", 172-я серия
16.00 "Вести"
16.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
16.50 "Все к лучшему", 202-я серия
17.55 "Здравствуй, мама!" 18-я серия
18.55 "Прямой эфир". Ток-шоу
20.00 "Вести"
20.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Тайны следствия-9", 14-16-я серии
23.50 "Битва за "Салют". Космический детектив". Док. фильм
00.45 "Вести+"
01.05 "Профилактика"
02.15 "Честный детектив"
02.50 "Вакансия на жертву"
04.25 "Городок. Дайджест"

## НТВ

05.55 "НТВ утром"
08.30 "Эра стрельца". Сериал
09.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
10.00, 13.00 "Сегодня"
10.20 "Внимание: розыск!" с Ириной Волк"
10.55 "До суда"
12.00 "Суд присяжных"
13.30 "Судебный детектив". Сериал
14.40 "Центр помощи "Анастасия"
15.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.00, 19.00 "Сегодня"
16.30 "Прокурорская проверка"
17.40 "Говорим и показываем"
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.30 "Улицы разбитых фонарей". Сериал
20.30 "Выйти замуж за генерала". Мелодрама
22.45 Футбол. Лига чемпионов УЕФА. "Зенит" (Россия) - "Шахтер" (Украина). Прямая трансляция
00.55 "Улицы разбитых фонарей". Сериал
01.55 "Формат А4". "Страсти и страхи". Сериал
02.55 "Кулинарный поединок"
03.55 "Один день. Новая версия"
04.55 "Мангуст". Сериал
05.25 "Лига чемпионов УЕФА. Обзор"

## БСТ

**07.00 "Салям"**
**10.00, 18.15, 23.45 "Полезные новости"**
**10.15, 15.15 "Учим башкирский язык"**
**10.30, 15.30 "Гора новостей"**
**10.45 "Царь горы"**
**11.00, 00.00 "Замандаштар"**
**11.15, 17.45 "Орнамент"**
**11.30, 12.30, 13.30, 14.30, 16.30, 17.30, 19.30, 20.30 "Новости"**
**11.45 "Пора разобраться"**
**12.45, 17.15 "Надо знать!"**
**13.00, 22.00 "На самом деле"**
**13.45 "Башкорт йыры"**
**14.45 "В активном поиске"**
**15.45 "Борсак"**
**16.00 "Байтус"**
**16.15 "Йырлы караз"**
**16.45 Документальный фильм"**
**18.00 "Послесловие"**
**"Деловой Башкортостан"**
**18.30, 22.30 Новости "(на башк. яз.)**
**18.45 "Сэнгелдек"**
**19.00, 19.40, 20.40 "Подранки"**
**21.00 "Действующие лица"**
**21.30 Новости (на русск. яз.)**
**23.00 "Уфимское "Времечко"**
**23.30 "Криминальный спектр"**
**00.15 "Любимые мелодии"**

## 2 НОЯБРЯ СРЕДА ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Контрольная закупка"
09.40 "Жить здорово!"
10.50 "Модный приговор"
11.50 "Женский журнал"
12.00 Новости
12.20 "ЖКХ"
13.20 "Участковый детектив". Сериал
14.00 Другие новости
14.20 "Понять. Простить"
15.00 Новости
15.25 "Хочу знать"
15.55 "Обручальное кольцо". Сериал
16.55 "Федеральный судья"
18.00 Вечерние новости
18.45 "Давай поженимся!"
19.50 "Пусть говорят"
21.00 "Время"
21.30 "Дело гастронома № 1", 3-я серия
22.30 "Человек и закон"
23.30 "Ночные новости"
23.50 "Убийство", 6-я серия
01.00 "Американская мечта". Комедия
03.00 "Новости"
03.05 "Джесси Стоун: резкое изменение"

## РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.08, 08.36 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.05, 08.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
09.05 "С новым домом!"
10.00 "О самом главном"
11.00 "Вести"
11.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
11.50 "Кулагин и партнеры". Сериал
13.00 "Тайны следствия"
14.00 "Вести"
14.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
14.50 "Вести. Дежурная часть"
15.05 "Ефросинья. Продолжение", 173-я серия
16.00 "Вести"
16.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
16.50 "Все к лучшему". Сериал
17.55 "Здравствуй, мама!" 19-я серия
18.55 "Прямой эфир"
20.00 "Вести"
20.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Тайны следствия", 17-я и 18-я серии
22.55 "Исторический процесс"
00.30 "Вести+"
00.50 "Профилактика"
02.00 "Опасный Уик-Энд"
04.00 "Городок. Дайджест"
04.45 "Вести. Дежурная часть"

## НТВ

05.55 "НТВ утром"
08.30 "Эра стрельца"
09.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
10.00 "Сегодня"
10.20 "В зоне особого риска"
10.55 "До суда"
12.00 "Суд присяжных"
13.00 "Сегодня"
13.30 "Судебный детектив". Сериал
14.40 "Центр помощи "Анастасия"
15.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.00, 19.00 "Сегодня"
16.30 "Прокурорская проверка"
17.40 "Говорим и показываем"
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.30 "Улицы разбитых фонарей"
21.30 "Морские дьяволы"
23.15 "Сегодня. Итоги"
23.35 "Формат А4". "Чужой ребенок"
00.35 "Внимание: розыск!" с Ириной Волк"
01.15 "Квартирный вопрос"
02.20 "Один день. Новая версия"
03.00 "Город соблазнов". Сериал
04.55 "Мангуст". "Дорогой гость"

## БСТ

**07.00 "Салям"**
**10.00, 12.15, 23.45 "Полезные новости"**
**10.15, 15.15 "Учим башкирский язык"**
**10.30, 15.30 "Гора новостей"**
**10.45 "Борсак"**
**11.00, 00.00 "Замандаштар"**
**11.15, 17.45 "Орнамент"**
**11.30, 12.30, 13.30, 14.30, 16.30, 17.30 "Новости"**
**11.45 "Действующие лица"**
**12.45, 17.15 "Дело мастера"**
**13.00, 22.00 "На самом деле"**
**13.45 "Байык"**
**14.45 "В активном поиске"**
**15.45 "Цирк в 13 метров"**
**16.00 "Семер"**
**16.15 "Городок АЮЯ"**
**16.45 Документальный фильм**
**18.00 "Тарихи фараз"**
**18.30, 22.30 "Новости" (на башк. яз.)**
**18.45 "Сэнгелдек"**
**18.55 Открытый чемпионат России по хоккею - Чемпионат КХЛ. "Салават Юлаев" (Уфа) - "Автомобилист" (Екатеринбург). В перерывах: Новости**
**21.30 Новости (на русск. яз.)**
**23.00 "Пора разобраться"**
**00.15 "Рожденный летать". Летчик-испытатель З. Габдуллин**

## 3 НОЯБРЯ ЧЕТВЕРГ ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Контрольная закупка"
09.40 "Жить здорово!"
10.50 "Модный приговор"
11.50 "Женский журнал"
12.00 Новости
12.20 "ЖКХ"
13.20 "Участковый детектив"
14.00 Другие новости
14.20 "Понять. Простить"
15.00 Новости
15.25 "Хочу знать"
15.55 "Обручальное кольцо". Сериал
16.55 "Жди меня"
18.00 Вечерние новости
18.45 "Поле чудес"
19.50 "Пусть говорят"
21.00 "Время"
21.30 "Дело гастронома № 1", 4-я серия
22.30 "Госпожа горничная". Комедия
00.30 "Подпольная империя"
01.35 "Время". Мелодрама
03.35 "Главная мишень"
05.15 "Участковый детектив"

## РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.08, 08.36 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.05, 08.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
09.05 "От всей души"
10.00 "О самом главном"
11.00 "Вести"
11.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
11.50 "Кулагин и партнеры". Сериал
13.00 "Тайны следствия"
14.00 "Вести"
14.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
14.50 "Вести. Дежурная часть"
15.05 "Ефросинья. Продолжение", 174-я серия
16.00 "Вести"
16.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
16.50 "Все к лучшему". Сериал
17.55 "Здравствуй, мама!" 20-я серия
18.55 "Прямой эфир"
20.00 "Вести"
20.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Тайны следствия", 19-я и 20-я серии
22.55 "Поединок"
23.50 "Союз" над тропиками". Док. фильм
00.55 "Вести+"
01.15 "Профилактика"
02.25 "Принц и я-3: медовый месяц"
04.20 "Городок. Дайджест"
04.45 "Вести. Дежурная часть"

## НТВ

05.55 "НТВ утром"
08.30 "Степаныч". Документальный фильм-посвящение Виктору Черномырдину
09.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
10.00 "Сегодня"
10.20 "Медицинские тайны"
10.55 "До суда"
12.00 "Суд присяжных"
13.00 "Сегодня"
13.30 "Суд присяжных. Окончательный вердикт"
14.40 "Центр помощи "Анастасия"
15.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.00, 19.00 "Сегодня"
16.25 "Прокурорская проверка"
17.40 "Говорим и показываем"
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.30 "Улицы разбитых фонарей"
21.30 "Морские дьяволы". Сериал
23.20 "Сегодня. Итоги"
23.40 "Опасная связь". Драма
01.50 Футбол. Лига Европы УЕФА. "АЕК" (Греция) - "Локомотив" (Россия). Прямая трансляция
04.00 "Лига Европы УЕФА. Обзор"
04.30 "Дачный ответ"

## БСТ

**07.00 "Салям"**
**10.00, 12.15, 23.45 "Полезные новости"**
**10.15, 15.15 "Учим башкирский язык"**
**10.30, 15.30 "Гора новостей"**
**10.45 "Цирк в 13 метров"**
**11.00, 00.00 "Замандаштар"**
**11.15, 17.45 "Орнамент"**
**11.30, 12.30, 13.30, 14.30, 16.30, 17.30, 19.30, 20.30 "Новости"**
**11.45 "Тамле" (на русск. яз.)**
**12.45, 17.15 "Надо знать!"**
**13.00, 22.00 "На самом деле"**
**13.45 "Пора разобраться"**
**14.45 "В активном поиске"**
**15.45 "Книга сказок"**
**16.00 "Шэп арба"**
**16.15 "Йырлы караз"**
**16.45 Документальный фильм**
**18.00 "Волшебный курай"**
**18.30, 22.30 "Новости" (на башк. яз.)**
**18.45 "Сэнгелдек"**
**19.00, 19.40, 20.40 "Свой среди чужих, чужой среди своих"**
**21.00 "Глас закона"**
**21.30 Новости (на русск. яз.)**
**23.00 "Диспут-клуб "Пятый угол"**
**00.15 Песни на стихи Радика Хакимьянова**
**00.30 "Любимые мелодии"**

## 4 НОЯБРЯ ПЯТНИЦА ПЕРВЫЙ КАНАЛ

06.00 Новости
06.10 "Первый троллейбус"
07.55 "Кубанские казаки"
10.00 Новости (с субтитрами)
10.15 "Цирк"
12.00 Новости (с субтитрами)
12.15 "Максим Перепелица"
14.00 "Покровские ворота"
16.30 "Три богатыря и Шамаханская царица". Полнометражный анимационный фильм
18.00 Вечерние новости
18.10 "Игорь Тальков. Поверженный в бою"
19.30 "Кавказская пленница, или новые приключения Шурика"
21.00 "Время"
21.20 "Все хиты "Юмор VM" на "Первом"
23.30 "Перевозчик". Боевик
01.10 "Крамер против Крамера"
03.00 "Любовное гнездышко"
04.35 "Врата"
05.25 "Хочу знать" с Михаилом Ширвиндтом"

## РОССИЯ 1

05.00 "Не могу сказать "прощай". Мелодрама
06.50 "Верные друзья". Лирическая комедия
08.55 "Любо, братцы! 200 лет спустя". К юбилею Кубанского казачьего хора
10.40 "Всегда говори "Всегда-6". Сериал
14.00 "Вести"
14.20 "Всегда говори "Всегда-6". Сериал. Продолжение
16.20 Юбилейный концерт Александра Розенбаума
19.00 "Охотники за караванами". Военная драма
20.00 "Вести"
20.35 "Охотники за караванами". Военная драма. Продолжение
23.30 "Место встречи изменить нельзя". Детективный сериал
02.25 "Горячая десятка"
03.30 "Комната смеха"

## НТВ

05.35 "Детское утро на НТВ"
05.55 "Эра стрельца"
08.00 "Сегодня"
08.20 "Эра стрельца"
09.00 "Улицы разбитых фонарей". Сериал
09.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
10.00 "Сегодня"
10.20 "Улицы разбитых фонарей". Сериал
19.00 "Сегодня"
19.25 "Улицы разбитых фонарей"
20.30 "Смерш. Легенда для предателя". Остросюжетный фильм
00.25 "Снайпер". Остросюжетный фильм
02.15 "Искупление". Мелодрама
04.40 "Ангелы и демоны". Чисто кремлевское убийство". Док. фильм

## БСТ

**07.00 "Салям"**
**07.15 Художественный фильм**
**09.15 Мультфильм**
**10.30, 15.30 "Гора новостей"**
**10.45 "Книга сказок"**
**11.00 "Замандаштар"**
**11.15 "Орнамент"**
**11.30 "Весело живем"**
**11.45 "Глас закона"**
**12.15 "Полезное новости"**
**12.30, 20.30 "Новости"**
**12.45 "Надо знать!"**
**13.00 "На самом деле"**
**13.30 "Историческая среда"**
**14.00 "Арслан"**
**14.45 "Золотое наследие"**
**15.15 "Учим башкирский язык"**
**15.45 "Зеркальце"**
**16.00 "Сулпылар"**
**16.15 "Царь горы"**
**16.30 "Там, где начинается Россия"**
**16.55 Открытый чемпионат России по хоккею - Чемпионат КХЛ**
**19.30 "Йома"**
**20.00 "Любимое дело"**
**21.00 "Профили"**
**19.40, 20.40 Комедии советского кинематографа на башк. яз.**
**21.30 Новости (на русск. яз.)**
**22.00 "Золотая осень-2011"**
**22.30 "В поисках затерянного города"**
**23.00 "Уфимское Времечко"**
**23.30 "Криминальный спектр"**
**23.45 УГАИ им. З. Исмагилова представляет…**

## 5 НОЯБРЯ СУББОТА ПЕРВЫЙ КАНАЛ

06.00 Новости
06.15 "Возвращение кота в сапогах"
07.20 "Играй, гармонь любимая!"
08.10 "Дисней-клуб"
09.00 "Умницы и умники"
09.45 "Слово пастыря"
10.00 Новости
10.15 "Кавказская пленница, или новые приключения Шурика"
11.45 "Новый "Ералаш"
12.00 Новости (с субтитрами)
12.15 "Среда обитания"
13.15 "Веселые ребята. Артисты и надзиратели". Док. фильм
14.20 "Веселые ребята"
16.10 "Укрощение строптивых"
18.00 Вечерние новости (с субтитрами)
18.15 "Кто хочет стать миллионером?" с Дмитрием Дибровым"
19.20 "Большие гонки"
21.00 "Время"
21.15 "Болеро". Танцевальное шоу
22.45 "Прожекторперисхилтон"
23.20 "Чтец". Драма
01.30 "Игра в прятки"
03.25 "Соседи"
05.20 "Участковый детектив"

## РОССИЯ 1

04.40 "Берегись автомобиля"
06.35 "Сельское утро"
07.05 "Диалоги о животных"
08.00 "Вести"
08.10 "Местное время. Вести-Башкортостан"
08.20 "Наш любимый Аркадий Райкин"
10.05 "Качество жизни"
10.30 "Специальный корреспондент"
11.00 "Вести"
11.10 "Местное время. Вести-Башкортостан"
11.20 "Подари себе жизнь"
11.55 "Всегда говори "всегда"-6". Сериал
14.00 "Вести"
14.20 "Местное время. Вести-Башкортостан"
14.30 "Всегда говори "всегда"-7". Сериал
17.05 "Субботний вечер"
18.55 Шоу "Десять миллионов" с Максимом Галкиным"
20.00 "Вести в субботу"
20.45 "Спасти мужа". Мелодрама
00.25 "Девчата"
01.00 "Место встречи изменить нельзя"
04.05 "Комната смеха"

## НТВ

05.40 "Фабрика грез". Сериал
07.25 "Смотр"
08.00 "Сегодня"
08.20 "Золотой ключ"
08.45 "Академия красоты" с Ляйсан Утяшевой"
09.20 "Готовим с Алексеем Зиминым"
10.00 "Сегодня"
10.20 "Главная дорога"
10.55 "Кулинарный поединок"
12.00 "Квартирный вопрос"
13.00 "Сегодня"
13.20 "Своя игра"
14.15 "Морские дьяволы". Сериал
19.00 "Сегодня"
19.25 "Морские дьяволы". Сериал
22.30 "Настоятель-2". Остросюжетный фильм
00.25 "Нереальная политика"
01.00 "Пуленепробиваемый". Комедия
02.40 "Мистер Бин на отдыхе". Комедия
04.25 "Кремлевская кухня"

## БСТ

**07.00, 18.30 "Новости" (на башк. яз.)**
**07.15 "Доброе утро"**
**08.00 Программы Золотого фонда**
**09.00 Мультфильм**
**09.30 "Замандаштар"**
**10.00 "Бахетнама"**
**10.45 "Еду я в деревню"**
**11.15 "Арслан"**
**12.00 "Следопыт"**
**12.30, 21.30 Новости (на русск. яз.)**
**12.45 "Дело мастера"**
**13.00 "Тэмле" (на русск. яз.)**
**13.30 "Весело живем"**
**14.00 "Дарю песню"**
**16.00 "Третий звонок". А. Абдуллин. "Тринадцатый председатель". Спектакль**
**18.00 "Тарихи фараз"**
**18.45 "Сэнгелдек"**
**19.00 "Хазина"**
**19.30 "Дарман"**
**20.15 "Башкорттар"**
**20.45 "Парад планет"**
**22.00 "Башкорт йыры"**
**22.45 "Муз-базар"**
**23.15 "Красноусольские самоцветы"**

## 6 НОЯБРЯ ВОСКРЕСЕНЬЕ ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.55, 06.10 "Табор уходит в небо"
06.00 Новости
07.55 "Армейский магазин"
08.30 "Дисней-клуб"
09.15 "Здоровье"
10.00 Новости (с субтитрами)
10.10 "Непутевые заметки"
10.30 "Курбан-байрам". Трансляция из Уфимской соборной мечети
11.05 "Пока все дома"
12.00 Новости (с субтитрами)
12.15 "Специальное задание"
13.25 "Новый "Ералаш"
14.15 "Лидия Федосеева-Шукшина. О любви, о детях, о себе..." Док. фильм
15.20 "Калина красная"
17.20 "Молога. Русская Атлантида". Док. фильм
19.25 Концерт Софии Ротару
21.00 "Воскресное "Время"
22.00 "Большая разница"
23.00 "Сумерки". Мелодрама
01.15 "Обмани меня". Сериал
03.45 "Врата"

## РОССИЯ 1

05.15 "Дом, в котором я живу". Военная драма
07.15 "Вся Россия"
07.30 "Сам себе режиссер"
08.20 "Смехопанорама" Евгения Петросяна
08.50 "Утренняя почта"
09.30 "Всегда говори "всегда"-7"
10.20 "Вести-Башкортостан. События недели"
11.00 "Вести"
11.10 "Всегда говори "всегда"-7"
13.10 Праздник Курбан-байрам. Прямая трансляция из Московской Соборной мечети
14.00 "Вести"
14.20 "Местное время. Вести-Башкортостан"
14.30 "Всегда говори "всегда"-7". Продолжение
18.05 "Смеяться разрешается"
20.00 "Вести недели"
21.05 "Елена". Драма
23.15 "Специальный корреспондент"
00.20 "Геннадий Хазанов. Повторение пройденного"
00.50 "Место встречи изменить нельзя"
02.45 "С почестями"

## НТВ

05.20 "Фабрика грез". Сериал
07.00 "В поисках Франции"
08.00 "Сегодня"
08.15 "Русское лото"
08.45 "Их нравы"
09.25 "Едим дома!"
10.00 "Сегодня"
10.20 "Первая передача"
10.55 "Развод по-русски"
12.00 "Дачный ответ"
13.00 "Сегодня"
13.20 "Своя игра"
14.15 "Морские дьяволы". Сериал
19.00 "Сегодня"
19.25 "Морские дьяволы". Сериал
22.25 "Уй, На-на"
00.35 "Девять ярдов-2". Криминальная комедия
02.30 "Главная дорога"
03.05 "Страх"
04.55 "Инвестиции в революцию"

## БСТ

**07.00 Новости (на башк. яз.)**
**07.15 Художественный фильм**
**09.30 "Курбан-байрам". Прямая трансляция из Соборной мечети "ЛяЛя-Тюльпан"**
**10.30 "Праздник веры и добра". Концерт**
**11.00 "Тамыр" представляет…**
**12.00 "Йома"**
**12.30 Новости**
**12.45 "Надо знать!"**
**13.00 "Тэмле"**
**13.30 "Башкорттар"**
**14.00 "Дарю песню"**
**16.00 "Историческая среда"**
**16.30 "Замандаштар"**
**16.55 Открытый чемпионат России по хоккею - Чемпионат КХЛ. "Салават Юлаев" (Уфа) - "Барыс" (Астана)**
**19.30 "Волшебный курай"**
**20.00 "Любимое дело"**
**20.30 "Новости спорта"**
**21.00 "Урал Лото"**
**21.15 "За порогом"**
**21.30 "Новости недели"**
**22.00 "Байык"**
**23.00 "Вечер.com"**
**23.45 Встреча с молодостью. Бенефис заслуженного артиста РБ Магарифа Ахмадиева**

✓ *Әммә бындай саранан йәһәт кенә һөҙөмтә көтөп булмай. Бөтәһенән элек Сергей Михалевҡа Александр Радулов, Сергей Зиновьев кеүек уйынсылар менән уртаҡ тел табырға, уларға ҡарата талаптарҙы арттырырға кәрәк.*



*БАШ ҠАЛА ҠУНАҠТАРЫ*

# ИРТӘГӘ "УРАЛ БАТЫР" ОНОТОЛҺА...

## бөгөн үк ятып үлергә була

**Һәр халыҡ үҙенең героик эпостарына, фольклор өлгөләренә, ғөмүмән, тарихына ҡарата мөнәсәбәтен ошондай девиз менән белдерергә мөмкиндер, моғайын. Сөнки донъяның, Ерҙең, Кешелектең нисек барлыҡҡа килеүе тураһындағы боронғо мифтар - телдән-телгә күсеп, беҙҙең көндәргәсә килеп еткән тарихи асылыбыҙҙың башы. Бындай мифтар һәр халыҡта бар, һәм шундай тарихы, шундай мифы булған халыҡ бәхетле, улар үҙ баһаһын белә. Ошо көндәрҙә Башҡортостанға яҡут халҡының героик эпосы олонхоноң исем туйын үткәрергә килгән делегация ағзалары тураһында ла тәүге ишеткән фекер: "Үҙ баһаларын беләләр!"- булды. Үҙ баһаһын белгән халыҡ башҡаларҙы нисек баһалай икән? Шуны асыҡлау маҡсатынан уларҙың олонхо аша Башҡортостанға бәйле фекерҙәрен тыңланыҡ.**

**Агафья ЗАХАРОВА, Яҡут-Саханың Халыҡ ижады үҙәгендәге "Олонхо" республика үҙәге мөдире:** Беҙҙең тап Башҡортостанға килеүебеҙҙең үҙенә күрә сәбәптәре лә бар, сөнки 2000 йылда Яҡутстанда донъя халыҡтары эпосы буйынса халыҡ-ара конференция үтте. Унда һеҙҙән академик Әхмәт Сөләймәнов һәм Башҡортостан Республикаһының ЮНЕСКО эштәре буйынса комитетының яуаплы сәркәтибе Шәфҡәт Тутаев ҡатнашты. Шунда улар: "Ни өсөн шундай ҙур, грандиоз, архаик эпосты ЮНЕСКО-ның кешелектең телдән һөйләнелгән һәм матди булмаған мираҫы ҡомартҡылары исемлегенә индереүгә номинацияланмайһығыҙ?" - тигән һорау биреп, беҙҙең башҡа фекер һалып киттеләр. Һуңынан беҙ ысынлап та ЮНЕСКО-ға Рәсәй Федерацияһы проекты булараҡ тәҡдим ителдек һәм конкурстан үткәндә лә Башҡортостан ғалимдары, зыялылары, бигерәк тә БР Фәндәр академияһының Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты хеҙмәткәрҙәре ҙур ярҙам күрһәтте, беҙ уларға рәхмәтлебеҙ. Шулай итеп, 2005 йылдың 25 ноябрендә яҡут халҡының героик эпосы олонхо ЮНЕСКО-ның Кешелектең телдән һөйләнгән матди булмаған мираҫы ҡомартҡылары исемлегенә индерелде. Был көн дәүләтебеҙҙә олонхо көнө тип иғлан ителде. Махсус Конвенция талаптарына ярашлы, 2015 йылға тиклем эш планы төҙөлгән һәм уның буйынса ҙур эш алып барыла. Конвенциянан сығып, Яҡутстанда "Олонхоны һаҡлау, өйрәнеү һәм таратыу" тип аталған республика маҡсатлы программаһы ҡабул ителде. Уға ярашлы хәҙер яҡут халҡының героик эпосы барлыҡ киң мәғлүмәт сараларында пропагандалана, "Олонхо донъяһы" тигән махсус сайт эшләй. Олонхо төрки һәм Европа илдәре телдәренә тәржемә ителә.

**Никандр ТИМОФЕЕВ, олонхосут (олонхо башҡарыусы), 77 йәштә:** Һеҙҙә шулай айыуҙар күпме ни? Юҡһа, мин дауаханала бер башҡорт менән бер палатала ятҡайным. Ике ҡулы ла, ике аяғы ла юҡ, әммә үҙе балта оҫтаһы ине. Исемен хәтерләмәйем, әммә уның Башҡортостан айыуҙары тураһында иҫе китеп һөйләгәне әле лә күҙ алдында. Айыуҙарығыҙҙың да үҙенә бер башҡа булыуына хәҙер ышанырға ҡала инде, сөнки танышып өлгөрмәһәк тә, Өфөнөң беҙ күргән урындары матурлығы менән әсир итте. Беҙҙәге ҡалалар менән сағыштырырлыҡ түгел. Хәйер, Яҡутстанда барлығы миллиондан ашыу кеше иҫәпләнһә, һеҙҙең баш ҡалала ғына миллиондан ашыу халыҡ йәшәй...

Үҙемә килгәндә, 65 йәшемдә яҙа-йоҙа ғына олонхоны башҡарыусыларҙың республика конкурсы үтеүе тураһында ишетеп ҡалып, уға үҙемдең ейәнемдә әҙерләнем. Ул конкурста ҡатнашып, гран-при яуланы. Шунан һуң йыл һайын балаларҙы конкурсҡа әҙерләү төп маҡсатым булып китте. Бала сағымда өс ысын олонхосутты тыңларға насип булғайны, балалар менән эшләй башлағас, хәтерҙән уларҙың олонхоны нисек һөйләүен, үҙ-үҙҙәрен нисек тотошон ҡабат соҡоп сығарырға тура килде.

**Петр ТИХОНОВ, олонхосут, 60 йәштә:** Беҙҙең бала саҡта, ғөмүмән, халыҡ ижады, фольклор дәүләт яҡлауын тапманы. Ҡарт олатайым олонхосут булған, әммә һуңынан репрессияланған. Улар мифтарға ышанған, уларҙа ниндәйҙер сер, көс бар, тип һанаған. Ә беҙ икенсе заман кешеләре. Шулай ҙа СССР тарҡалып, республикала милли мәктәпте, милли мәҙәниәтте тергеҙеү программаһы ҡабул ителгәс, ҡапыл ғына олонхо менән ҡыҙыҡһынып киттем.

Донъя халыҡтарының эпостарын ҡараһаҡ та, нигеҙҙә, сюжет бер төрлө, оҡшаш. Уларҙа кеше үҙ халҡына хеҙмәт итергә, ошо бурысын үтәргә тейешлеге күрһәтелә. Икенсеһе инде - халҡына, иманына ышаныу, өсөнсөһө - йәштәрҙе ауырлыҡтарҙы еңергә өйрәтеү. Шуға ла эпостар донъяуи әһәмиәткә эйә, тип уйлайым. 2007 йылда Ҡырғыҙстанда "Манас" эпосына бағышланған сарала ҡатнашырға тура килде. Унда Дағстандың халыҡ шағиры Рәсүл Ғамзатов: "Әгәр иртәгә ҡырғыҙҙарҙың "Манас"ы булмаясаҡ, тип әйтә ҡалһалар, манас халҡы бөгөн үк үлергә тейеш", - тигәйне. Көслө әйтелгән һүҙҙәр. Һәр халыҡтың фольклоры, тарихы бар. Уларҙы һаҡларға, өйрәнергә, сағыштырырға кәрәк. Мин киләсәктә башҡорт халҡының тарихын, фольклорын, өмөтөн, ышанысын ныҡлап өйрәнәсәкмен. Эпостарҙың уртаҡлығын, бөгөн дә көнүҙәк булған әһәмиәтле мәлдәрҙе асыҡлағым килә. Сөнки уларҙың һәр ҡайһыһында ниндәйҙер әһәмиәтле программа ята. Мәҫәлән, беҙҙә бер уртаса олонхо 8 - 10 мең юл тәшкил итә. Шуларҙың дүрт юлын ғына алып ҡарағанда ла, улар фатиха кеүек, доға кеүек яңғырай. Ошо доғаны Саха халҡы бынан мең йыл элек тә ҡабатлаған. Баҡтиһәң, улар бөгөн Рәсәйҙең дүрт өҫтөнлөклө йүнәлешенә тап килә: ғаилә ҡороу, йорт һалыу, ауыл хужалығын үҫтереү, балалар табыу.

**Шәрифә САЛАУАТОВА яҙып алды.**

# КОТЛАЙБЫҘ!

Октябрь айында тыуған көндәрен билдәләүсе уҡыусыларыбыҙҙы - **Стәрлебаш районы** Ибраҡай ауылынан Р. Баһауетдинованы, Мәксүт ауылынан Розалина Назарованы, Ҡуғанаҡбаш ауылынан Илдар Искәндәровты, **Йәрмәкәй районы** Исламбахты ауылынан Рәмзиә Хәкимованы, **Дәүләкән ҡалаһынан** З. Снигиреваны, **Ауырғазы районы** Мораҙым ауылынан Камилә Насырованы, **Ишембай районы** Кинйәбулат ауылынан Рифат Ғәйнетдиновты, **Илеш районы** Үрге Йәркәй ауылынан Раил Мингазовты, Тыпый ауылынан Гөлшат Күсмәеваны, Иҫәнбай ауылынан Ғәмилә Һатыбалованы, **Ейәнсура районы** Абзан ауылынан Айгөл Ғәлиеваны, **Өфө ҡалаһынан** Рушан Хәсәновты, Гөлнара Фәтиховалы, Рәсимә Ураҡсинаны, **Баймаҡ районы** Үрге Йайыҡбай ауылынан Ишдәүләт Сафиуллинды, **Балаҡатай районы** Әшәй ауылынан Мәүлидә Әбүбәкированы, Яңы Балаҡатай ауылынан Ф. Хисмәтованы, Янтыбай ауылынан Гөлбикә Мөхәмәткәримованы, **Миәкә районы** Сәфәр ауылынан Фәйрүзә Абдулованы, **Әбйәлил районы** Амангилде ауылынан Мәғмүрә Хәсәнованы, Латифа Мостафинаны, Сәриә Йәнтүринаны, **Учалы районы** Ҡәйепҡол ауылынан Әҡлимә Абдрахманованы, **Мәсетле районы** Оло Ыҡтамаҡ ауылынан Регина һәм Резида Кәбироваларҙы, Рәзилә Вәлиеваны, Оло Аҡа ауылынан А. Нуриеваны, Яңы Мишәр ауылынан Рәбиға Хәлилованы, Юныс ауылынан Әлфиә Мөнированы, Салауат Мөнировты, **Ғафури районы** Ҡормантау ауылынан М. Муллағәлиеваны, Курорт ауылынан Гөлназ Әбелғужинаны, **Туймазы ҡалаһынан** М. Дәүләтбирҙинаны, **Мишкә районы** Камай ауылынан Лиана Кәримованы, **Архангел районы** Абзан ауылынан Ф. Кинйәғолованы, **Благовещен районы** Осиповка ауылынан Әлфиә Уразаеваны, Бедеева Поляна ауылынан Гөлизә Ҡыуандыҡованы, **Благовещен ҡалаһынан** Луиза Әҙеһәмованы, **Благовар районы** Языково ауылынан Гөлсинә Фәрхетдинованы һәм башҡа уҡыусыларыбыҙҙы ҡайнар ҡотлайбыҙ һәм тән сихәте, йән рәхәте, көтөлмәгән ҡыуаныстар, мул һәм бәрәкәтле тормош теләйбеҙ!

**Изге теләктәр менән, "Киске Өфө"ләр.**

*СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ*

## М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**29 октябрь "Ҡоҙаса"** (Б.Бикбай, З. Исмәғилев), музыкаль комедия
**1 ноябрь "Хыялый"** (С. Әбүзәр), лирик комедия
**2 ноябрь "Нәркәс"** (И. Йомағолов), мелоромантик трагедия
**3 ноябрь "Минең ғаиләм"** (Т. Дәүләтбирҙина), мелодрама
**4 ноябрь "Их, кәләше лә кәләше!"** (Х. Зарипов), музыкаль комедия
**5 ноябрь "Ҡатынымдың исеме Морис"** (Р. Шарт), комедия
**6 ноябрь "Әхмәтзәки Вәлиди Туған"** (Н. Асанбаев), тарихи драма

## Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**3 ноябрь Вәлит Илембәтовтың** юбилей кисәһе
**Башҡортостан Республикаһы филармониялары фестивале**
**7 ноябрь** Сибай дәүләт филармонияһы
**8 ноябрь** Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы
**9 ноябрь** Нефтекама дәүләт филармонияһы
**10 ноябрь** Стәрлетамаҡ дәүләт филармонияһы

*ХОККЕЙ*

# ЮЛАЕВСЫЛАР ҠАСАН ЕҢӘ БАШЛАР?

**Ғәмәлдәге чемпион "Салауат Юлаев" сираттағы һуңғы тур уйынында Мәскәү өлкәһенең Чехов ҡалаһында урындағы "Витязь" командаһы менән көс һынашты.**

Көнбайыш конференцияһында "Витязь" командаһы иң артҡы урында килә. Тимәк, ул йүнләп уйнай алмаусы көсһөҙ командаларҙың береһе. Юлаевсылар шундай команданан 1:2 иҫәбенә отолһон әле! Ояты, хурлығы һәм ғәрлеге ни тора!

"Салауат Юлаев" яңы миҙгелде бик уңышһыҙ башланы һәм әле һаман көрсөк соҡоронан сыға алмай яфалана. "Салауат Юлаев" хоккей клубы етәкселеге һуңғы йыйылышта баш тренер Сергей Михалевтың отчетын тыңланы һәм команда уйынының сифатын яҡшыртыуҙы талап итте. Бының өсөн бик ашығыс эшлекле саралар күрергә кәрәклеге һыҙыҡ өҫтөнә алынды. Әммә команда уйынында ыңғай яҡҡа үҙгәреш һиҙелмәй, ул элеккесә еңелеүен дауам итә.

Дөрөҫ, хоккей клубы ултырышынан һуң бер ни тиклем саралар күрелде. Һөҙөмтәле уйнай алмаған Якуб Клепиш, Роберт Нильсон, Максим Мамин команда составынан бушатылды, улар урынына яңы, йәш хоккейсылар саҡырылды. Әммә бындай саранан йәһәт кенә һөҙөмтә көтөп булмай. Бөтәһенән элек Сергей Михалевҡа Александр Радулов, Сергей Зиновьев кеүек уйынсылар менән уртаҡ тел табырға, уларға ҡарата талаптарҙы арттырырға кәрәк.

Команданың һаҡланыу линияһы бөгөнгө көн талаптарына яуап бирмәй. Һаҡсылар сафын көсәйтеү өсөн ашығыс саралар, йәғни, тағы көслө һаҡсылар табырға кәрәк. Ҡапҡасыларҙың тотороҡло уйнай алмауы ла бәкәлгә һуға. Әйтәйек, Эрик Эрсберг бер нисә уйын барышында ҡапҡа һаҡлауҙан алынды. Виталий Колесник шулай уҡ ҡайһы бер саҡта хаталар ебәреүгә юл ҡуя.

Былтыр лидерҙар рәтендә булған, быйыл иһә бер аҙ аҡһай башлаған командаларҙың баш тренерҙары алмашынды. Әйтәйек, Магнитогорскиҙың "Металлург" командаһы яңы миҙгелде шулай уҡ уңышһыҙ башланы. Яңы баш тренер Федор Канарейкин килеү менән команда уйыны ҡырҡа яҡшырҙы һәм хәҙер ул лидерҙар рәтенә инде. Һуңғы ваҡытта Үҙәк телевидениеның "Рәсәйҙә хоккей" тигән тапшырыуы ла, ҡайһы бер үҙәк гәзиттәр ҙә, хәҙер сират Сергей Михалевҡа етте, тигән имеш-мимеш тарата.

Сергей Михалев үҙенең бер интервьюһында, сәбәпһеҙ үлем булмай, тине. Йәнәһе, һәр ваҡыт еңелеүҙең ҙур сәбәптәре бар. Әммә был һүҙҙәрҙең башҡасараҡ яңғыраүын да иҫәпкә алырға кәрәк. Уны, "Салауат Юлаев" командаһының киләсәге юҡ, тип тә аңларға була. Юҡ, "Салауат Юлаев" командаһының киләсәге бар. Уны тиҙ генә таратып бөтөп булмаясаҡ. Бары тик юлаевсыларға уйын сифатын ҡырҡа яҡшыртырға, яңынан үҙ уйынын табырға һәм лидерҙар төркөмөн тулыландырырға кәрәк.

**Юныс ӘХМӘҘИЕВ.**

СМСНАМӘ - ШИҒРИ ӘЙТЕШ

# ИМАН БӨТҺӘ, ХАЛЫҠ БӨТӘ,

## Иман, халыҡ - бер, буғай...



**Был юлы ла ҡоробоҙҙо тәүге һандарҙағы һорауҙарға яуап биреүҙән башлайбыҙ.**

**НУҒАЙ:**
Милләт айырмайым, тиеп,
Бутап бөттөк милләтте.
Хәҙер инде, Көфө сәсән,
Тешләп булмай терһәкте.
Хәҙер инде балаларға
Теләйбеҙ тик татыулыҡ.
Ҡайһылай ғына булһа ла,
Килһен бәхетле ҡартлыҡ.

**БАТЫР:**
**Минең һорауым бар шундай,**
**Булһын ул файҙа-фәһем**
**(Бәлки, һүҙҙе борамындыр, -**
**Әммә был бик-бик мөһим!)**
**Башҡортлоҡмо иманлылыҡ,**
**Иманлылыҡ - башҡортлоҡ?**
**Иман нимә була һуң ул,**
**Халыҡ?**

**АҠЫҠ:**
Иманһыҙҙар ҡолағына
Һалма элеп китәләр.
Кәк(е)ре ҡайынға һөйәтеп,
Уттай ҮРТӘП ҮТӘЛӘР,
Улар тишек кәмәгә
Шып ултыртып китәләр.
Иман юлын белмәгәндәр,
Бисмиллаһыҙ эшләгәндәр,
Бер һүҙ менән әйткәндә:
Иманһыҙҙар - шайтандар.
Иманлы бул, башҡортом,
Иман анды яҡтыртыр,
Ташламаһын иманын,
Яҡтыртып тор донъяны!

**ДАРМАН:**
Иман халыҡты йәшәтә,
Үҫеш юлынан тайпылтмай.
Ә бөгөнгө иманһыҙлыҡ
Башҡортлоҡҡа тап килмәй.
Башҡортлоҡмо иманлылыҡ?
Һорауың, Батыр, йомаҡ.
Иманлылыҡ - кешелеклек
Бәндәгә фарыз һыҙат.
Бар имандан тайпылғандар,
Халыҡ иманһыҙ булмай.
Иман бөтһә, халыҡ бөтә,
Иман, халыҡ - бер, буғай.

**ЭТКОЛ:**
Иман һүҙен милләт менән бутамайыҡ,
Икеһен бергә бер ҡазанда болғамайыҡ.
Башҡорттоң бар иманлыһы, аҙғыны ла.
Ә ҡояш бер ҡышҡыһын да, яҙғыһын да.
Ике мөфтөй бар инде бит, ҡайҙа булды?
Беҙгә лә бит дин ялғаны килеп тулды.
Икеһе лә быға тиклем тик ығышты,
Көттөләрме Баймаҡтағы ҙур ыҙғышты?
Белемһеҙҙәр тараталар үҙ иманын,
Күрһәтергә тырышалар ялған данын.
Берәүҙәре уҡығандар ғилем өсөн,
Икенселәр уҡығандар килем өсөн.
Аҙғын-йылан күбебеҙҙә саҡҡан инде,
Күнелдәрҙә шайтан түйын аҫҡан инде.
Ошоларҙы белгәндән һуң ҡайнай һарыу,
Көтөп ятһаҡ, кем килтереп бирер дарыу?

**БАТЫР**
Башҡортлоҡмо иманлылыҡ,
Иманлылыҡ - башҡортлоҡ?
Имандың бит шарттары бар,
Беҙгә фарыз ошолор!
Тәүшарт: Аллаһҡа ышаныу,
Табыныуың тик Уға,
Икенсеһе ышаныуың
Фәрештәләр булыуға,
Өсөнсөһө - Хаҡ Раббыңдың
Китаптарын таныуың,
Дүртенсеһе - Бәйғәмбәрҙе
Өлгө итеп алыуың.
Хөкөм көнө барлығына
Инаныуың йәнә шарт,
Ошо Көнгә әҙерләнеп,
Оло Көнгә әҙерләнеп,
Бар көс һалып йәшәп ят!
Яҡшыһы ла, яманы ла -
Барыһы ла Аллаһтан,
Ошо шарттарҙы үтәһәң,
Иншалла, һиндә иман!
Эргәлә әгәр бөгөн
Булһа Бәйғәмбәребеҙ,
Нимә тиер ине икән
Беҙҙең хәлдәрҙе күреп?..

**КӨФӨ:**
**Яйы килгәс уңайға,**
**Һүҙем сәсән Нуғайға:**
**Сит тауышҡа әйәреп,**
**Ҡандан китһә ейәнең,**
**Ысын микән шатлығың,**
**Бәхетлеме ҡартлығың?**
**Мәғәнәһеҙ ғүмерең,**
**Бер көн тормай үлерлек.**
**Бәхәскә бер тотонғас,**
**Һүҙем сәсән Этколға:**
**Нинә диндең ялғаны**
**Беҙҙе килеп ялманы?**
**Көллөгөҙгә һорауым,**
**Кем өлгөрһә, шул алыҡ.**
**Баймаҡтағы бер ағай,**
**Үҙе түгел дә ябай.**
**Ишкуатов Әхмәтйән**
**Шундайын бер һүҙ әйткән:**
**"Илгә бәхет киләсәк,**
**Сабый булып көләсәк,**
**Бар уғрылар фашланыр,**
**Көткән көндәр башланыр...**
**Әгәр илдең башына**
**Президент ташына**
**Килеп баҫһа ҡатын-ҡыҙ..."**
**Ошо хаҡта фекерең,**
**Йә, ни тиеп әйтерһең?**

**Шулай итеп...**
**Әйтеш дауам итә. Әүҙемлекте юғалтмайыҡ, туғандар! Тағатып ебәреү өсөн тос фекер йомғаҡтары тәҡдим итегеҙ. СМС өсөн телефон: 8-917-477-09-74.**

АТЫҢ КЕМ?

# ИСЕМЕНДӘ...

## аҡһаҡалдар аҡылы сағылһын

**Бер танышыма һеҙҙең баҫмалағы ошо "Атың кем?" рубрикаһын ҡарап сығырға кәңәш иттем әле. Ҡолаҡҡа ятышлы ла, мәғәнәле лә булған исем әйтеүемде һораны ул. Был йәһәттән "Киске Өфө"ләге ошо балаларға ҡушылған матур мәғәнәле исемдәр тураһындағы рубрика баһалап бөткөһөҙ бит.**

"Моғайын, матур исем беләһеңдер, кәңәш итсе," - тип туҡтатҡайны мине Тәнзилә апай. "Ейән-ейәнсәрҙәрегеҙ тыуыуы көтөлмәй инә түгелме?" тип аптырауыма, ул ҡул ғына һелтәне.

-Исем ҡушыу - еңел-елпе эш түгел, ентекләп уйларға кәрәк, тип баштан уҡ әйттем бит мин уларға... - апай улы менән киленен әрләүендә ине. Бәҡтиһәң, ейәнсәренең исемен алыштырырға йөрөйҙәр икән. Ейәнсәренә ҡушылған Милана исеменең нимәһе оҡшамауын һорағас, ғаиләләрендә заманса яңғырашлы ошо исемгә бәйле килеп тыуған сетерекле хәл тураһында һөйләп уфтаны:

-Баштараҡ был исем әйтеүгә ятыраҡ булһа ла, аҙаҡ өйрәнгәйнем дә бит, үҫә төшкәс, ейәнсәрем уны үҙе оҡшатманы. Мәктәптә уҡый башлағас, телевизорҙағы бер рекламала ҡатын-ҡыҙҙарҙың кәрәк-ярағы үҙенең исеме менән аталғанын ишетеп, бик ғәрләнде...

Рәхмәт инде был рекламаға, исмаһам, бер башҡорт балаһына ситяттарҙың мәғәнәһеҙ исеменән ҡотолорға ярҙам итте! Кем белә, бәлки, был баланың милли уҙаңының протесылыр? Нисек кенә булмаһын, балаға исем ҡушыуға ата-әсәләр яуаплыраҡ ҡараһын ине, сөнки исем - милләттең төҫө. Шуға күрә сабыйға исем һайлағанда уның енел әйтелешле булыуынан бигерәк, тәрән мәғәнәле булыуы фарыз икәнен онотмаһындар. Рәсүл Ғамзатов һүҙҙәре менән әйткәндә: "Ҡыҙ баланың исемендә йондоҙ балҡыуы йәки сәскәләр нәфислеге, ир-ат исемендә ҡылыстар сыңлауы һәм аҡһаҡалдар аҡылы сағылырға тейеш".

**Гөлкәй СӘМЕРХАНОВА.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ЮҒАРЫ ОСҠАН...

## түбән ҡуныр

Ирҙең нәфсеһе - бер, ҡатындың нәфсеһе - туғыҙ.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Батырлыҡтың шундай ҡапма-ҡаршы яҡтары ла бар: ғүмереңде лә бирергә ризаһың, шул уҡ ваҡытта йәшәү теләгең дә бик көслө.

**(Гилберт Честертон).**

Тормошто тормоштоң үҙенән түгел, китаптарҙан һәм сәнғәт әҫәрҙәренән нығыраҡ тоябыҙ.

**(Теодор Драйзер).**

Теләһә кем ғүмеребеҙҙе әҙәргә мөмкин, әммә бәрәү ҙә үлемдән арындыра алмай.

**(Луций Сенека).**

Үлем нимә икәнен беҙ ҡайҙан беләйек, тормоштоң ни икәнен дә белеп булмай бит әле.

**(Конфуций).**

Ҡартаям тип үкенмә; ҡартлыҡ та һәр кемгә бирелмәй.

**(Огден Нэш).**

Кем үҙенең үткәндәрен хәтерләмәй, уларҙы яңынан кисереүгә дусар ителә.

**(Джордж Сантаяна).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Бер малай йәшәгән. Уның бик хәтәр бер "сире" булған: теле бер туҡтауһыҙ, сама белмәй, һөйләнгән дә һөйләнгән. "Был ниндәй яза булды әле беҙгә? Ҡасан тынысланыр һәм беҙгә ял бирер был тел?" - тип зар түккән тештәр. "Һеҙҙең миндә ни эшегеҙ бар? - тип ярһыған тел. - Сәйнәүегеҙҙе белегеҙ ҙә, тыныгыҙ. Минең һеҙҙең менән бер уртаҡлығым да юҡ. Берәүегеҙгә лә минең эшкә ҡыҫылырға, етмәһә, ахмаҡ кәңәштәрегеҙ менән тығылырға юл ҡуймам!" Шулай итеп, малай урынлыға ла, урынһыҙға ла гәп һатҡан. Ә тел, мәғәнәһенә үҙе лә төшонмәҫтән, туҡтауһыҙ матур-матур һүҙҙәр сәсеүенән кинәнгән. Бер ваҡыт малай һүҙ һөйләү менән шул тиклем мауығып киткән, хатта низелер яңылыш әйтеп, ауыр хәлгә ҡалғанын да аңламай ҡалған. Бәләнән ҡотолоу өсөн ул тебенә күрәләтә ялған һүҙ әйтергә юл ҡуйған. Шул саҡта тештәрҙең дә түҙемлеге шартлаған һәм улар телде шул тиклем ныҡ итеп ҡыҫып алған, тел хатта ҡанап киткән. Теле ауыртыуҙан да, оятышынан да илап ебәргән малай. Бына шунан алып тел үҙен бик һаҡ тота башлаған, малай ҙа ниндәйҙер һүҙ әйтер алдынан ике тапҡыр уйлап ала торған булған..."**

1 582218 911006

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**

Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**

**Мөхәрририәт:**
Әхмәр ҮТӘБАЙ,
Ләйсән НАФИҠОВА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Таһир ИШКИНИН,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Артур БАТЫРШИН.

Беҙҙең адрес:
**450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
Беҙҙең блог: **blog.kiskeufa.ru**
E-mail: **info@kiskeufa.ru**
**kiskeufa@ufacom.ru**

«Башҡортостан» нәшриәте типографияһында баҫылды (450079, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Баш мөхәррир урынбаҫары** | **246-03-24** |
| **Бухгалтерия** | **246-03-23** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 28 октябрь 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44, 246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – **50665, 50673**

Тиражы - 5203
Заказ 4277